*✓ Почтальондар иғтибарына! Матбуғат баҫмаларының гәзит уҡыусыға бары тик почта хеҙмәткәрҙәре фиҙаҡәрлеге менән барып етеүен беләбеҙ, уларҙың хеҙмәтен юғары баһалайбыҙ. 2014 йылдың беренсе яртыһына гәзитебеҙгә яҙылыу барған әлеге мәлдә почтальондарға шундай тәҡдим: кем дә кем 50-80 дана "Киске Өфө"гә яҙҙыра, улар беҙҙең матур бүләктәргә (кәрәҙле телефон, микротулҡынлы мейес, электр ит турағысы, блендер һ. б.) лайыҡ буласаҡ. Бүләктәрҙе алыу өсөн почтальондың үҙе яҙҙырған квитанцияларҙың күсермәләрен редакцияға ебәреүе шарт.*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

23 - 29 НОЯБРЬ (ҠЫРПАҒАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№47 (569)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Ауыҙың һөйләгәндә...** ҡолағың ишетәме?



3

**Аҡтамырҙай халҡыбыҙ...**



Беренсе һүҙ: "Вәлиди хыялындағыға оҡшағанмы бөгөнгө Башҡортостан?"

7

**Һәләтле йәштәр үҫтереү...**



иң ҙур инвестиция инде

8-9

**Тәүге быуын - динһеҙ...**



икенсеһе - телһеҙ

12-13

14 **ТВ-программа**


*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## *Әсәйҙәр, әсәлек тураһында һөйләшеп алайыҡ әле. Үҙегеҙҙең әсәйегеҙ тәрбиәһен нисек хәтергә алаһығыҙ? Ғөмүмән, Милләт әсәһе ниндәй булырға тейеш, тип уйлайһығыҙ?*



***Фәриҙә МИҺРАНОВА, Өфөнөң М. Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһының башҡорт теле уҡытыусыһы:*** Яҡты донъяға тыуыр алдынан әсә ҡарынында ике игеҙ бала һөйләшә икән. Береһе әйтә: "Беҙҙең өсөн ожмах тамам, хәҙер инде беҙ тамуҡҡа юл тотабыҙ!" Икенсеһе уға яуап итеп: "Ҡуй, туғаным, юҡты һөйләмә! Унда бит беҙҙе ҡояштай әсәйебеҙ көтә!"- ти. Ысынлап та, донъяға килгән сабыйҙарыбыҙ был донъяны тамуҡ тип түгел, ожмах тип ҡабул итһен өсөн Хоҙай Тәғәлә беҙҙең иңебеҙгә бик оло вазифа йөкмәткән. Әлбиттә, бөгөнгө көндә бар ҡатын-ҡыҙҙар ҙа ошо вазифаны етерлек кимәлдә үтәй, балалары күңелен ҡояш кеүек нурлай, йылыта, тип әйтеп булмай. Йәш әсәләрҙең сабыйҙарын бала табыу йорттарында ҡалдырып китеүе тураһында ишетеп торабыҙ. Интернет селтәрҙәрендә үҙ балаларына ҡул һалған әсәләр тураһында уҡып, йөрәк шаңҡый. Ошондай вәхшилектәр тураһында ишетһәм, беҙҙе тәрбиәләп үҫтергән ҡәҙерле әсәйебеҙҙе, ябай ауыл ҡатындарын иҫкә төшөрөп, рәхмәттәр яуҙырам. Әсәйем Тәғзимә Заһит ҡыҙы миңә ғүмер буйы ҡояшты хәтерләтә. Ул бер ҡасан да тауыш күтәрмәне, әммә матур, күркәм тәрбиә бирә алды. Уның кәңәштәре гел генә ҡолағымда сыңлап тора: "Һиңә таш менән атһалар, һин уларға аш менән яуап бир, балам!", "Башҡаларға һис ҡасан ауыр һүҙ әйтеп, күңелдәрен ҡырма!". "Олоно - оло, кесене - кесе тип бел!" Әсәйем ысын ҡатын-ҡыҙ була белде. Атайымдың һүҙен һәр саҡ өҫтөн ҡуйҙы. Һәр мәсьәләгә үҙенең ҡарашы булыуына ҡарамаҫтан, һуңғы һүҙҙе атайҙан әйттерҙе. Шулай ҙа үҙең әсә булмайынса, әсәй ҡәҙерен белмәйһең икән. Мин дә үҙем ғаилә ҡорғас, ата-әсәмдең күркәм сифаттарын дауам итергә ынтылдым. Ике улыма дуҫ, серҙәш, таяныс булырға тырышам. Балалар бәхетле булғанда ғына беҙ, ата-әсәләр, бәхетле тигәнгә инанып йәшәйем. Уҡытыусы булараҡ, балаларымда белемгә ынтылыш, хеҙмәткә һөйөү тәрбиәләйем. Үҙ балаларыма теләгән сифаттарҙы уҡытҡан уҡыусыларымда ла күрергә теләйем.

Әсә булараҡ, шуны аңланым: беҙгә бөгөн Әсәләр мәктәбе етмәй. Хәлемдән килһә, "Һылыуҡай" конкурсы уҙғарғансы, Әсәләр конкурсы уҙғарыр инем. Башҡортостаныбыҙҙа өлгө булырҙай күпме данлыҡлы әсәләр бар! Улар балаларына рухлы, матур тәрбиә бирә алған, илебеҙгә бихисап шәхестәр үҫтергән! Ғөмүмән, беҙҙең башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары үҙенең күркәм сифаттары менән һәр саҡ айырылып торған. Өс бала үҫтергән, төрки ҡатын-ҡыҙҙары араһында трилогия ижад иткән беренсе ҡатын-ҡыҙ, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишева үҙе ни тора! Ҡояш ул беҙҙең өсөн! Беҙ бөгөн Зәйнәб Биишева исемен йөрөткән урамдан атлап уҙабыҙ, Зәйнәб Биишева исемен йөрөткән китап нәшриәтенән китаптар һатып алабыҙ. Ҡояш кеүек офоҡ артына күсһә лә, әҙибәнең яҡты нуры беҙҙең күңелдәрҙе йылыта...

Һәйбәт әсә булыу кешенең үҙенән торалыр, шулай ҙа Хөкүмәт кимәлендә хәл ителергә тейешле мәсьәләләр ҙә юҡ түгел. Хәлемдән килһә, мин йәш әсәләргә өс йәшкә тиклем мотлаҡ рәүештә аҡсалата өҫтәмә түләр инем. Әсә кеше өс йәшенә тиклем балаһы менән бергә булһа, баланың теле үҙ туған телендә асылыр ине. Туған телендә һөйләшә белмәгән, халҡының ғөрөф-ғәҙәттәрен һанға һуҡмаған балалар үҫтереп, Милләт әсәһе булып булмайҙыр ул. Ғөмүмән, әсә кеше мохтажлыҡ кисермәй, өйҙә генә үҙ балаһын тәрбиәләй алһа, балаларыбыҙ замана сирҙәренән ҡурсаулы булыр ине.


**(Дауамы 2-се биттә).**


*АЛДАЙҘАР!*

# АСЫҠ АУЫҘ БУЛМА!



**Йома көндө кисен телефоным шылтыраны. Ейәнемдең тауышы. Иламһырап: "Әсәй, бәлә, мин машинам менән бер ирҙе бәрҙереп киттем. Әле мин полиция бүлегендә. Әсәй, һин нык борсолма һәм был хәл тураһында бер кемгә лә һөйләмә", - тине ейәнем. Шул саҡ телефонда таныш булмаған ир тауышы яңғыраны һәм: "Һеҙҙең улығыҙ 58 йәшлек ирҙе бәрҙереп китте. Ул ир күп яралар менән дауаханаға оҙатылды... - тине. Шунан тағы: "Һеҙҙең исем-шәрифегеҙ нисек?" - тип һораны.**

Иң тәүҙә "Бына беҙҙең өйөбөҙгә лә ҡайғы-хәсрәт инде", тигән уй ялтлап үтте башымдан. Шунан бер-бер артлы шикле һорауҙар барлыҡҡа килде. "Бер ҡасан да ейәнем миңә "әсәй" тип өндәшмәй, "нәнәй" бит мин уға", - тип уйланым башта. Икенсенән, полицияға эләккән икән, ниңә минең исемемде ейәнемдән һорамайҙар? Ошолай тип уйлап та өлгөрмәнем, теге ҡалын тауышлы ир шулай тип хәбәр һалды: "Һеҙ беҙгә 50 мең һум аҡса алып килегеҙ, шул саҡ бөтәһен дә йомоп, йәшереп ҡаласаҡбыҙ..."

"Бәй, алдайҙар бит былар мине!" тип саҡ ҡысҡырып ебәрмәнем. Әле кисә генә телевизорҙан ошондай уҡ алдауҙар тураһында иҫкәрткәйнеләр. Тыныслана төштөм. Ҡыҙыма шылтырата һалып, ейәнемдең өйҙәме-юҡмы икәнлеген һораштым. Уның өйҙә икәнен ишетеп, тынысландым, шулай ҙа дарыу эсергә тура килде...

Икенсе көндө иртән телефоным тағы шылтыраны һәм унан "Әсәй, бәлә!" тигән иламһыраған тауыш ишетелде. Тыңлап бөттөм дә, телефондың теге яғындағыларға: "Һеҙ дөрөҫ уйнамайһығыҙ. Бөгөн бит һеҙ минән "Аҡса таба алдығыҙмы?" тип һорарға тейеш инегеҙ", - тигәйнем, бәйләнеш өҙөлдө. Әлбиттә, йөрәгемде әрнетеп, телефон аша ишетелгән иламһырау тауышы ҡолағымда байтаҡ сыңлап торҙо...

Был хәлде әхирәтемә һөйләгәйнем, ул бер танышының аталған урынға йүгертеп аҡса алып барыуы, аҙаҡ ҡына алданыуын аңлауы тураһында һөйләне. Был енәйәтселәр ойошмаһы ниңә һаман фашланмай, ҡулланған алымдары ла бик үк аҡыллы түгел даһа, тип аптырала, әлбиттә. Ә шулай ҙа алдауҙарға алданғандар тағы ла ныҒыраҡ аптырата.

**Айгөл АХУНОВА.**

*✓ Ул балаларын үҙенең милли рухында лайыҡлы итеп тәрбиәләп үҫтереп, үҙ милләтендәге кеше менән ғаилә ҡорҙороуға өлгәшеүсе һәм үҙ милләтендәге ейәндәренә өләсәй булыусы, улар менән туған телендә аралашыусы кеше лә.*



ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# ҠАТМАРЛЫ КЕҮЕК...

## ләкин ауыр түгел



**Гәзит биттәрендә ошо рубрикала аҡса эшләүҙең төрлө юлдары яҡтыртылды. Ҙур ҡыҙыҡһыныу менән уларҙы уҡып барам һәм халыҡтың заманаға һылтанып, зарланып ултырмайынса, нисек тә булһа һәйбәт итеп йәшәргә тырышыуын күреп һоҡланам. Уйланым да, үҙемдең нисек аҡса эшләүем хаҡында яҙырға булдым. Быңдай ысул менән бер мин генә аҡса йүнләмәйемдер, әлбиттә, шулай ҙа әлегә тиклем гәзиттә яҡтыртылмаған, ҡулыма ҡәләм алдым.**

Үҙем дәүләт ойошмаларының береһендә хеҙмәт итәм. Эш хаҡым 20 мең. Кем өсөндөр был әҙ, кемгәлер, киреһенсә, бик күп күренәлер, ләкин шәхсән миңә, һәйбәт тормош көтөр өсөн, был ғына аҡса етмәй. Аяҡ-ҡулы иҫән-һау, типһә тимер өҙөрлөк ир-егет, минеңсә, бер ҡалыпҡа һалынған график буйынса ғына эшкә барып, эштән ҡайтып, айҙың билдәле генә көндәрендә эш хаҡы көтөп ятырға тейеш түгел. Ғаиләһен бер ниндәй мохтажлыҡҡа дусар итмәй, ата-әсәһенә ярҙам итеп, һәр көндөң ҡәҙерен белеп йәшәүсе ир-егеттәр һәр саҡ оло ихтирамға лайыҡ булып ҡаласаҡ. Мин дә улар иҫәбендә булырға теләйем һәм быңың өсөн бар тырышлығымды һалам.

Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы, мин 20 меңемә өҫтәп, ай һайын кәмендә 50-70 мең аҡса табам. Был аҡсалар күктән яумай. Улар кеҫәмә инеп ятһын өсөн йүгерергә, төн йоҡоларымды йоҡламаҫҡа, һауа торошо менән иҫәпләшмәҫкә тура килә. Мин ер биләмәләре һәм фатирҙар һатып алам һәм уларҙы юғарыраҡ хаҡҡа һатам. Һәр килешеүҙән минең кеҫә ҡалыная, сөнки ер ҙә, фатир ҙа бер ҡасан да үҙ актуаллеген юғалтмай. Ләкин был эш менән булышыу өсөн сос, уяу, күсемһеҙ милек баҙары эшмәкәрлеге хаҡында яҡшы белергә, тауарыңды "этәрә белеү" оҫталығына эйә булырға тейешһең. Эште башлап китеү өсөн ҙур ғына күләмдә аҡса ла кәрәк. Мин тәүге ер биләмәһен алыу өсөн банктан кредит алдым. Ул ваҡытта эш хаҡым 8 меңдән дә артмай ине, шуға күрә билдәле банктар минең менән һөйләшеп тә торманы һәм кредитты ҙур процент менән ул ваҡытта яңы баш ҡалҡытып килгән эреле-ваҡлы банктарҙың береһенән алырға тура килде. Минең был аҙымымды яҡындарым хупламаһа ла, ҡаршы өндәшеүсе булманы. Тәүге ер биләмәһен алып-һатыу уңышлы ғына килеп сыҡты тип әйтергә кәрәк, кеҫәмә 10 мең һум инеп ятты. Артабан бер юлы икешәр-өсәр биләмә менән эш итә башланым, кредитымды яптым һәм бер аҙ аҡса туплап, фатир алдым. Ремонт эшләгәндән һуң уны ҡыйбатыраҡҡа һатып ебәрҙем. Шулай итеп, эшем алға китте. Бер аҙҙан үҙебеҙ ҙә фатирлы булдыҡ, машина һатып алдыҡ, сит илдәргә ял итергә сыға башланыҡ.

Бына ошо минең аҡса эшләү юлым. Тәү ҡарашҡа ҡатмарлы күренһә лә, айышына бер төшөнөп алһаң, әллә ни ауырлығы юҡ. Ләкин, алдан әйтеүемсә, был эш уяулыҡ һәм сослоҡ талап итә. Шулай уҡ төрлө мутлашыусыларҙан да һаҡ булырға кәрәк.

**Фәнүр СОЛТАНОВ,**
**Өфө ҡалаһы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### *Әсәйҙәр, әсәлек тураһында һөйләшеп алайыҡ әле. Үҙегеҙҙең әсәйегеҙ тәрбиәһен нисек хәтергә алаһығыҙ? Ғөмумән, Милләт әсәһе ниндәй булырға тейеш, тип уйлайһығыҙ?*

**(Башы 1-се биттә).**

**Миңлегөл ХИСАМОВА, шағирә:** Һуғыш яраларынан мандый алмаған атайыбыҙ әхирәткә күскәс, әсәйебеҙ ҡулындағы ике ҡыҙы менән (миңә - 4, Зөһрә һылыуыма 1 генә йәш була) йәп-йәш көйө тол ҡала. Һылыуым менән беҙгә атай наҙы татып, атайға арҡаланып үҫергә насип булманы, әммә әсәйем беҙҙе етемһерәтмәне, ел-ямғыр тейҙермәй, бер мохтажлыҡ күрһәтмәй үҫтерҙе - ҡыҫҡаһы, ул беҙгә әсәй ҙә, атай ҙа булды. Ә ҡайҙа ғына һәм кем булып ҡына эшләмәне ул: һуғыш йылдарында тракторсы ла булды, торф та сығарҙы, һауынсы ла, хисапсы ла булды... Ауыл халҡы ихтирам итте әсәйебеҙҙе - бер нисә саҡырылыш район советына депутат итеп тә һайланды ул. Ә беҙҙең өсөн әсә абруйы бөтә нәмәнән дә өҫтөн булды, уның һүҙе закон ине беҙгә. Йәшлеге һуғыш йылдарына тура килеп, үҙе 4 кластан ары уҡый алмағанлыҡтан, күрәһең, һылыуым менән икебеҙгә лә юғары белем алырға ярҙам итте. Моңло итеп йырлауы, гармунда өҙҙөрөп уйнауы, гәзит-журналдар алдырып, уҡып барыуы, үҙенең дә матбуғатта шиғыр һәм мәҡәләләре менән сығыш яһауы беҙҙе ижад донъяһына алып килде лә инде. Бында инде туранан-тура әсәйебеҙ йоғонтоһо бар. Ошонан сығып, мин әсә культын, уның төп абруйын балаға тәрбиә биреүҙә генә түгел, ә уның киләсәгенә шытымлы орлоҡ һала белеүҙә, бала яҙмышына йүнәлеш бирә белеүҙәлер, тип тә уйлайым.

Милләт әсәһе ниндәй булырға тейеш, тигән һорау бик киң һәм оло бурыстарҙы үҙ эсенә алһа ла, уның нигеҙе бик ябай һәм һулыш алыуыбыҙ кеүек үк тәбиғи: тәрбиә балаларың менән үҙ телеңдә аралашыуҙан, башҡорт халыҡ әкиәттәрен уҡыуҙан һәм бишек йырынан башланалыр, тигән фекерҙәмен. Иленде, халҡыңды, туған телеңде яратыу һәм уларға ихтирам ата-әсәңде, ғаиләңде баһалай белеүҙән, уларға булған мөхәббәттән юл ала бит...

**Рәүеф БИКТАШЕВ, хеҙмәт ветераны, Сибай ҡалаһы:** Үҙ әсәйемдән бик иртә етем ҡалдым: миңә ул саҡ ни бары 6 йәш тирәһе генә ине. Шулай ҙа әсәйемдең наҙлы ҡулдары йылыһы, мине һөйөп-иркәләүҙәре мәңге йөрәгем түрендә һаҡланып ҡалды. Бәләкәй булһам да әсәйемдең иҫ киткес уңғанлығын, эшсәнлеген бик яҡшы хәтерләйем, сөнки күп ғаиләләр аслыҡтан интеккәндә, беҙҙең солан тулы ашҡабаҡ һәм башҡа йәшелсә, баҙыбыҙ тулы картуф була торғайны. Ул саҡ беҙ Ейәнсура районының Икенсе Назар ауылында йәшәнек. Беҙҙең халыҡ йәшелсә үҫтереү менән мауыҡмаһа ла, әсәйем Мәхмүзә Ҡолмурзинаның был яратҡан шөғөлө булды. Уға ҡарап, беҙ ҙә тик ултырмайбыҙ: апайым менән бергәләп ҡый үләне утайбыҙмы, йәшелсәгә һыу ташып һибәбеҙме - яратып, маҡтап, беҙҙе дәртләндереп торған әсәйебеҙ етәкселегендә бөтә эштәрҙе лә башҡара инек. Атайыбыҙ көнө-төнө тимерлектә, уны йүнләп күрә лә алмайбыҙ, ә әсәйебеҙ гел беҙҙең менән, шуға ла тормошҡа ҡарашыбыҙҙы булдырыуҙа, кешеләр менән мөнәсәбәттәр ҡороуҙа әсәй тәрбиәһен, әсәй йоғонтоһон башҡа бер ни менән дә алыштыра алмаҫлыҡ тормош мәктәбе булды, тип иҫәпләйем.

Әсәйем биреп өлгөргән хеҙмәт күнекмәләре, унан күскән тәбиғи эшсәнлек, тырышлыҡтың үгәй әсә ҡулына ҡалғас бик кәрәге тейҙе лә инде. Үгәй әсәй бер ҙә йәлләп, наҙлап, маҡтап торманы - фәҡәт йүгертте генә. Уның ҡарауы, эшләп үҫеүем үҙемә киләсәкке тормошомда файҙаға ғына булды. Юғары уҡыу йортон тамамлап, уҡытыусы булыуымдан тыш, мин әллә күпме һөнәргә эйә инем инде. Шунан сығып, хәҙерге әсәләргә әйтер теләгем дә бар: баланы йәлләп, артыҡ иркәләп, эш ҡушмай өйрәтергә ярамай. Аҙаҡ был баланың үҙенә бик ҙур зыян килтерәсәген аңлау кәрәк. Шөкөр, үҙемдең балаларым да, уларҙан ҡала ейән-ейәнсәрҙәребеҙ ҙә уңғандар, тырыштар: ҡулдарынан килмәгән эштәре юҡ. Милләт әсәһе тип әйтеүгә лайыҡ тормош иптәшем Әминә Вәли ҡыҙының да, Милләт атаһы булырға ынтылған үҙемдең дә әсә һөтө аша килгән уңғанлыҡ гендарының өҫтөнлөк итеүе тип иҫәпләйем быны.

**Һөйөндөк АҪЫЛОВ, журналист:** Әсәйебеҙҙең беҙҙе махсус рәүештә тәрбиәләп ултырғанын бөтөнләй хәтерләмәйем. Ә бына ғаилә эсендә әсәйебеҙ барлыҡҡа килтергән мөхит, йәшәү, уҡыу һәм эш шарттары барыһы ла беҙҙе тәрбиәләүгә йүнәлтелгән булғанын хәҙер яҡшы аңлайым. Был иң беренсе нәүбәттә йорт эсендәге һәм тышындағы эштәрҙе бүлешеп башҡарыуға ҡайтып ҡала ине. Апайҙар һәм һеңлекәштәр өй эсендәге эштәрҙе башҡарһа, беҙ, малайҙар, тышта эшләнек. Айырым осраҡтарҙа, әйтәйек, беребеҙ тәртип боҙһа йә яҡшы ғәмәл башҡарһа йәки башҡа төрлө осраҡта әсәйебеҙ хәл-ваҡиғаның характерына ҡарап, атайыбыҙҙың исемен телгә алып, мөнәсәбәтен белдерә ине. Әйтәйек, "атайың күреп ҡалһа", "атайың нимә тиер бит әле?", "атайыңдан һораш", "атаңа оҡшап" тигән һүҙбәйләнештәре һаман да ҡолаҡ төбөндә яңғырап тора.

Әсәйебеҙҙең үҙенә генә хас беҙгә йоғонто яһау алымдарының береһе беребеҙҙе икенсебеҙгә өлгө итеп ҡуйыуы булды шикелле. Был осраҡта ла ул ике яҡты ла кәмһетмәҫкә, мөмкин тиклем еңелерәк мөғәмәлә итергә тырыша торғайны. Әсәйебеҙҙең мәңге онотоп булмай торған тағы ла бер ҡыҙыҡлы тәрбиә алымы иҫтә тороп ҡалған. Улар кис йоҡларға ятҡас, икенсе бүлмәләге беҙҙең әүен баҙарына китеүебеҙҙе, ысынында, һаман да йоҡлап китмәүебеҙҙе тоҫмаллап, беҙгә, һәр ҡайһыбыҙға үҙҙәренең баһаларын биреп сыға торғайны. Шуныһы ҡыҙыҡлы, улар быны юрый, беҙ ишетерлек итеп ҡысҡырып әйтә ине. Иң тәүҙә әсәйебеҙ: "Атаһы, ҡулдағы бармаҡтарҙың ҡайһыһын тешләһәң дә ауырта. Шулай ҙа балаларыбыҙ араһында кемде беренсе урынға ҡуяһың?" -тип һүҙ башлай. Шунан башланып китә ине уларҙың бәхәсе. Әлбиттә, улар был саҡта барыбыҙҙы ла маҡтап сыға, шулай ҙа кинәйәләп кенә һәр ҡайһыбыҙҙың етешһеҙ, кире яҡтарын да һанап сыға торғайны. Беҙгә, йоҡоға һалышҡан балаларына, бигерәк ҡыҙыҡлы ла, нәзәкәтле ине уларҙың төнгө диалогын тыңлауы.

Ә Милләт әсәһе ниндәй булырға тейеш, тигән һорауға мин иң тәүге шарт итеп үҙ милләтендәге иренән үҙ милләтенә һаулығы һәм мөҙҙәте еткәнсе балалар тыуҙырыусы әсәне атар инем. Икенсенән, ул балаларын үҙенең милли рухында лайыҡлы итеп тәрбиәләп үҫтереп, кеше итеп, шулай уҡ үҙ милләтендәге кеше менән ғаилә ҡорҙороуға өлгәшеүсе һәм үҙ милләтендәге ейәндәренә һәм ейәнсәрҙәренә өләсәй, ҡартәсәй булыусы, улар менән туған телендә аралашыусы кеше лә. Әгәр ҙә ошо шарт үтәлмәй ҡалһа, ул әсә милләт әсәһе булыуҙан туҡтай. Икенсе бер милләт вәкиленә әсәй, өләсәй булған кешенең Милләт әсәһе тигән бөйөк исемде йөрөтөргә хаҡы-хоҡуғы юҡ тип иҫәпләйем. Был - аксиома. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына был йәһәттән бер тәҡдимем дә бар. Ул да булһа - "Милләт әсәһе" тигән маҡтаулы исем һәм миҙал йә орден булдырыу. Уларҙы юғарылағы шарттарға тап килгән әсәләргә генә тапшырыу фарыз.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Республика һәм илде үҫтереүгә лайыҡлы өлөш индергән 42 кеше Президент Рөстәм Хәмитов ҡулынан миҙалдар алды. Бүләкләнеүселәр араһында Салауат Юлаев орденына лайыҡ булған күренекле яҙыусы Мәрйәм Бураҡаева ла бар. "Һәләкәткә тарыусыларҙы ҡотҡарған өсөн" миҙалын Ишембай районының Әхмәт-Зәки Вәлиди исемендәге 2-се башҡорт гимназия-интернатының һигеҙенсе класында уҡыусы 14 йәшлек Айнур Ғәлиев алды. Республика Президенты уға планшетлы компьютер бүләк итте.

✓Өфөлә баш ҡала автоинспекцияһы 20 һәм 25 ноябрҙә билдәләнгән Бала көнө һәм Әсә көнөнә арнап бүләктәр - балалар креслолары тапшырыу акцияһы үткәрҙе. Акция Өфөнөң 8-се бала табыу йортонда уҙҙы. Бер ай элек быға оҡшаш сараны автоинспекторҙар 6-сы бала табыу йортонда үткәрҙеләр һәм ҡаланың бөтә бала табыу йорттарын солғап алырға ниәтләнәләр.

✓2014 йылда Башҡортостандың һөтсөлөк фермаларын комплекслы яңыртыу буйынса республика маҡсатлы программаһында 70-ләп ауыл хужалығы предприятиеһы ҡатнашырға планлаштыра. Ике йылда "500 ферма" программаһын тормошҡа ашырыуҙа 133 һөтсөлөк фермаһы һәм тоҡомсолоҡ буйынса сервис хеҙмәте ойоштороусы 1 предприятие ҡатнашты. Әлеге ваҡытҡа 66 һөтсөлөк фермаһы яңыртылған, 25-е 2014 йылда яңыртылып бөтәсәк.

✓БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Лилиә Ғүмәрова етәкселегендә БР-ҙа Мәҙәниәт йылын үткәреү буйынса ойоштороу комитеты тематик йылдың эмблемаһын раҫланы. Комиссия ҡарары менән төрлө форматтарҙа образлылыҡ, асыҡ, сағыу, ыҡсым һәм еңел уҡылыу планында "Эврика. Куда пойти учиться" журналы мөхәррире Азат Фәйзиевтың эше иң яҡшыһы тип танылды. Ул йылдың рәсми символикаһы сифатында раҫланды.

✓ 20 ноябрҙә Башҡортостан территорияһында янғынға ҡаршы режим индерелде, ул 2014 йылдың 10 ғинуарына тиклем дауам итәсәк. Был турала бойороҡҡа республика Хөкүмәтендә ҡул ҡуйылды.

*✓ Башҡорт теленең рус теле менән бер статуста икәнен дә ишетергә теләмәне. Сөнки уны был ерҙә үҙен аҫабаларҙан да аҫабараҡ итеп күрергә өйрәткәндәр. Ә ҡайһы бер ысын аҫабалар, үҙҙәрен ҡайҙандыр ҡасып килгәнбеҙ, тип уйлай.*



*ИШАРА*

**Һүҙ башына бындай һорау ҡуйыу өсөн етди сәбәп кәрәк булһа, тормошта улар көн дә тыуып тора. Тамған тамсы таш тишә, тигәндәй, миндә лә шуларҙы гәзит битенә "тишеү" теләге уянды.**

# АУЫҘЫҢ ҺӨЙЛӘГӘНДЕ...

## ҡолағың ишетәме?



...Ҡорбан ғәйете ине. Баҡыйлыҡҡа киткән яҡын кешебеҙҙең ҡырҡ көнөнә тап килде был байрам. Күмәкләшеп, уның тыуған ауылында йыйылдыҡ. Иҫкә алыу мәжлесенә йәштәрҙең күп килеүе бик мәслихәт булды. Күрше ауылдан саҡырылған мулла ғына бер аҙ көттөрҙө. Көткән кешенең ваҡытын бик иҫәпләп бармайбыҙ шул, ҡыҙғаныска ҡаршы. Менталитетыбыҙ шулайыраҡмы икән? Һәр хәлдә, мулланың билдәләнгән ваҡытҡа килеп өлгөрмәүе ғәйепкә лә һаналмаһы шикелле. Шулай ҙа үкенесле был хәҡиҡәтте билдәләп үтмәү яҙыҡ булыр ине, ҡулға ҡәләм алғас. Диндар кеше булмаһам да, Ҡөрьән аяттарын мин дә яратып тыңлайым. Уны уҡыусыһының тауышы моңло, һүҙҙәре аңлайышлы булһа, тәндәрем рәхәтлек кисереп, күңелем тыныслыҡҡа солғанып кинәнә.

Яттан уҡымаһа ла, апаруҡ һупалағандай итә ләһә, тип ултырам мулланың доғаларын тыңлап. Сүрәләрен уҡып, төшөнсәһен аңлата торғас, онотолоп, донъяуи мәсьәләләргә лә төшөп китә был. Һуңлап килеү сәбәбен ҡыш уртаһындағылай ҡоторған буранға һылтап, тәҙрә аша ишараларға онотмай үҙе шулай ҙа. Елмерҙәк һыртының көнсығыш яғына ҡыш сентябрҙә килһә лә бик аптырамайбыҙ ул беҙ, өйрәнелгән. Тәбиғәтенең гүзәллегенә ҡушып, ҡырыҫлыҡ та йомарт һалынған шул Урал тауҙарына. Кендек ҡаныбыҙ тамған ер ниндәй булһа ла, әсә күкрәгеләй йомшаҡ, йылы, тип һөйөнәбеҙ, һөйәбеҙ уны. Борон-борондан ата-олаталарыбыҙ һайлаған төйәк бит! Ләкин беҙҙең мулла улай уйламай икән әле: "Был йәһәннәм соҡорҙарын беҙҙең халыҡ ҡасып килеп ауыллаған бит", - тип һалдырмаһынмы ултыра торғас. Әлеге лә баяғы, октябрь буранының сәбәбен аҡлағандай. Үәт, ишетмәһәң, ишет иҫке ауыҙҙан яңы һүҙҙе!

Хоҙай Тәғәлә тарафынан бирелгән, ожмах итеп күргән Уралы өсөн башҡортҡа бер ҡасан да йәне лә, тәне лә йәл булмаған. Ул был ерҙәргә ҡасыпмы, ҡыуылыпмы, әллә үҙ ирке менән килеп төйәкләнгәнме икәнен уйлап ҡарар ине кеше һүҙ һөйләр алдынан. Ҡайҙа булған ата-бабаларыңдың рухын аяу, тыуған халҡыңдың тарихына һаҡсыл ҡараш? Мулланың хатаһын мөмкин тиклем төҙәтеп ҡалырға тырыштым тырышыуын. Ләкин керешенән ысҡынған уҡты тотоп буламы, ҡаҙалған урынынан йолҡоп ҡына алмаһаң. Бындай мәжлестә һүҙ алып, оҙон-оҙаҡ итеп һөйләй торған трибуна ла ҡуйылмай. Шулай ҙа был һүҙҙәрҙе мулла кеше аңлы килеш, яуыз уй менән әйткәндер, тип уйлауҙан йыраҡмын. Тик шуныһы. Иңенә алған бурысы һәр саҡ халыҡ араһында булырға мәжбүр итә уны. Башҡа урындарҙа ла дөрөҫлөккә тап килмәгән мәғлүмәт таратып йөрөһә, харап таһа! Бындай вәғәздәр зыянлы булыу ғына түгел, хатта зарарлы ла.

Ҡөрьән уҡып йөрөүсе ҡарты ла, йәше лә күбәйеп китте хәҙер. Дини күҙлектән сығып ҡарағанда, был яҡшылыр ҙа. Тик ислам йолаларынан айырмалы, беҙҙең милли йолаларыбыҙ ҙа бар икәнен уларҙың барыһы ла белә, таный, тип кем әйтә ала? Берәү ҙә! Бындай кешеләрҙе кем мулла итеп тәғәйенләй ҙә, кем аттестациялай? Вәғәздәрҙең йөкмәткеһе өсөн тағы кемдәр яуаплы? Ерҙәге ҡолдарына төшөргән Алла һүҙен һөйләүсе ауыҙынан сыҡҡан ялғанды ла ысын итеп ҡабул итергә әҙер тороусы асыҡ ауыҙҙар аҙмы ни?!

Христиан руханиҙарының да, ислам динен атҡарыусы муллаларҙың да, үҙ эштәренән тыш, юҡҡа сыҡҡан "Белем йәмғиәте" лекторҙарының урынын яулай барғаны көн кеүек асыҡ. Элекке атеистарҙың бер өлөшө лә дин юлынан китеүен иҫәпкә алып, сәйәсәттең алғы һыҙығын бөгөн руханиҙар биләй барыуын танымау мөмкин түгел. Тейешле кешеләргә уйланырлыҡ урын етерлек был мәсьәләлә. Был - бер.

Үткән ҡыш дауаханала, асыҡ ауыҙ тип әйтә алмайым, һәр хәлдә, дипломлы "үҙебеҙҙең" кешенең тыуған халҡын кәмһеткән анекдоттар һөйләп, ауырыуҙарҙың күңелен асыуына шаһит булдым. Бынан да түбәнерәк рухи бөлгөнлөккә төшөүҙе мин күҙ алдына ла килтерә алмаҫ инем. Аңлаштыҡ. Ярай ҙа айырылышҡансы башҡаса ундай әшәкелек һөйләүе ишетелмәне. Ә һуңынан? Быныһы - ике.

Ике осраҡта ла бер кем дә ҡулыбыҙға балта тоттороп, тамырыбыҙға сабырға ҡушмағайны лаһа. Ғәйепте ҡайҙан эҙләргә? Үҙ-үҙебеҙҙе һаҡларлыҡ ихтыярыбыҙ, саҡ ҡына ла ғорурлығыбыҙ ҡалманымы икән ни? Ана, әрмәндәр хатта мыйыҡтарын да милли ғорурлыҡ кимәленә күтәрә. Ә беҙ?

Өсөнсөнән, милли мәсьәләне дөрөҫ аңларға теләүсеһе булыуы ла шарт бит әле. Алда килтерәсәк миҫалдағыса, ҡаныбыҙға һеңдерелгән милли хәтерҙе юйҙырыу көсө баҫамы беҙҙе һаман?

Йәйҙең йәмле бер көнө. Крайҙы өйрәнеү музейы күтәрмәһенән күренгән Урал тауҙарына ҡарап, һоҡланып торам. Көтмәгәндә килеп туҡтаған машина ишегенән күптәнге танышымдың башы күренде. Ауыл Советы рәйесе булып йөрөгән еренән тағы ла юғарыраҡҡа үрләтелгәйне ул "башы шәп эшләгәс". Күрешеп, хәл-әхүәл белешәбеҙ. Музейҙың тағы бер хеҙмәткәре үҙ эше менән беҙҙең янда урала, һүҙ араһында әңгәмәгә ҡушылып китә. Хаҡлы ялда булһа ла, ҡаңғыр-көңгөр минең менән бергә эшләп йөрөүсе тағы берәү бар ине эргәлә. Татыу ғына эшләп йөрөйбөҙ уның менән дә. Күрәһең, уҫаллашыу өсөн сәбәп булмаған быға тиклем. Әле ул әңгәмәгә ҡушылманы. Сөнки башҡорт телен белмәй. Тора-торғас, түҙемлеге бөттөмө, шартланы был тәки. Аяҙ көндә күкте ҡара болот баҫтымы ни. Китте туҙынып. "Һеҙ башҡорттар шулай, һеҙ тегеләй, фәлән-фәсмәтән. Һеҙҙән дә насарыраҡ, оятһыҙыраҡ башҡа халыҡ юҡ донъяла. Күреп торалар эргәләрендә мин барлыҡты, русса һөйләшергә уйламайҙар ҙа. Һанға һуҡмаған булалар, шаштылар, артабан былай булырға тейеш түгел!" - тип сурыта был. Мин түҙмәнем: "Беренсенән, беҙ һинең турала һөйләмәйбеҙ, икенсенән, өс кешене бер үҙенә бойһондорорға теләгән кеше генә иң һөмһөҙҙөң дә иң аҡтығы була, беләһең килһә",- тинем аптырағас. Етмешен ауҙарған яңылыш фекерле әҙәмгә дөрөҫлөктө аңлатыуы еңел булаһы бармы! Күп йылдар дауамында "өлкән ағай"ҙың өҫтөнлөгө менән ҡоролған мөнәсәбәтте ғәҙел үҙгәртеү мөмкинлеге күҙ алдына ла килмәй уның: "Шулай булған, шулай булып ҡаласаҡ!" - тип туҡыуын белде. Һуңынан да һүҙен йыҡтырманы. Башҡорт теленең рус теле менән бер статуста икәнен дә ишетергә теләмәне. Сөнки уны был ерҙә үҙен аҫабаларҙан да аҫабараҡ итеп күрергә өйрәткәндәр. Ә ҡайһы бер ысын аҫабалар, баяғы мулла кеүек, үҙҙәрен ҡайҙандыр ҡасып килгәнбеҙ, тип уйлай. Шулай ҙа был шовинистың әллә ни ҡурҡыныһын күрмәйем. Ул асыҡтан-асыҡ белдерҙе үҙ фекерен. Ә бына тегеләре... Башҡорт халыҡ йыры "Абдрахман"да әйтелгән "Яҡын күргән дуҫтан яманы юҡ, ауыр саҡта һинә ят булһа", тигәндәренән нисек һаҡланырға?

Сәйәсәттең муллалар йөрөгән һыҙығынан да алдараҡ йөрөргә тейешле баяғы вазифалы танышым ҡайһы арала эргәнән китеп тайғанын һиҙмәйерәк ҡалғанмын. Хушлашмайынса ла тайһынсәле! Һуңынан да осрағаны булманы. Шулай ҙа... Осло мөйөштәрҙе, сәнскеле сымдарҙы урап үтәм, тип, һалдаттарын ташлап яу яланынан ҡасҡан командирҙар ҙа була микән?..

**Мансур ҺИҘИӘТОВ.**
**Белорет ҡалаһы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓"Берҙәм Рәсәй" партияһы рәйесенең Өфөләге төбәк йәмәғәт ҡабул итеү бүлмәһе етәксеһе Рәил Әсәҙуллин Өфө районы граждандарын ҡабул итте. Муниципалитет халҡы депутатҡа юлдарҙың насар сифатына, мәктәп хоккей командаһын форма менән тәьмин итеү проблемаһына, медицина ярҙамы ала алмауҙарына һәм урындағы власть яғынан аңлашылмаусанлыҡҡа зарланды. Төбәк ҡабул итеү бүлмәһе башлығы бөтә был мәсьәләләрҙе үҙ контроленә алды.

✓Башҡортостан Хөкүмәте республика парламентына һалымдар тураһында айырым законрдар сығарыу акттарына төҙәтмәләр индерҙе. Яңы закон проекты менән 2014 йылдың 1 ғинуарынан алып инвесторҙарға өҫтәмә дәүләт ярҙамы саралары билдәләргә - капитал һалыуҙар буйынса талапты 100 миллион һумдан 30 миллионға тиклем төшөрөргә, шулай уҡ табышҡа һалым буйынса иң түбән ставка (13,5 процент) билдәләргә һәм инвесторҙы ойошмалар мөлкәтенә һалым түләүҙән азат итергә тәҡдим ителә.

✓Рәсәй Президенты Владимир Путиндың йыл һайын үткәрелә торған ҙур матбуғат конференцияһы 19 декабргә тәғәйенләнгән. Был туғыҙынсы тапҡыр Рәсәй һәм сит ил киң мәғлүмәт саралары журналистары менән ҙур осрашыу буласаҡ. Беренсе матбуғат конференцияһы 2000 йылда үтте, ә һуңғыһы - 2012 йылдың 20 декабрендә. Былтыр дәүләт башлығы киң мәғлүмәт саралары вәкилдәре менән Кремлдә түгел, ә Мәскәү Халыҡ-ара сауҙа үҙәгендә аралашты.

✓Башҡортостан Республикаһы туриндустрия союзының отчет-һайлау йыйылышы йомғаҡтары буйынса БР Дәүләт Йыйылышы депутаты Александр Работяев был ойошманың рәйесе итеп һайланды.Уның урынбаҫарҙары итеп Дәүләт Йыйылышы депутаты Кинйә Кускилдинды һәм "Тенгри" туристик компанияһының генераль директоры Александр Гончаровты һайланылар.

✓Өфөлә 1-3 декабрҙә Рудольф Нуриевҡа арналған I Бөтә Рәсәй балет мәктәптәре фестивале үтәсәк. БР Мәҙәниәт министрлығында хәбәр итеүҙәренсә, илдең профессиональ бейеүселәр әҙерләүсе бөтә уҡыу йорттары ҡатнашырға ғариза биргән. Улар иҫәбендә Мәскәү һәм Санкт-Петербург академиялары, Новосибирск, Пермь, Красноярск колледждары, Ҡазан һәм Краснодар училищелары бар.

**“Башинформ”дан.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## ТОРЛАҠ АЛЫРҒА УЙЛАНЫҢМЫ?

**Өфөлә төҙөлә башлаған торлаҡтың бер квадрат метрының хаҡы йыл башынан алып уртаса 13 процентҡа артҡан һәм 55 мең һум тәшкил итә. Хаҡтар артыу темптары буйынса был сегмент 2013 йылда икенсел баҙарҙы ике тапҡырға уҙҙы, тип билдәләй "Эксперт" күсемһеҙ милек агентлыҡтары селтәре аналитиктары.**

Иң ҡиммәт фатирҙар - ҡаланың үҙәгендә, шул иҫәптән Әй урамында: бер квадрат метры 64,9 мең һум. Артабан Октябрь проспекты һәм Йәштәр биҫтәһендә (60,1), Йәшел сауҡалыҡ һәм Новостройкала (56,8), Сипайлово (54,3), Черниковка (49,1) һәм үҙәктән алыҫ ятҡан Затон, Инорс, Дим, Шаҡша биҫтәләрендә (48,6) хаҡтар кәмеү яғына табан бара.

Яңы йорттарҙа иң арзан хаҡ әлеге ваҡытта Затонда билдәләнгән: 38 мең һум. Иң ҡиммәте - Мостай Кәрим һәм Октябрь Революцияһы урамдарында: 79 мең һум.

Өфөлә тәҡдим ителгән яңы фатирҙарҙың майҙаны - 29,7 квадрат метрҙан алып (Инорс) 165 квадрат метрға тиклем (Пушкин урамы).

## УРРА, АРТАБЫҘ!

**Ғинуар-сентябрь айҙарында Башҡортостанда халыҡ һаны 7411 кешегә артҡан. Башҡортостанстат мәғлүмәттәренә ярашлы, халыҡтың тәбиғи артыуы 3869 кеше тәшкил иткән, миграцияның артыуы - 3542.**

Тыуыусылар һаны был осорҙа, 2012 йылдың ғинуар-сентябрь айҙары менән сағыштырғанда, 0,6 процентҡа үҫкән. Вафат булыусылар һаны ла 0,4 процентҡа артҡан .

Туғыҙ айҙа республикала 43 952 сабый донъяға килгән. Тыуымдың артыуы Өфө, Ағиҙел, Нефтекама, Октябрьский, Стәрлетамаҡ һәм тағы бер нисә ҡалала, шулай уҡ 16 муниципаль районда теркәлгән.

Был ваҡытта 40 083 кеше вафат булған.

Статистиктар Волга буйы федераль округының ете төбәгендә халыҡтың тәбиғи артыуын билдәләгән: Татарстанда (плюс 7467 кеше), Башҡортостанда (3869), Удмуртияла (2099), Пермь крайында (1077), Ырымбур өлкәһендә (1021), Сыуашстанда (644) һәм Марий Илендә (510).

Башҡортостанда үлемдең төп сәбәптәре араһында ҡан йөрөшө системаһы ауырыуҙары (47,4 процент, Рәсәй буйынса - 53,9 процент) өҫтөнлөк итә. Яман шеш ауырыуҙарынан (11,1 һәм 15,4 процент), фажиғәле осраҡтарҙан, ағыуланыуҙан һәм йәрәхәттәрҙән (10,6 һәм 9,1) үлеүселәр һаны юғары булып ҡала.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ӨФӨ МЕНӘН...

## Салауат районы дуҫлашты

**Ошо көндәрҙә Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов етәкселегендәге рәсми делегация эш сәфәре менән Салауат районында булды. Быйыл июнь айында Өфө менән Салауат районы араһында үҙ-ара хеҙмәттәшлек тураһында килешеү төҙөлгәйне. Әлеге сәфәр барышында шул килешеү тураһында ентекле һөйләшеү алып барылды һәм социаль, иҡтисад, мәғариф, мәҙәниәт, йәштәр сәйәсәте, спорт, туризм өлкәләрендәге үҙ-ара хеҙмәттәшлек йүнәлештәре, ысулдары билдәләнде.**



Һөйләшеү Өфө һәм Салауат районы хакимиәттәре вәкилдәре ҡатнашлығында тыңнаҡ ҡор форматында уҙҙы. Һәр ҡатнашыусы алға алынған бурыстарҙы хәл итеү буйынса үҙ тәҡдимдәрен ишеттерҙе. Ирек Ишмөхәмәт улы Салауат районының һәләтле балаларына Өфөлә үткәрелгән төрлө сараларҙа ҡатнашыу мөмкинлеге биреү кәрәклеген билдәләне: "Шул иҫәптән, балаларға бушлай "Салауат Юлаев" хоккей клубы уйындарын ҡарарға килеп ҡайтыуҙы ойошторғанда ла була", - тине ул.

Салауат муниципаль районы хакимиәте башлығы Ғәле Ғәләүетдин улы Хәйретдинов, үҙ сиратында, районда етештерелгән экологик яҡтан таҙа ауыл хужалығы продукттарын Өфө баҙарҙарында һатыу ойоштороу мөмкинлеген тәҡдим итте: "Әле үҙебеҙҙең продукцияның бренд атамалары тураһында уйлашабыҙ, ә тауар әҙер", - тине район башлығы. Уның тәҡдимен Ирек Ялалов та хупланы.

Шулай уҡ Өфө ҡала округының мәҙәниәт һәм сәнғәт идаралығы начальнигы Исламетдин Ризаитдин улы Мәмбәтов Салауат районындағы коллегаларына киләһе йылдың йәйендә үтәсәк "Салауат йыйыны" байрамын үткәреүҙә ярҙам итәсәктәре тураһында белдерҙе.

Түңәрәк ҡор һуңында Ирек Ишмөхәмәт улы һәм башҡа ҡунаҡтар районды иҫтәлекле урындарын ҡараны. Салауат Юлаев бюсына сәскә һалды, музей менән танышты.

Тағы, Өфө-Салауат районы дуҫлығын һәм хеҙмәттәшлеген Өфөнөң "Мираҫ" бейеү һәм йыр ансамбле концерты ла нығытҡандыр. Районды алдынғы хеҙмәтсәндәре өсөн әҙерләнгән концертта, аҙаҡ тамашасылар әйтмешләй, "тап-таҙа иҙәндәрҙән дә саң сығырлыҡ" бейеүҙәр, моңло йырҙар яңғыраны. Халыҡ бик ҡәнәғәт таралышты концерттан. Бер ағай, Әлкә ауылы мәктәбенең математика уҡытыусыһы Фәрүәз Ғәлиуллин, концерт тамамланғас, хисте́ргә бирелеп: "Был тиклем дә өҙҙөрөп баҫыусы егеттәрҙе күргәнем юҡ ине! "Мираҫ"тар алдында сал сәсле башымды эйәм, шуны үҙҙәренә еткерегеҙ әле", - тине.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Беҙ йыш ҡына зыялыларыбыҙ ауылдарға барып, ауылға ярҙам итһен, рух күтәренкелеге йөкторһон, бәйләнештәр булдырһын ине, тип хыялланабыҙ. Ирек Ялаловтың Салауат районына барыуы ошо хыялдарҙың тормошҡа аша башлауына ишара ла инде. Мәғлүм булыуынса, Өфөнөң ете районы республикабыҙҙың ете районын шефлыҡҡа алырға йыйына. Тимәк, Өфө менән ауылдар араһы тағы ла яҡыная. Әйткәндәй, баш ҡала гәзите булған "Киске Өфө"нө лә республиканың һәр районында, һәр ауылында алдырып уҡый-ҙар бит. Шулай итеп, Өфө менән ауылдар араһына рухи күпер һалыу дауам итә.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# СОЦИАЛЬ РЕКЛАМА...

## юл ярыуҙы дауам итә

**Өфөлә "Ҡала мөхите" социаль реклама фестивале үтте. Туғыҙынсы тапҡыр уҙғарылған сара Халыҡ-ара фестиваль статусын алды ла инде. Быйыл конкурсҡа Өфөнән, Харьковтан, Ырымбурҙан, Силәбенән, Пермдән һәм башҡа ҡалалар коллективтары һәм авторҙарҙан 300-ҙән ашыу эш тәҡдим ителгән. Эштәрҙе Өфөнән тыш, Мәскәү, Ҡаҙағстан, Ҡытайҙан килгән белгестәр баһаланы.**




Фестиваль үткәрелә башлағандан алып уның төп маҡсаты - баш ҡалабыҙ Өфөлә социаль рекламаны үҫтереү. Был йәһәттән һуңғы йылдарҙа күҙәтелгән ыңғай күренештәрҙе танымай булмай. Уларҙың (социаль рекламаларҙың) йөкмәткеһе халыҡ аңына барып етәме, кешеләрҙең зиһенен, ҡараштарын үҙгәртәме - уныһы икенсе мәсьәлә. Ләкин реклама майҙансыҡтарында социаль йүнәлештәге саҡырыуҙарҙы күреү ҡыуандырмай ҡалмай. Шулай уҡ сара һәләтле ижадсыларға үҙҙәренең оҫталығын күрһәтеү өсөн уңайлы мөмкинлек тә. Улар үҙ ижады менән йәмғиәтебеҙҙәге төрлө кире күренештәрҙе иҫкәртеүҙә, халыҡҡа гуманизм идеяларын еткереүҙә, үҙенә һәм башҡаларға, тирә-яҡ мөхиткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләүҙә ҡатнаша.

Әлбиттә, быйылғы сара үткән йылдарҙағына ҡарағанда ҡайтышыраҡ булды, тигәнерәк фекерҙәр ҙә яңғыраны. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, иғлан ителгән темаға тулы

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓2014 йылда Өфөнөң килеме 15, 982 миллиард һум тәшкил итергә тейеш, сығымы - 16,898 миллиард һум, дефицит 916 миллион һум буласаҡ. Бындай күҙаллауҙар Өфө ҡала Советының сираттағы ултырышында, 20 ноябрҙә, иғлан ителде. Ултырыш барышында 2014 йылға һәм 2015 -2016 йылдар план осорона бюджет формалаштырыу проекты буйынса асыҡ тыңлауҙар үткәреү көнө һәм ваҡыты билдәләнде. 2015 һәм 2016 йылдарҙа ҡала кереме 16,755 һәм 17,105 миллиард һумға тиклем артасаҡ тип көтөлә. Дефицит ярайһы уҡ кәмейәсәк: 2015 йылда ул 400 миллион һум тәшкил итергә тейеш, 2016 йылда - 280 миллион һум.

✓Өфөнөң Инорс-4 биҫтәһендә күп функциялы уҡытыу-тәрбиә комплексы барлыҡҡа киләсәк. Был 1990 урынлыҡ, дөйөм майҙаны 36 мең квадрат метрҙан ашыу тәшкил иткән берҙәм, заманса комплекс буласаҡ. Унын эсендә 345 урынлыҡ балалар баҡсаһы, башланғыс мәктәп, туҡланыу блогы, урта һәм өлкән йәштәге уҡыусылар өсөн мәктәп, 600 урынлыҡ йыйылыштар залы һәм физкультура-сәләмәтләндереү комплексы урынлашасаҡ. Төҙөлөштө 2014 йылда башлап, 2015 йылда тамамларға планлаштыралар.

✓Сибайҙан бер төркөм уҡыусылар Мәскәүҙә булып ҡайтты, унда "Олимп" халыҡ-ара олимпиадаһының йомғаҡлау этабында ҡатнашты. Сибай уҡыусылары төрлө номинацияларҙа күп призлы урындар яуланы. Рәсми сараларҙан тыш, киңәйтелгән экскурсия программаһы ойошторолдо. Балалар тарихи урындарға, Мәскәү зоопаркына һәм башҡа иҫтәлекле урындарға барҙы. Бынан тыш, сәфәрҙә балаларҙы ҡарап йөрөтөүсе Сибай ҡала Советы депутаты Виктор Тюрин Дәүләт Думаһына экскурсия ойошторҙо. Экскурсия аҙағында уҡыусыларҙы ЛДПР лидеры Владимир Жириновский ҡабул итте.

✓Өфө районының "Алексеевка" совхозында яңы технология буйынса ҡыяр ултыртыуға тотондолар. Яңы технологияның үҙенсәлеге шуға ҡайтып ҡала: ҡыяр орлоҡтары индивидуаль кубиктарға ултыртыла. Яңылыҡ үҫентегә тиҙ үҫеү һәм 10-14-се көнөнә уҡ күсереп ултыртыу өсөн күпкә уңайлыраҡ шарттар булдыра. Хужалыҡтың баш агрономы Эльвира Ямалиева әйтеүенсә, быйыл ҡыярға һәр берене алты гектарҙан торған биш теплица бинаһы бүленгән.

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ҺАЛЫМ ТҮЛӘ...

## йә арзанлыға күсеп ултыр



- Транспорт һалымы ставкаһы күп йылдар үҙгәрешһеҙ ҡалып килде, - ти законды әҙерләүселәр. - Ә Волга буйы округында ставкалар былай ҙа 1,5-4,9 тапҡырға түбән. Беҙ уны округ буйынса уртаса кимәлгә еткерергә тәҡдим итәбеҙ. Был бюджетҡа йылына өҫтәмә рәүештә 300 миллион һум аҡса йыйырға мөмкинлек бирәсәк.

Башҡа төбәктәрҙә авто тотоу ярайһы ҡиммәткә төшөүе асыҡ күренеп тора: Һамар өлкәһендә, мәҫәлән, бер ат көсөнә минималь ставка - 16 һум (беҙҙә -5,5), Татарстанда - 10, Нижегород өлкәһендә - 13,5.

Сағыштырыу өсөн: Лада Kalina (уртаса 90 ат көсө) ватан автомобиле хужалары әле йылына 495 һум түләһә, киләсәктә 900 һум аҡсаһын сығарып һаласаҡ. Suzrki SX4 (107 ат көсө) машинаһы өсөн 1605 һум түләгән булһалар, хәҙер - 2140.

Яңылыҡ айырыуса ҙур һәм ҡеүәтле машиналар хужаларының кеҫәһенә нығыраҡ һуғасаҡ. Мәҫәлән, Mitsubishi Pajero Sport (минималь комплектацияла - 131 ат көсө) машинаһы өсөн хужалары 1965 һум түләһә, яңы йылдан ул 3275 һумға тиклем күтәреләсәк.

Бынан тыш, киләһе йылдан властар колхоздарҙы, крәҫтиән һәм фермер хужалыҡтарын өҫтөнлөктән мәхрүм итәсәк. Әлеге мәлдә улар, ташлама менән файҙаланғанлыҡтан, тракторҙары һәм сәскес машиналары өсөн бер тин дә түләмәй. Былдай хәл маҡсатҡа яраҡһыҙ, тип табылды һәм киләһе йылдан улар юридик шәхестәр ставкаһы буйынса түләй башлаясаҡ, ләкин тулы сумманы түгел, ә яртыһын. Хәтерегеҙҙә булһа, бынан бер-ике йыл элек ауыл хужалығы етештереүселәре еңел авто өсөн дә һалым түләмәй ине. Ҡайһы берәүҙәр шуны үҙ маҡсаттарында файҙалана башланы: файҙаһыҙға эшләүсе берәй колхоз иҫәбенә (уның эшенә бер ниндәй ҡағылышы булмаһа ла) бер нисә ҡиммәтле автомобиль яҙҙыралар.

- Һалымды арттырыу - бюджетты тулыландырыуҙың бер ысулы, шуға ла ул халыҡта әллә ни ризаһыҙлыҡ тыуҙырмаҫ, тип уйлайым, сөнки әле һүҙ ҙур суммалар хаҡында бармай бит,- ти иҡтисад фәндәре докторы Г.Россинская.- Унан һуң, автомобилдәрҙең ҡеүәтенә ҡарап, айырып тәғәйенләнеүсе ставкалар кешеләрҙе ҡеүәтле, ҙур машиналарҙан бәләкәйерәк, ыҡсым автомобилдәргә күсеп ултырырға мәжбүр итер ине, бәлки, тип тә уйлайбыҙ. Сит илдәрҙә күптән шулай иттеләр бит.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Мунсалар, солярийҙар һәм күсермә эшләүсе салондар хужалары киләһе йылдың 1 ғинуарынан һалым түләүҙән азат ителә.**

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

яҡтыртҡан, креатив һәм социаль реклама талаптарына яуап биргән эштәр ҙә етерлек ине. Ойоштороусылар билдәләүенсә, фестиваль "Бер тапҡыр ҡулланыла торған йәмғиәт" (Одноразовое общество) ҡалыптарынан сығырға саҡыра. Ысынлап та, тормошҡа ошондай ҡалыптар аша ҡарағанға күрә, йәмғиәтебеҙҙә төрлө афәттәр, кешеләрҙә һәм тирә-яҡ мөхиткә битараф ҡараш йөшәй. Кеше үҙенең, үҙен уратып алған йәмғиәттең киләсәген уйламай, ваҡытлы ҡәнәғәтләнеү тойғоһо татыр өсөн дөйөм ҡиммәттәрҙе юҡҡа сығара.

Быйылғы "Ҡала мөхите"нең төп темаһы экология, таҙа ҡала проблемаһы булды. Мәскәүҙән килгән жюри ағзаһы Гюзеллы Николайшвили әйтеүенсә, был тема бар донъяла социаль рекламаның төп тренды икән. Етмәһә, Башҡортостанда 2013 йылда иғлан ителгән "Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы" менән ауаздаш. Башҡорт дәүләт университеты студенттарының сүп-сарҙы теләһә ҡайһы ергә ташламауға йүнәлтелгән эштәре ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты.

Ҡатнашыусылар коррупция темаһын да урап үтә алманы. Рәсәй өсөн ҡот осҡос кимәлгә еткән ошо афәтте тамырынан юҡҡа сығарыуға ҡоролған бихисап эштәр ҡатнашты конкурсҡа. Ә инде наркоманлыҡ, тәмәке тартыуға ҡаршы йүнәлдерелгән, сәләмәт тормошто пропагандалаған темалар фестиваль үткәрелә башлағаны бирле актуаллеген юғалтмай. Бер аҙ кәмегән кеүек күренеүгә ҡарамаҫтан, эскелек баш ҡаланың төп социаль бәләләренең береһе булып ҡала килә. "Һин мине хөрмәт итәһеңме?" - тап ошо һүҙҙәр менән йәш үҫмерҙәргә тәү тапҡыр иҫерткес эсемлек тәҡдим итәлә, тап ошо һүҙҙәр аша йәштәр, балалар "йәшел йылан" тотҡонона әйләнделәр. Фестивалдә тәҡдим ителгән "Һин мине хөрмәт итәһеңме?" тип аталған плакат былдай "хөрмәт"тең үлемесле икәнен иҫкәртә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**2009 йылдан алып был конкурста башҡорт тематикалы һәм башҡорт телендәге эштәр ҙә ҡатнаша торғайны. Төрлө йылдарҙа унда бихисап социаль видеоролик һәм плакаттар тәҡдим ителде, хатта призлы урындар яуланы. Быйыл иһә тәҡдим ителгән эштәр араһында бер генә башҡортса проект та күренмәне. Ә бит унда ҡатнашырҙай эштәребеҙ етерлек. Бәлки, ойоштороусылар үҙҙәре лә был тәңгәлдә әүҙемлек күрһәтергә, тематиканы киңәйтеү юҫығында башҡорт телендә ижад итеүселәргә айырым тәҡдим менән сығыш яһарға тейеш булғандыр?**

**Азамат САЛАУАТОВ.**

*ҺОРАУ - ЯУАП*

## РӨХСӘТЕ КӘРӘКМӘЙ

**Апайым өлкән йәштә, пенсияла. Фатирын үҙ миллкенә күсергән. 37 йәшлек ҡыҙы айырым йәшәһә лә, әсәһе фатирында теркәлгәйне. Әле ул кейәүе янына, башҡа ҡалаға күсеп китергә йыйына, ләкин апайым быға ҡаршы килеп, уны теркәүҙән төшөрмәскә итә. Уның быға хаҡы бармы?**

- Юҡ, әлбиттә! Апайығыҙ ҡыҙына йәшәү урынын һайлауҙы һәм ирекле күсенеп йөрөүҙе бер нисек тә тыя алмай. Закон менән ҡаралған ҡайһы бер осраҡтарҙан тыш, былдай хоҡуҡ һәр кемгә закон нигеҙендә һәм дәүләтебеҙҙең юғары норматив акты - РФ Конституцияһы тарафынан тәьмин ителгән (РФ Конституцияһының 27-се статьяһы).

Теркәүҙән төшөү өсөн фатир хужаһының ризалығы кәрәк тә түгел. Бәлки, апайығыҙ арҙамсыһыҙ, ҡараусыһыҙ тороп ҡалыуҙан ҡурҡып, үҙенсә шулай ҡаршылыҡ күрһәтергә итәләр? Тик быныһы инде әсә менән ҡыҙының үҙ-ара аңлашып хәл итәлә торған икенсе мәсьәлә булып тора.

## УЛЫҢ ДА, ҠЫҘЫҢ ДА БУЛҺА...

**Яҙғыҙаҡ әсә булараҡ, бер ир һәм ҡыҙ бала тәрбиәләйем, эш урынынан бирелгән бер бүлмәле (40 кв.м.) фатирҙа йәшәйбеҙ. Бюджет хеҙмәткәре булараҡ, социаль яллау буйынса яңы торлаҡ алыуға документтар туплайым. Төрлө енестәге балалар өсөн ҙурыраҡ майҙанлы фатирға өмөт итә аламмы?**

Ғаиләлә төрлө енес вәкилдәренең йәшәүе өҫтәмә торлаҡ майҙаны алыуға нигеҙ була алмай. Биреләсәк торлаҡ майҙаны билдәләнгән норманан сығып ҡарала. Шулай ҙа законда мөһим бер положение барлығын да хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ: социаль яллау килешеүе буйынса торлаҡ майҙаны бирелгәндә бер бүлмәгә төрлө енестәге (ир менән уның ҡатынынан башҡа) кешеләрҙе урынлаштырыу уларҙың ризалығы менән генә башҡарылырға тейеш. Шуға таянып, ике бүлмәле фатир өсөн көрәшә алаһығыҙ.

## УРТАҠ МИЛЕК УРТАҒА БҮЛЕНӘ

**Өйләнешергә йыйынабыҙ. Буласаҡ ирем минән никах контрактына ҡул ҡуйыуымды һорай. Был килешеү буйынса, әгәр айырылышҡан хәлдә, фатир ике тигеҙ өлөшкә бүленә. Ә балалар мәнфәғәте былдай осраҡта нисек ҡуҙәтеләсәк?**

Әгәр никах килешеүе фәҡәт фатир мәсьәләһен генә ҡуҙҙа тота икән, уға ҡул ҡуйыу-ҡуймау мөһим мәсьәлә түгел, сөнки никах осоронда һатып алынған милек былай ҙа ир менән ҡатындың тигеҙ өлөштәрҙәге уртаҡ милке булып иҫәпләнә. Ғаилә һәм граждандыҡ законадарына ярашлы, ир менән ҡатындың никах осоронда һатып алынған милкенә уларҙың балалары милекселек хоҡуғына эйә була алмай. Улар фәҡәт мираҫ алыусы, йәғни варисҡтар булараҡ, ата-әсәнең вафатынан һуң билдәле бер өлөшкә дәғүә итә алалар. Шуға күрә, әгәр һеҙ буласаҡ ирегеҙ менән фатирға тигеҙ өлөштәрҙә дәғүә итергә килешкәнһегеҙ икән, ул сакта никах килешеүе тәҙеп тороуҙың кәрәге юҡ. Әгәр фатир милексенең береһе исеменә генә яҙҙырылған булһа ла, икенсеһе автоматик рәүештә милектең ҡап яртыһына дәғүә итә.

## Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Һарымһаҡ

Һарымһаҡ иммунитетты ныҡытыусы, вирустарға ҡаршы көрәшеүсе яҡшы сара иҫәпләнә. Тик ул файҙа килтереһен тиһегеҙ, уны сей көйөнә ашарға кәрәк. Һарымһаҡтың әсеһен бөтөрөү өсөн һарымһаҡлы маринад әҙерләргә була. Бының өсөн стакандың дүрттән бер өлөшө күләмендә алма һеркәһе һәм бал алып, уларҙы быяла банкаthe ҡапҡасын ябып болғатырға. Аҙаҡтан уға таҙартылған һарымһаҡ төштәре һалығыҙ. Шыйыҡлыҡ һарымһаҡты ҡаплап торорға тейеш. Банканы һарымһаҡ әҙер булғансы ике аҙна һыуыҡта тоторға. Көнөнә 2-3 һарымһаҡ төшө ашарға. Былдай юл менән әҙерләнгән һарымһаҡ бер ай тирәһе һаҡлана.

### Организм хәлһеҙләнһә

❖ 300 грамм әстерхан сәтләүеге, 300 грамм күрәгә, 300 грамм йөҙөм, 2 лимон (тышы менән) алып, уларҙың барыһын да ит турағыс аша үткәрергә һәм 300 грамм бал өҫтәргә. Көнөнә 1-2 балғалаҡ ашарға. Һыуытҡыста һаҡларға.

❖ Традицион Тибет медицинаһына ярашлы, имбир (тамыры эфир майҙарына бай тропик үҫемлек) организмдағы энергия хәрәкәтен һәм балансын тергеҙә, шуға ла иртән ас ҡарынға бер шөшкә имбир сәйе эсеү көн буйына етерлек көс-ҡеүәт бирәсәк.

❖ Арыуҙы бөтөрөү һәм йөрәктен эшмәкәрлеген еңеләйтеү, көс йыйыу өсөн алма һеркәһе ҡабул итергә мөмкин. 1 стакан һыуға 1 ҡалаҡ алма һеркәһе һәм 1 балғалаҡ бал өҫтәп, 10-15 көн дауамында 1-2 тапҡыр ашар алдынан йәки ашағандан һуң ҡабул итергә.

❖ Бөрйән урмандарында бәғәнәш тип атап йөрөтөлгән үлән үҫә. Белгестәр уны воронец колосовидный йәки красноплодный тип йөрөтә. Минең әсәйем сайыр йыйыу мәлендә шуның тамырын йыя торғайны. Организм арып киткән саҡта был тамырҙың бер-ике сыбыҡсаһын бер стакан ҡайнар һыуҙа бешереп, ас ҡарынға көнөнә 2-3 тапҡыр эсә ине. Борон әсегән балға ла бәғәнәш өҫтәгәндәр, ауыр эштән һуң был балды эсһәң, шунда уҡ көс инеп киткән.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

*✓ Өләсәй булараҡ, бошонам: минең эргәлә ултырыусы ейәнсәремә кейәүлеккә кемдәр ғорур, батыр башҡорт улдары үҫтерер һуң? Шуға ла илен ташлап киткән, милләтен һанламаған балаларҙы күккә күтәрмәйек.*

*БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ*

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ...
## дауалау һәм ҡурсалау магияһы

**Бетсәгә күмер име.** Кешенең тәне бетсәләһә, имсе әбей шым ғына, бер һүҙ өндәшмәй, сепрәккә күмер төрә лә йылға буйына алып барып ҡалдырып китә. Барғанда ла, ҡайтҡанда ла һөйләшергә ярамай.

**Тары ярмаһы име.** Бетсә булһа, тары ярмаһын алып, бер сепрәккә төрөп, ағын һыуға һалырға кәрәк. Һалғанда:

*Ҡайҙан килдең,*
*Шунда кит,*
*Йәмле өйҙәгеләргә кит,*
*Име-томо шул булһын!*

- тип өс мәртәбә ҡабатлайһың. Шунан бетсә эйәһе һыуға ағып китә икән.

**Кирбес өҫтөндә тилеберән ыҫлау.** Бетсә булһа, мейестә өс ҡыҙыл кирбесте ҡыҙҙырғандар, уларҙы тимер таҫҡа сиратлап һалғандар. Унан һуң имсе Ҡорт доғаһын уҡып, ҡыҙған кирбес өҫтөнә тилебәрән ҡуя. Тилебәрән төтәй башлағас, имсе ауырыуҙың тәненә һары май һөртә лә юрған ҡаплап, төтөн өҫтөндә тота. Тирләп сыҡҡансы ул шунда тора. Төтәҫләү ваҡытында кирбестәр һыуынып өлгөрмәһен өсөн уларҙы алмаштыралар. Шул саҡта бетсә ҡорттары иҙәнгә һәм таҫҡа ҡойолоп төшһә, ауырыу бөтә икән. Им-том иткәндә әпсенен дә, "Ҡолһоуалла"ны ла әйтәләр.

**Көкөрт төтөнө име.** Бетсә булһа, ҡайһы бер имсе көкөрт яндырып, шуның төтөнө менән төтәҫләй. Төтәҫләгәндә әпсенен дә әйтә.

**Тимрәүҙе имләү.** Тимрәү өс төрлө була: аҡ тимрәү, ҡыҙыл тимрәү, тәңкә тимрәү. Тимрәүҙе төрлө ысулдар менән имләйҙәр.

**Шаршамбы йомортҡаһы менән имләү.** Тимрәү сыҡһа, шаршамбы йомортҡаһы менән имләйҙәр. Бының өсөн шаршамбы йомортҡаһының ағын алалар, шуны оҙаҡ туҡыйҙар. Туҡылған йомортҡаға бер сепрәк мансып, тимрәүгә баҫалар, йәбештереп тә ҡуялар, доғаһын уҡыйҙар. Тимрәү бөтә.

**Балан име.** Тимрәү ҡыҙыл булһа, уны ҡыпҡыҙыл балан менән һыҙғылап имләйҙәр, һыҙғанда:

*Тим -тим- тимрәмүн,*
*Әм-әм-әмрәмүн !*
*Йөҙөңә ҡара яҡтым,*
*Битеңә ҡара аттым.*
*Ҡайҙан инһәң, шунда сыҡ,*
*Ишектән сыҡ, тишектән сыҡ,*
*Тәҙрәнән сыҡ, төнлөктән сыҡ,*
*Ҡайҙан тишек тапһаң - шунан сыҡ!* - тип һамаҡлайҙар.

**Күмер име.** Тимрәү сәсәген өшкөргәндә тәнгә күмер менән һыҙғылайҙар. Шунан шул күмерҙе төньяҡҡа ташлайҙар.

**Көмөш тәңкә ҡырмаһы име.** Был ысул менән тәңкә йәки түңәрәк тимрәүен имләгәндәр. Ул, ғәҙәттә, ҡыҙыл-көрән төҫтә, уртаһы аҡһыл, сите ҡара булып тора. Бындай тимрәүҙе эре көмөш аҡса менән дауалағандар. Был аҡсаны "көмөш тәңкә" йәки "Николай тәңкәһе" тип тә йөрөткәндәр.

Дауалағанда ҡулланыу өсөн аҡсаны йоҡа бысаҡ менән ҡырып, көмөш порошок яһағандар. Унан һуң уны ҡаймаҡ менән бутағандар ҙа тимрәүле урынға һөрткәндәр.

**Тилебәрән төтөнө име.** Ҡайһы бер яҡтарҙа тимрәүҙе тилебәрән яндырып, шуның төтөнө менән имләгәндәр. Имләгәндә "Әлхәм", "Ҡолһоуалла"ны уҡығандар. Шулай имләп, һыҙылған кәртәнән йәйелергә ирек бирмәйенсә бөтөрәләр.

**Көмөш тәңкә име.** Тимрәүҙе көмөш тәңкә менән дә имләйҙәр. Тәндең тимрәү еренән көмөш аҡсаны шыуҙырып йөрөтәләр. Йөрөткәндә: "Бөтһөн, ҡороһон (фәләнден) тимрәүе", - тип өс мәртәбә ҡабатлайҙар.

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**

*УЙҘАРЫМДАН УЙЫЛАМ...*

**Холҡомда бер һыҙатым бар минең: гәзитебеҙҙә берәй мөһим мәҡәлә баҫылып сыҡһа, бер-ике аҙна үтеп китһә лә, тағы ла асып, ҡайтанан уҡып сыҡҡым килеп тик тора. "Уйҙарымдан уйылам..." тигән яңы рубрикалағы (43-сө һанда) "Ҡыҙ балаҡайымды ҡыҙғанам..." мәҡәләһен тағы бер ҡат уҡып сыҡтым. Уның тәүге өлөшөндә ҡыҙ бала үҫтереүсе әсәнең матур хыялдары бәйән ителә, ә икенсе яртыһында кейәүҙәрҙең холоҡ-һыҙаттары хаҡында мәғлүмәттәр килтерелә. Ҡыҙҙары булған күп әсәләр был өлөшөн уҡығанда үҙҙәренең кейәүҙәрен танып, уфтанғандыр.**

# "ҠЫҘ БАЛАҠАЙЫМДЫ ҠЫҘҒАНАМ,



## йәки Маңҡа кейәү кәрәкмәй!"

...Күп һөйләп бармаған, гел йылмайып ҡына артымдан ҡалмай йөрөгән, йөҙө матур оҙон буйлы егеткә кейәүгә сығырға булдым. Йәшем дә күптән еткәйне. ЗАГС-та никахыбыҙҙы теркәүсе ҡатын: "Ир кеше яғымлы, иғтибарлы, ярҙамсыл булырға, ҡатынын ҡәҙерләп, хөрмәтләп, яратып йәшәргә тейеш", - тип, буласаҡ иремә ҡарап, байтаҡ өгөт-нәсихәт уҡыны, аҙаҡтан матур ҡотлау һүҙҙәре әйтте. Был теләктәрҙе тыңлап: "Ни өсөн был апай ошо иҫтәлекле мәлдә ирҙәргә хас сифаттар тураһында һөйләп, ваҡыт уҙғара икән, минең егетем былай ҙа шундай сифаттарға эйә бит инде", - тип уйланым. Сөнки ул саҡта тормош иптәше итеп һайлаған был егеттең идеаль ир буласағына, үҙемдең ҡәҙерле ҡатын буласағыма ышанысым сикһеҙ ине. Һуңынан, йылдар һуҙымында, ЗАГС-тағы теге апай әйткән һүҙҙәр һәр саҡ иҫемә төшөп торҙо. Донъя көтә башлағас, күпме генә тырышһам да, ул апай әйткән ысын ирҙәргә хас сифаттарҙы үҙемдең иремдә таба алманым. Дуҫлашып йөрөгән саҡта мин уның матур йөҙлө, оҙон буйлы булыуынан башҡа кире лә, ыңғай ҙа сифаттарын күрмәгәнмен, күрергә лә тырышмағанмын икән. Шулай итеп, ҡыҙыма 5 йәш тулғанда ғаиләбеҙ тарҡалып та ҡуйҙы...

Бына ошо үҙемдең башымдан үткәндәрҙән дә сығып әйтәм: беҙ кемгәләр ғашиҡ булабыҙ ҙа, уның матур йөҙөнән, оҙон буйынан башҡаны күрмәй, "Яратам!", "Һөйәм!" тигән һүҙҙәренә мөкиббән ышанып, баштарыбыҙ әйләнеп, яҙмышыбыҙҙы һынау алдына ҡуябыҙ. Беҙҙең хаталарҙы ҡыҙҙарыбыҙ ҡабатлай. Бөгөнгө заманда был хаталар бигерәк тә аяныслы була башланы әле ул: ярай ҙа, беҙҙең быуын кешеләре әхлаҡ сиктәрен бик үк аша атларға ҡыймай ине, хәҙерге йәштәр бит хистәрҙең һынау үтеүен көтөп тормай, теләктәр менән эш итеп, эште боҙа һалып ҡуя. Шуға ла мин "Ҡыҙ балаҡайымды ҡыҙғанам..." мәҡәләһе авторы булған әсәнең борсолоуҙарын аңлайым. Беҙ, әсәләр, барыбыҙ ҙа ҡәҙерләп үҫтергән ҡыҙ балаларыбыҙҙың буласаҡ иренең ҡәҙерле ҡатыны булыуын теләйбеҙ бит.

Ҡәҙерле ҡатын, тигәндән, тағы бер мөһим һүҙҙе әйтәйем әле. "Киске Өфө" гәзите биттәрендә был хаҡта йыш телгә алына: ҡыҙҙарыбыҙҙың үҙ милләтенә балалар үҫтереүенә өлгәшеү. Ошо туралағы һөйләшеүҙәр ҙә бик актуаль булып китте бит һуңғы ваҡытта. Сөнки уның етди сәбәптәре бар. Бына бер көндө телевизор аша "Тамыр" студияһының байрам тамашаларын ҡарайбыҙ, кескәй ейәнсәрем дә янымда ултыра. Балаларҙың "Бәхетемде ситтә түгел, үҙ илемдә табырмын" тип йырлағанын, башҡа патриотик йырҙарын да тыңланыҡ. Был йырҙарҙың матур һүҙҙәре балалар теленә ингәс, ул уларҙың күңеленә лә инәлер инде ул, тип уйланыла уйланылыуға. Ләкин... Әле күптән түгел генә "Тамыр"ҙа йөрөгән һәләтле генә бер нисә ҡыҙ бала үҫеп етеп, ситкә уҡырға китеп, сит милләт егеттәренә кейәүгә сыҡты тип ишеттем. Етмәһә, уларҙы маҡтап, телевизорҙан "Замандаштар" тапшырыуына төшөрөп күрһәттеләр. "Маладис ҡыҙҙар!" имеш. Башҡортостанды тиңһенмәгән, сит милләткә балалар үҫтергәндәрҙе нисек маҡтамаҡ, уларҙы башҡаларға өлгө итеп ҡуймаҡ кәрәк! Әлбиттә, ҡасан да булһа бер ваҡыт ул ҡыҙҙар йәшлек хаталарын иҫкә төшөрөр. Башҡорт иленең рухи байлығы уларһыҙ ҙа һайыҡмаҫ, тип ышанайыҡ. Ә шулай ҙа мин, өләсәй булараҡ, бер аҙ бошонам: әлеге минең эргәлә ултырыусы ейәнсәремә кейәүлеккә кемдәр ғорур, батыр башҡорт улдары тыуҙырыр, үҫтерер һуң? Шуға ла тик үҙен генә ҡайғыртҡан, илен ташлап киткән, милләтен һанламаған балаларҙы күккә күтәрмәйек. Уларҙан өлгө түгел, ғибрәт алһын йәштәр. Беҙ, башҡорттар ғына түгел, һәр милләт әсәһе шулай уйлайҙыр һәм балаһының үҙ милләтенә хеҙмәт итеүен теләйҙер. Бына шуларҙы уйлап, уйҙарымдан уйылам инде мин...

...Ә баяғы мәҡәләләге Айбикәнең күршелә йәшәүсе маңҡа малайға ҡарап, кейәүем ундай булып ҡуймаһын, тип борсолоуы юҡҡа ғына булһын. Халҡыбыҙҙа "Бишектәге бала бишкә төрләнә" тигән әйтем дә бар бит. Кемдең кем булып үҫеп етеүен кем белә...

**Айгөл АХУНОВА.**

**РЕДАКЦИЯНАН: Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ, "Уйҙарымдан уйылам..." тигән ошо яңы рубрикабыҙға донъя, тормош, яҙмыштар, балаларыбыҙ тәрбиәһе, кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәр тураһындағы сығыштарығыҙҙы көтәбеҙ. Ҡыҫҡаһы, ни тураһындағы уй тынғылыҡ бирмәй, ниндәй уйҙарҙан уйылаһығыҙ - яҙып ебәрегеҙ. Хаттар көтәбеҙ.**

*ШАҢДАУ*

# БЕҘҘЕҢ ТӘРБИӘ ИКЕНСЕ



**Гәзитебеҙҙең 38-се һанында Америка журналисы У. Ливингстон Ланредтың 1927 йылда яҙылған "Атай нимә хаҡында оноткан?" тип аталған әҫәре баҫылды. Америка яҙыусыһы, Америка журналисы, тигәндә, ниңәлер минең күңелемдә кире тойғолар ҡалҡып сығыусан. Сөнки ул илдең тарихы беҙгә өлгө булырлыҡ түгел, тип иҫәпләнем һәм иҫәпләйәсәкмен. Ил тарихы өсөн бер шәхес яуаплымы, түгелме, унылы айырым фекер алышыуҙы талап итә торған мәсьәлә.**

Америка журналисының әҫәрен уҡып тетрәнмәнем. Беҙ балаларыбыҙға мөмкин тиклем бөтә һөйөүебеҙҙе, наҙыбыҙҙы бирергә тырышабыҙ. Беҙҙең илдә һуғыштан һуңғы йылдарҙа "бала сағы урланған" быуын үҫеп етеп, көрәйеп, киреһенсә, үҙ балаларын иркәләп, ҡурсалап үҫтерҙе. Бәлки, арттырып та ебәргәнбеҙҙер. Шуға ла беҙҙең 1965-1970 йылдарҙа тыуған улдарыбыҙ хас та ҡыҙ балалай иркә булып үҫеп етте. Ҡайһы берҙәре 40 йәшкә еткәнсе ғаилә ҡормай, ата-әсә елкәһендә йәшәй. Ә "бала сағы урланған быуын" һаман да пенсияһынан уларға өлөш сығарырға тырыша.

Кешенең холҡо уның ҡанынан, тип уйлайым. XXI быуатҡа килеп еткән кешелектең тәнендә ниндәй ҡан ҡайнатмаһы ағалыр инде? Ул ҡан таҙа, саф булһа, Хоҙай ҡөҙрәте менән кешегә үҙ иленең, милләтенең лайыҡлы вәкиле булырға тырышлыҡ, быуаттар буйы тупланған тәрән аҡыл биреләләр. Шул сәбәпле, кешенең ниндәй милләт вәкиле булыуы, ниндәй илдә йәшәүе мөһимдер. Шуға ла беҙгә ейән-ейәнсәрҙәребеҙгә бөтә өмөттәребеҙҙе бағларға ғына ҡала. Беҙҙең быуындың хатаһын ҡабатламаһын ине улар. Тормошта ла, бала тәрбиәләгәндә лә сама белеү, "алтын урталыҡ" тотоу зарур.

Үткән ял көнө әсәһе менән ейәнсәрем ҡунаҡҡа килгәйне. Сәй эсеп, һыйланып алғас, ейәнсәрем Ләйсән: "Өләсәй, әйҙә мин һиңә концерт күрһәтәм", - тип, өйөрөлә-өйөрөлә бейей башланы. Бейегәндә: "Яуызлыҡ шартлап үлер, яҡшылыҡ еңер!"- тип йырлап, хас артистарса баш эйә лә, тағы ла шул йырҙы йырлап бейей. Мин"Афарин!" тип ҡул сабып, "Амин! Тик шулай ғына була күрһен", тип йылмаям. Берәй йәнһүрәттән отоп алғанмы, әллә үҙе сығарғанмы (йыр сығарыу ғәҙәте бар уның), әммә ошо әле биш йәше лә тулмаған баланың яуызлыҡ, яҡшылыҡ хаҡында йырлауы үҙе үк шатлыҡлы күренеш бит...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

*✓ 90-сы йылдарҙың башынан аҙағына тиклем был ике республиканың иҡтисади һәм сәйәси хәле Вәлиди теләгән "автономия"ға яҡынлағайны. Ғалим тере булһа, был процестарҙы бик ҙур ҡыҙыҡһыныу менән күҙәткән булыр ине, моғайын.*

*ВӘЛИДИ ХАҠЫНДА ҺҮҘ*

# АҠТАМЫРҘАЙ ХАЛҠЫБЫҘ...

## Беренсе һүҙ: "Вәлиди хыялындағыға оҡшағанмы бөгөнгө Башҡортостан?"

**Декабрь айында халҡыбыҙҙың бөйөк улы Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың тыуыуына 123 йыл тулыуҙы билдәләйәсәкбеҙ. Йылдар үткән һайын исеме**



**яңғырауыраҡ, шәхесе баҙығыраҡ, халҡыбыҙ өсөн атҡарған сәйәси һәм ғилми ҡаһарманлығы олпатыраҡ була барған инсаныбыҙ хаҡында күп яҙылды, һөйләнелде, исемен мәңгеләштереү өсөн изге ғәмәлдәр ҡылынды. Әхмәтзәки Вәлиди тураһындағы иҫтәлектәрҙе тыуған илгә ҡайтарыу өсөн күп көс һалған шәхесебеҙ, философия фәндәре кандидаты Әмир ЮЛДАШБАЕВ менән "Вәлиди хаҡында һүҙ" рубрикаһы аҫтында алып барылған әңгәмәләребеҙҙе тулыландырырға, дауам итергә булдыҡ.**

**ҺОРАУ: Башҡорт халҡының бөйөк улы Әхмәтзәки Вәлидиҙең тыуыуына 100 йыл тулыуҙы билдәләгәнгә 23 йыл ваҡыт үтеп тә китте. Ошо осор эсендә республикабыҙҙа тиҫтәләрсә йылдар, хатта быуаттар һуҙымында атҡарырлыҡ изге ғәмәлдәр башҡарылды. Һеҙ ошондай үҙгәрештәр фонындағы бөгөнгө Башҡортостанды Ә.З. Вәлиди хыялындағы Башҡортостанға оҡшатаһығыҙмы?**

- Эйе, һуңғы йылдар эсендә Башҡортостандың матди-иҡтисади өлкәһендә күҙгә күренерлек ыңғай эштәр башҡарылды. Шуныһы бигерәк тә ҡыуаныслы: илгә емереп килеп ингән матди һәм рухи көрсөккә беҙ Татарстан менән бергә уңышлыраҡ ҡаршы тора алдыҡ һәм бында ике туғандаш республика етәкселәренең роле ҙур булды. Улар халыҡтарыбыҙ яҙмышын ҡурсалап эш итә алды һәм шуның менән беҙҙең дәүләтселектең Рәсәй өсөн ҡиммәтен, әһәмиәтен һүҙҙә түгел, ғәмәлдә, Рәсәй етәкселегенә лә, бөтә Рәсәй халҡына ла иҫбат итә алды.

Ә инде Әхмәтзәки Вәлиди бөгөнгө Башҡортостанды, уның ҡалаларын, ауылдарын күрһә, ғәжәпләнерлек, һоҡланырлыҡ, шулай уҡ хәүефләнерлек күренештәр ҙә табыр ине. Бер яҡтан, ҡала-ауылдарҙың төҙөклөгө, ифрат киң уҡыу йорттары селтәре, икенсенән, тәбиғәттең йоҡарыуы, халыҡтың бер өлөшөндә күҙәтелгән эскелек, әхлаҡһыҙлыҡ һәм башҡа күп контрастар күҙенә ташланыр ине. Ә инде республиканың Рәсәй составындағы хәҙерге хоҡуҡи хәлен ғалим яҡынса "территориаль милли-мәҙәни мөхтәриәт" ("территориальная национально-культурная автономия") тигән мәғәнәлә баһалар ине, тип уйлайым. 40-70-се йылдарҙағы БАССР-ға ул бындай баһа биреүҙән дә тартыныр ине, моғайын. 20-се йылдарҙағы Башҡортостанды ла ул, хоҡуҡтары 20-се йылдың майында киҫелгәндән һуң, "милли-мәҙәни мөхтәриәт" тип баһалағайны, ғалим тамырҙан ҡабул итмәгән фекер, үҙе әйтеүенсә, "сиктәре һәм асылы билдәһеҙ милли-мәҙәни мөхтәриәт", йәғни "экстерриториальная национально-культурная автономия" ине. Теләгәне иһә, "территориаль автономия". Тик "автономия" һүҙен ул һуңынан ҡалыплашҡан ҡыҫыҡ һәм наҡыҫ "совет автономияһы" тип түгел, ә европалылар аңлағанса, киң сәйәси һәм иҡтисади автономия тип аңлай. Ә инде федератив дәүләт эсендә был ике ҡапма-ҡаршы формалар араһындағы территориаль, әммә хоҡуҡтары ныҡ сикләнгән дәүләтселекте "территориаль милли-мәҙәни мөхтәриәт" ("территориальная национально-культурная автономия") тиеберәк күҙаллай. Хәҙерге көндә бөтә республикалар ҙа, хатта Татарстан менән Башҡортостан да ошо хоҡуҡи сиктәр эсендә ҡала килә. Әлбиттә, 90-сы йылдарҙың башынан аҙағына тиклем был ике республиканың иҡтисади һәм сәйәси хәле Вәлиди теләгән "автономия"ға яҡынлағайны. Ғалим тере булһа, был процестарҙы бик ҙур ҡыҙыҡһыныу менән күҙәткән булыр ине, моғайын. Ләкин ул был мәсьәләләрҙе бөтә Рәсәй һәм Урта Азия, бөтә шәреҡ һәм донъя сәйәсәте фонында күҙәтер ине.

Яңы үҙ аллы төрки халыҡтары дәүләттәренең барлыҡҡа килеүе Әхмәтзәки Вәлиди өсөн күптән көтөлгән, иҡтисади һәм сәйәси йүндән ҡотолғоһоҙ геосәйәси күренеш. Тик Төркөстандың бер нисә дәүләткә бүленешен ул шөбһә һәм борсолоу тойғоһо менән ҡаршылар ине, сөнки Урта Азия төркиҙәренең тарих, тел, дин, ғөрөф-ғәҙәт, мәҙәниәт өлкәләрендәге берлеген яҡшы белгәнлектән, ул уларҙың дөйөм әҙәби тел тыуҙыра, бер дәүләт булып (федератив нигеҙҙә) ойоша алыуына бик ышана. Хатта немец теле диалекттарында ла бындай яҡынлыҡтың юҡлығын, әммә уларҙың быуаттар дауамында эрелеваҡлы үҙ аллы дәүләттәр булып йәшәп тә, бик ҡыҫҡа тарихи дәүерҙә бер милләт, бер дәүләт булып туплана алыуҙарын күҙ уңында тота. Ләкин Төркөстанда уның был өмөттәре аҡланманы һәм аҡланыр тигән ышаныс та бик самалы. Быға Урта Азия дәүләттәре элиталары ла, зыялылары ла әҙер түгел, теләмәйҙәр ҙә. Үҙ мәнфәғәттәренән сығып, сит ил етәкселәре, шул иҫәптән Америка ла, быға юл ҡуймаясаҡ. Тимәк, алдыбыҙҙа Ә.-З. Вәлиди күҙ алдына килтергән Төркөстан берҙәм "Төрөк иле" түгел, башҡа бер ҡатмарлы һәм ҡаршылыҡлы ысынбарлыҡ.

Һеҙ һорауҙы Башҡортостанға бәйле рәүештә бирҙегеҙ. Ләкин Ә.-З. Вәлиди Башҡортостанының хәлен бөтә Төркөстан яҙмышы менән бергә күҙ алдына килтерә. Төркиәлә Нәзмиә ханым менән ғалимдың көндәлек тормошо, көнкүреше хаҡында һөйләшкән саҡта уның рухи тормошондағы байтаҡ үҙенсәлектәрҙе аңларға мөмкин ине. 1944 йылда ғалимдың төрмәгә эләгеү ваҡиғаһы хаҡында һорашҡанда Нәзмиә ханым: "Мин уға йыш ҡына, һәр саҡ, һәр ерҙә Төркөстан, Башҡортостан, тип, улар мәнфәғәтендә һүҙ һөйләйһең, яҙаһың, ә Төркиәлә быны нисек аңларҙар, нисек ҡабул итерҙәр - уны иҫәпкә алмайһың, тип әйтә торғайным. Ләкин кеше һүҙенә бик ҡолаҡ һалмай торғайны шул. Күп һүҙҙәрен Төркиәлә яратманылар", - тигәйне. Был һүҙҙәрҙең бик тәрән һәм аныҡ мәғәнәһе бар. Ҡайҙа һәм ниндәй шарттарҙа булғанда ла, фәнни һәм сәйәси эшендә ул Төрөк иле мәнфәғәтен сағылдыра һәм яҡлай. Был эште һуғышта Советтар Союзы еңәсәге көн кеүек асыҡ булғанда ла дауам итә. Ғалимдың Урта Азияның азатлығы хаҡында артыҡ күп һөйләүе Төркиә хөкүмәтенең теләгенә, сәйәсәтенә ярашлы бармай. Еңелере билдәле Германияның тоғро союздашы Төркиәнең СССР-ҙан ҡурҡырға сәбәбе була, сөнки уның Босфор һәм Дарданеллаға ташланып, Төркиәнең боғаҙынан алырға ниәте бөтә донъяға мәғлүм. Германия тар-мар ителгәндән һуң Төркиәне яҡлаусы табылырмы? Нәзмиә ханымдың ҡурҡышында нигеҙ була, тарихсы буларaҡ, ул Урта Азия мәсьәләһендәге ныҡышмалылыҡ Вәлидиҙең үҙенә, ғаиләһенә, кескәй балаларына ниндәй ҡайғы-фажиғә килтерә алыуын яҡшы аңлай. Ғалимға ҡарата был ҡурҡыныс ул дәүерҙә хатта Төркиә хөкүмәте тарафынан да янай. Ә инде ғалим үҙе Советтарҙың КГБ-һын, бөтә тарафтарҙа эш иткән чекистарын яҡшы белә, хәлде башҡаларға ҡарағанда яҡшыраҡ аңлай. Ул шулай уҡ Төркиәнең Германия еңелгәндән һуң бик мөшкөл хәлдә ҡаласағын, уның хөкүмәтенең Советтарға ҡарата мөләйем йөҙ күрһәтергә маташыуын һәм бының ысынлап та сәйәси зарурат булыуын да белә. Ләкин ул теләһә ниндәй шарттарҙа ла үҙе булып ҡала, сөнки киң белем, тәрән фекер һәм көслө ихтыяр эйәһе булған һәр шәхестең яҙмышы - үҙең булып ҡалыу, бөгөлөп-һығылып, шыйыҡланып, башҡарған мөһабәт эштәреңә тап төшөрмәү. Дәһшәтле Бөтә донъя һуғышы осоронда "Төркөстан, Төркөстан" ти торғас, ғалим Төркиә төрмәһен дә күреп сыға, ләкин ғүмеренең аҙағына тиклем Төркөстандың ҡасандыр үҙаллы буласағына ышанысын юғалтмай.

Был контекста уның көнсығыш Башҡортостан яҙмышы хаҡындағы фекере бөгөнгө көндә бик ҡыҙыҡлы. Эмиграцияла сағында ла ул был тирәләге иҡтисади процестарҙы иғтибар менән күҙәтә. Иҙел буйындағы, Ҡаҙан тирәһендәге иҡтисади тормошто ул Рәсәй Европаһының эске мәсьәләләренең бер өлөшө, тип ҡарай һәм Өфө, Силәбе, Магнитогорск тирәһенең дә ошо юҫыҡта үҫеүен 30-сы йылдар уртаһында уҡ билдәләй һәм был тәңгәлдә Силәбелә - трактор, Магнитогорскиҙа - металлургия, Өфө янында - моторҙар эшләү, Орскиҙа нефть эшкәртеү заводтарының һәм Ишембайҙа нефть сығарыу предприятиеһының барлыҡҡа килеүен демографик, геополитик, сәйәси яҡтан әһәмиәтен билдәләй. Тимәк, тиҙҙән Өфө һәм уның тирәһе генә түгел, бөтә Башҡортостан инҡилаптар дәүерендәге ысынбарлыҡтан айырмалы, башҡа шарттарҙа ҡаласағын ул шул заманда уҡ күҙ уңында тота, тиҙ арала бөтә Башҡортостандың иҡтисади, демографик, геополитик һәм сәйәси хәле Иҙел буйы, Ҡаҙан тирәһендәгегә оҡшап ҡаласағын аңлай. Был иһә ғәскәр ойоштороу, дәүләт ҡороу, фундаменталь китаптар яҙыу өсөн ниндәй аналитик аҡыл кәрәклеген күрһәтеүсе бер факт. Ғалимдың үрҙә әйтелгән фекерҙәре "Ун ете ҡом аҫтында ҡалған ҡала һәм Садри Маҡсуди бей" исемле брошюраһында яҙылған (уны, тәржемә итеп, "Ағиҙел" журналында сығарҙыҡ).

Үткән 23 йыл эсендә Ә.-З. Вәлиди Туған хаҡында башҡорт зыялылары аңында фекер тамырынан үҙгәрҙе. Ләкин уның ижадын һәм әһәмиәтен тулы килеш күҙ алдына килтерәбеҙ тип әйтә алмайбыҙ әле. Иң мөһиме, Ә. Вәлидиҙең хеҙмәттәре, фекерҙәре, киләсәк тураһындағы фараздары, большевиктарға, монархистарға, рус демократтарына, ҡайһы бер татар, Төркөстан зыялыларына һәм Совет хөкүмәтенә ҡарата әйтелгән тәнҡит һүҙҙәре бик актуаль булып ҡала килә. Йәғни ғалимдың хеҙмәттәре, фекерҙәре әле булһа бөгөнгө һәм киләсәк өсөн фәһемле, ҡыҙыҡлы сығанаҡ.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ әҙерләне.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

## БАШҠОРТТАР Йорт производствоһы

Башҡорттар **һарыҡ йөнөнән кейеҙ** баҫа, шулай уҡ балаҫ һуғыу, тула баҫыу өсөн дә һарыҡ йөнө ҡулланыла. И.Г. Георги балаҫ һуғыу эшен түбәндәгесә һүрәтләй: "Баш бармаҡ ҡалынлығындағы тетелгән йөндө туҡымаға йәки септәгә һалып, эҫе һыу ҡоялар, һуңынан септә менән бергә йәйәләр, йөн яҡшылап ятҡансы, тағы һыу һибәләр, тағы йәйәләр". Ҡул менән кейеҙ баҫыу ысулы XX быуаттың башында ла ҡулланыла, тик был ваҡытта бар урында ла йөн баҫыу өсөн махсус ҡоролма барлыҡҡа килә. Кейеҙ баҫҡанда аттың ярҙамы ла ҡулланыла, был ысул бигерәк тә далала күсмә йәшәү рәүеше алып барыусыларға, көтөүселәргә яҡшы таныш. Был ысул менән баҫылған кейеҙ ҙур ҡамыш септәгә һалына һәм остарында баулы элмәктәре булған махсус күсәргә урала. Күсәрҙе атҡа егәләр һәм ул уны дала буйлап йөрөтә, һөҙөмтәлә, кейеҙ бик сифатлы итеп баҫыла. Кейеҙ күп итеп әҙерләнә, сөнки тирмәләр кейеҙҙән ябыла, тирмәнең иҙәненә лә кейеҙ түшәлә, ҡышҡы йорттарҙа урындыҡ өҫтөнә лә кейеҙ түшәйҙәр. Шулай уҡ ат өсөн тирлек (икенсе төрлө әйткәндә - ыңғырсаҡ), ҡайһы бер кейем-һалым, мәҫәлән, баш кейемдәре, аяҡ кейеме һ.б кейеҙҙән тегелә.

Һарыҡ йөнөн иләп, унан төрлө кейем, балаҫтар һуғыу эше киң таралған. Йөн оҙон таяҡҡа йәки ҡолғаға бәйләнә. Семәрләп биҙәлгән ҡолғалар ҙа осрай. Йөндө орсоҡ менән иләйҙәр. Балаҫты һарыҡ һәм кәзә йөнөнән баҫалар, балаҫ һуҡҡанда бер йүнәлештә - кәзә, икенсе йүнәлештә һарыҡ йөнөнән иләнгән еп ҡулланылған. Кәзә йөнө - дебеттән көньяҡ-көнбайыш башҡорттары мамыҡ шәл, шарф һуға (Урал казактары кеүек бәйләмәй). Көньяҡ Урал тауҙарында йәшәүсе гәрәй-ҡыпсаҡтар ҡуян йөнөн дә иләгән һәм уны кәзә дебетенә ҡушып ҡулланған.

Хайуан материалдарынан **һеңер һәм мөгөҙҙө** әйтеп китергә кәрәк. Башҡорттарҙың аяҡ кейеме тегеү өсөн һеңер ҡулланыуы тураһында иң тәүҙә И.И. Лепехин телгә ала. И.Г. Георги был турала шулай тип яҙа: башҡорттар тунды "эре малдың аяғынан тартып алынған телгеләнгән һеңерҙән тегә. Һеңерҙе ҙур һәм һуҡ бармаҡ араһындағы оҙонлоҡта ҡырҡалар, һауала киптерәләр һәм улар телгеләнгәнсә һуҡҡылайҙар, һуңынан бер урында ла төйөн ҡалдырмай сиратталар". Билдәле булыуынса, XX быуат башында бындай election ептәр ҡулланыуҙан төшөп ҡала.

Мөгөҙгә килгәндә, ул йәйә эшләү өсөн генә ҡулланыла. Һыйырҙың мөгөҙөн эҫе һыуҙа тотоп, ике сантиметр оҙонлоғонда, ике сантиметр ярым киңлегендә, бер нисә миллиметр ҡалынлығында пластиналар ҡырҡып алалар. Был пластина йәйәнең эске яғына йәбештерелә һәм уға ныҡлыҡ һәм һығылмалыҡ бирә.

*✓ Яҡты уйҙар, изге ниәттәр тыуҙырған, иртәгәһе көнгә ышаныс уятҡан, тормош һабағы биргән фильмдар кәрәк бөгөн. Яуызлыҡты барыбер яҡшылыҡ еңеүен рекламалау мөһим.*



**Шундай кешеләр була: ҡылған изгелектәре генә түгел, уңыш-ҡаҙаныштарының иҫәбе-һаны булмаһа ла, юғары дәрәжәләргә өлгәшеп, маҡтаулы исемдәр йөрөтһә лә, иплелеге, тыйнаҡ баҫалҡылығы менән ғәм халыҡты һоҡландыра, таң ҡалдыра. Мәләүез районы Восточный ҡасабаһында йәшәгән был шәхес - физика-математика фәндәре кандидаты, профессор Мәжит Мәхмүт улы МӘХМҮТОВ та шундайҙарҙың береһе. Ҡырҡ йылға яҡын ғүмерен фәнни-педагогия эшмәкәрлегенә арнаған уҙаман үткән тормошон, башҡарған эштәрен, иңләгән юлдарын, үтәгән бурыстарын бер ниндәй һан һәм дәүмәлдәр менән иҫәпләмәй. Үҙ тырышлығы, һәләте, белеме, тынғыһыҙ көндәре, йоҡоһоҙ төндәре менән яулаған үрҙәрҙе яҙмышы бүләге тип ҡабул итә. Шуға ла ул яҙмышына рәхмәтле. Тыңлайыҡ үҙен.**

# Һәләтле йәштәр үҫтереү... иң ҙур инвестиция инде



## Йәшәү һуты - тыуған ерҙә

Сығышым менән Баймаҡ районынанмын. Йәмле Һаҡмар буйындағы Йомаш ауылында Маһира Сәләх ҡыҙы һәм Мәхмүт Шаһимәрҙән улы Баймырҙиндарҙың татыу ғаиләһендә икенсе бала булып донъяға килгәнмен. Аңлатып китәйем: минең фамилия атайымдың исеменән алынған. Боронғо атай-олатайҙар йолаһын тотоп, атайым мин тыуғас та, улым билдәле кеше булыр, минең исемемде данлар, тип юрап, үҙенең исемен фамилия итеп яҙҙырған. Атайым үҙе ифрат һәләтле кеше ине. Нимәгә тотонһа ла ҡулынан килер, уны ысынъяһау итеп эшләп ҡуйыр ине. Бөйөк Ватан һуғышына тәүгеләрҙән булып алынған һәм яу яланында телефон станцияһы начальнигы булып хеҙмәт иткән. Ашар ризығы, эсәр һыуы бөтмәгәс, фронт юлын башынан аҙағынаса үтеп, тыуған ауылына иҫән-һау әйләнеп ҡайтырға насип була уға. Һуғыштан һуңғы бөтә ғүмерен иһә тыуған төйәгенә арнаны. Бала саҡ, йәшлек хәтирәләрем бөтәһе лә атайыма, әсәйемә, туғандарыма барып тоташа. Бөгөнгө тормош тәжрибәмдән сығып, уларҙың икеһе лә үҙ заманының киң ҡарашлы, юғары мәҙәниәтле кешеһе булғанын аңлайым. Атайым беренселәрҙән булып ауылға электр уты үткәрҙе, радио сымдарын һуҙҙы, киномеханик булып эшләне. Ҡайҙа ғына эшләһә лә, ауылдың абруйлы, хөрмәтле кешеһе булды. Әсәйем ҡырҡ йылдан ашыу ғүмерен уҡытыусылыҡҡа арнаны. Алты балаһына ла күркәм тәрбиә бирҙе атай-әсәй. Юғары белемле өс педагог, өс инженер сыҡты беҙҙең ғаиләнән. Һин шулай ит, былай ит, тип тәрбиәләмәне улар беҙҙе, үҙ өлгөләре менән үрнәк булдылар. Ғәҙеллек яраттылар, ололарға кешелекле, кеселәргә кеселекле булдылар.

## Фәнни эшмәкәрлегемә нигеҙ

Кластан класҡа тик "бишле" билдәләре менән күсеп уҡыным. Атайым минең физика фәне буйынса китеүемде теләне, үҙе лә был өлкәне бик яҡшы белде. Һыу тирмәне эшләп, дөйөм хужалыҡ баҡсаһына һыу һиптереү ҡулайламаһы ла йүнәтеп ҡуйыуы хәтерҙә.

8-се класты тыуған мәктәбемдә тамамлағас, 9-10-сы класты 1-се республика башҡорт мәктәп-интернатында уҡыным. Республиканың абруйлы уҡыу йортонда уҡыған йылдарымды әле булһа һағынып иҫкә алам. Мәктәп-интернатта үҙ эшенә мөкиббән киткән, балалар яратҡан педагогтар эшләне. Ысын тормош һабағы алып сыҡтым унан. Төрлө түңәрәктәр әүҙем эшләне, уҡытыусылар, тәрбиәселәр үҙ ваҡыты иҫәбенә төрлө экскурсиялар ойошторҙо, беҙҙе, йәш быуынды, йәмғиәт тормошо менән яҡындан таныштырҙы. Был практика хәҙер мәктәптәрҙә бик үк ҡулланылмай, бөтәһе лә аҡса менән иҫәпләнә, шул арҡала балалар күп нәмәнән мәхрүм ҡала. Ә бит ул экскурсия, осрашыуҙар оло тәрбиә мәктәбе. Үҙемдең математика-информатика фәне юлынан китеүемә лә ошо Башҡорт дәүләт университетына ойошторолған экскурсия сәбәпсе булды тип әйтә алам. Компьютерҙы тап ошо юғары уҡыу йортонда күрҙем һәм уның шул тиклем "аҡыллы техника" булыуына ғашиҡ булдым. Уны төплө өйрәнеү, уның менән эшләү теләге уянды. Ошо хыялым мине Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университетына алып килде. Иҫәпләү математикаһы һәм кибернетика факультетын ҡыҙыл дипломға тамамланым.

## Хеҙмәт биографиям - Башҡортостанымда

Уҡып бөткәс, бөтәбеҙгә лә өмөтлө киләсәк юрап, лайыҡлы эш урыны, фатир вәғәҙә итеп, Мәскәүҙә ҡалырға тәҡдим иттеләр. Утыҙ өс кешенең өсәүһе генә кире тыуған яҡтарына ҡайтырға теләк белдерҙе. Шулар араһында мин дә бар инем.

Шулай итеп, хеҙмәт биографиямды 1972 йылда Башҡорт дәүләт университетында башланым. Ул ваҡытта юғары уҡыу йортонда информатика-математика буйынса бер генә белгес тә юҡ ине, шуға күрә иҫәпләү математикаһы һәм кибернетика кафедраһына ҡуш ҡуллап эшкә алдылар. Кафедра коллективы бик дуҫ булды. Бында оло тормош тәжрибәһе алдым, беренсе тапҡыр хеҙмәт тәмен, хеҙмәт уңышын татыным. Дуҫлыҡҡа, тормошҡа, эшкә ҡарата үҙ принциптарым барлыҡҡа килде. Тоғролоҡ, тырышлыҡ, ярҙамсыллыҡ, ғәҙеллек, изгелек, әҙәплелек кеүек сифаттарҙың ниндәй бөйөк көскә эйә булыуын тойҙом. Кешелек донъяһының төп терәге инде был сифаттар. Һуңғы йылдарҙа йыш ҡына ошо изге төшөнсәләрҙе юҡҡа сығарырға тырышалар. Бөгөн һин ни тиклем уҫалыраҡ, әрһеҙерәк, әҙәпһеҙерәкһең, шул тиклем уңышлыраҡһың. Бөтә кинофильмдар ҙа тиерлек шуға ҡоролған. Бөгөнгө көн геройы йәки уңышлы кеше образы - һөмһөҙ, тәрбиәһеҙ кеше. Эшләйме ул, юҡмы - билдәһеҙ. Иң мөһиме - сит ил автомобилендә йөрөй, ҡулда - тәмәке, шешә. Ошондай фильмдар ҡарап үҫкән быуын нисек булырға тейеш һуң? Әлбиттә, улар ҙа ошо киногеройҙарға оҡшарға тырыша. Кредитҡа алып булһа ла затлы кейем кейә, бурысҡа батһа бата, сит ил машинаһы һатып ала. Ә рухи аҙыҡ, рухи байлыҡ артҡы планға күсә. Илһөйәрлек, ватансыллыҡ рухы менән һуғарылған, яҡты уйҙар, изге ниәттәр тыуҙырған, иртәгәһе көнгә ышаныс уятҡан, тормош һабағы биргән фильмдар кәрәк бөгөн. Яуызлыҡты барыбер яҡшылыҡ еңеүен рекламалау мөһим. Аҙым һайын тәмәке тартыуҙы, эскелекте, наркоманлыҡты иҫкәртеүсе социаль рекламалар кәрәк.

Университетта егерме йыл ассистент, өлкән уҡытыусы, иҫәпләү математикаһы кафедраһы доценты вазифаларында эшләнем. Ситтән тороп аспирантура тамамланым һәм 1984 йылда Мәскәү дәүләт университетының иҫәпләү математикаһы һәм кибернетика факультетында кандидатлыҡ диссертациямды яҡланым. Доцент ғилми дәрәжәһе 1989 йылда бирелде. Башҡорт дәүләт университетының Ғилми советы ағзаһы, ҡабул итеү комиссияһының яуаплы секретары дилбегәләрен тарттым. Вазифалар яуаплы, эш тығыҙ булыуға ҡарамаҫтан, йәмәғәт эштәрендә әүҙем ҡатнашырға тура килде. Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы һәм Башҡортостан мәғарифты үҫтереү институтының ауыл мәктәптәрен компьютерлаштырыу буйынса программаларына ярашлы, республиканың белем биреү учреждениеларында компьютер кластарын асыу буйынса күп эшләнем.

1993 йылда килешеү нигеҙендә Мәләүез районында һәләтле балалар өсөн информатика-математика йүнәлешле, янында интернаты булған лицей асыуҙы ойоштороп йөрөнөм. Ошондай уҡ уҡыу йортон Баймаҡ районы Беренсе Этҡол ауылында асыуҙа ҡатнаштым. Ваҡытында тейешле органдарға документтар юллап, юлда осраған төрлө бюрократик ҡаршылыҡтарҙы атҡарып, ошондай лицейҙар асыуға көс һалыуым менән бәхетлемен тип әйтә алам. Уларға һәләтле балаларҙы йыйыу, белем усағының матди-техник базаһын тулыландырыу, атап әйткәндә, уны заманса техникалар, компьютерҙар менән йыһазлау буйынса ныҡышмалы эшләргә тура килде.

> ***Кафедра коллективы бик дуҫ булды. Бында оло тормош тәжрибәһе алдым, беренсе тапҡыр хеҙмәт тәмен, хеҙмәт уңышын татыным. Дуҫлыҡҡа, тормошҡа, эшкә ҡарата үҙ принциптарым барлыҡҡа килде. Тоғролоҡ, тырышлыҡ, ярҙамсыллыҡ, ғәҙеллек, изгелек, әҙәплелек кеүек сифаттарҙың ниндәй бөйөк көскә эйә булыуын тойҙом. Кешелек донъяһының төп терәге инде был сифаттар. Һуңғы йылдарҙа йыш ҡына ошо изге төшөнсәләрҙе юҡҡа сығарырға тырышалар. Бөгөн һин ни тиклем уҫалыраҡ, әрһеҙерәк, әҙәпһеҙерәкһең, шул тиклем уңышлыраҡһың. Бөтә кинофильмдар ҙа тиерлек шуға ҡоролған. Бөгөнгө көн геройы йәки уңышлы кеше образы - һөмһөҙ, тәрбиәһеҙ кеше. Эшләйме ул, юҡмы - билдәһеҙ. Иң мөһиме - сит ил автомобилендә йөрөй, ҡулда - тәмәке, шешә. Ошондай фильмдар ҡарап үҫкән быуын нисек булырға тейеш һуң? Әлбиттә, улар ҙа ошо киногеройҙарға оҡшарға тырыша.***

## Аҡылыма һәм дуҫтарыма таянам

Восточный лицей-интернатында компьютер кластары булдырылып, эштәр яйға һалынғас, 1997 йылда Башҡорт дәүләт университетының Сибайҙа яңы асылған филиалына математика-информатика кафедраһына эшкә саҡырҙылар. Был ваҡытта унда ғилми дәрәжәләге бер математик та юҡ ине. Шуға ла иң тәүҙә коллектив тупларға тура килде. Йәштән шулай ғәҙәтләнгәнмен: яңы эшкә тотонор алдынан иң беренсе үҙемдең мөмкинлектәрҙе, көсөмдө бар-

лайым, шунан дуҫтар, хеҙмәттәштәр ярҙамына таянам. Сибайға барғас, ярҙам ҡулы һуҙыусыларҙан Зиннур Йәрмөхәмәтов, Сәфәрғәле Йәнтүрин, Йәлил Һөйөндөковтарҙы атап киткем килә. Дуҫтар һайлағанда уларҙың кешелек сифаттарына иғтибар итәм. Асыҡ күңелле, тура һүҙле, әҙәпле кешеләрҙе ихтирам итәм, үҙем дә дуҫлыҡҡа бер ҡасан да хыянат итмәнем тип әйтә алам.

### Заманға "аҡыллы йәмғиәт" кәрәк

Ҡайҙа ғына эшләһәм дә, фәнни эҙләнеүҙәр, ғилми тикшеренеүҙәрҙән ситләшмәнем. Студенттар өсөн төрлө методик пособиелар сығарҙым, үҙәк баҫмаларға, журналдарға, йыйынтыҡтарға фәнни мәҡәләләр яҙҙым. Башҡорт дәүләт университетында эшләгәндә ун йыл буйы ике бала менән дөйөм ятаҡта йәшәгәндә лә фән менән ҡыҙыҡһыныуҙы туҡтатманым. Бөгөнгө фән эшмәкәрҙәренә, йәш ғалимдарға, шөкөр, дәүләт тарафынан иғтибар көсәйҙе. Нинайәт, беҙҙә лә фәндең йәмғәт тормошондағы роле ҙур икәнлеген аңланылар. Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов та үҙенең Мөрәжәғәтнамәһендә республикала "аҡыллы йәмғиәт" төҙөү - иң мөһим бурыстарҙың береһе булыуын билдәләне. Фәндең үҫешенә, йәш ғалимдарҙы үҫтереүгә төрлө яҡлап ярҙам итеү - иң өҫтөнлөклө маҡсаттарҙың береһе бөгөн. Был мине бик һөйөндөрә. Юғиһә, "аҡыллы баш"тарҙы йәлап сит илдәр әүрәтеп алып китеп бөтөп бара. Һәләтле йәштәрҙе үҫтереү, дәртләндереү, ярҙам итеү - иң ҙур инвестиция бит ул. Ошо йүнәлештәге эш артабан да дауам итһен тип теләйем.

### Ғаиләм - кәлғәм

Үҙем тураһында һөйләгәндә ғаиләм тураһында ла әйтеп үтеү кәрәктер. Ике бала атаһы булғас, аҙмышым 1-се республика башҡорт мәктәп-интернатында (хәҙерге Рәми Ғарипов исемендәге Башҡорт республика гимназия-интернаты) бергә уҡыған класташым, Мәләүез районы Иштуған ауылы ҡыҙы Фәнилә Солтанғужина менән бәйләне. Был ваҡытта Фәниләнең өс ҡыҙы үҫеп килә ине. Ҙур, татыу ғаиләгә ойошоп, бәхетле ғүмер кисерҙек, тип әйтә алам. Мөҙҙәтле ялға сыҡҡас, иң дәртле, ялҡынлы хеҙмәт йылдарым тураһында хәтерләтеп, иҫкәртеп торған Восточный ҡасабаһына ҡайтып төйәкләндек. Ауыл тормошо шундай танһыҡ. Ниһайәт, яратҡан шөғөлдәремдә тормошҡа ашырырға мөмкинлек тыуҙы: балта эшен яратам, ҡурайҙа, мандолинала уйнайым. Һәләтле балаларҙы компьютерға, ҡурай, мандолинала уйнарға өйрәтергә лә теләк юҡ түгел. Хаҡлы ялда булһам да, хыялдарым, ниәттәрем бар әле.

**Лена АБДРАХМАНОВА яҙып алды.**

ФЕКЕР ҠОРО

# АРТАЙЫҠ ҺӘМ...

## ҡан таҙалығын һаҡлайыҡ



**Бөгөн беҙ ниҙәр эшләйбеҙ, тормошобоҙ йәйлап алға табан шыуышамы, әллә артҡа китәме? Халҡыбыҙ меңәр йылдар буйы тоғролоҡ һаҡлаған төп ҡанундарыбыҙҙы онотмағанбыҙмы? Ата-бабаларыбыҙ йөҙ борған йүнәлештән ситкә ҡайырылмағанбыҙмы? Башҡорт дәүләт университетының тарих факультеты доценты Азамат АҠЪЮЛОВ ошо һәм башҡа һорауҙарға ҡарата үҙ фекерҙәре менән уртаҡлашмаҡсы.**

### Зирәк аҡыллы халҡыбыҙ

Тарихҡа ҡараш ташлаһаң, иң тәүҙә башҡорт халҡының ауырлыҡтарҙы еңеп сығыу оҫталығына, түҙемлегенә хайран ҡалаһың. Ниндәй генә хәлдәр килеп тыуғанда ла ата-бабаларыбыҙ уны йырып сығыр аҡылға эйә булған. Икенсенән, халҡыбыҙҙың үҙен-үҙе һаҡлау көсө барлығына ла ышанаһың. IX быуатта төҙөлгән карталарҙа - бәшәнәктәр, мадьярҙар, древляндар, поляндар, хазарҙар, Иҙел (Волга) болғарҙары менән бер рәттә башҡорттар ҙа күрһәтелгән. Быуаттар үткән, һәм әле беҙ һанаған халыҡтар, төрлө сәбәптәр арҡаһында, башҡа халыҡтар тарафынан йотолған, йә икенсе исем менән атап йөрөтөлә башлаған, бөгөнгө карталарҙа уларҙың эҙҙәрен табыуы ауыр. Башҡорттар ғына телен дә, башҡорт тигән исемен дә юғалтмаған. Мең йыл элек ҡулланылған тел менән бөгөнгө телебеҙ араһында айырма ҙурҙыр, әлбиттә. Сөнки тел туҡтауһыҙ байый, камиллаша...

Башлаған һүҙҙе дауам итәйек. Тарих аренаһында башҡорттар һымаҡ ыҙалар, һуғыштар, туҡтауһыҙ барымта-ҡарымталар, каратель операциялары кисергән бер халыҡ та юҡтыр, моғайын. Батырлыҡтарына ла хайран ҡалырлыҡ. Әйтәйек, башҡорттар 14 йыл буйына монгол-татарҙарға ҡаршы һуғыша, ахыр сиктә еңелмәй, ә ҡан ҡойоштоң мәғәнәһеҙлеген аңлап, килешеү төҙөй. XVI быуатта "Аҡ батша" Иван Грозный ҙа башҡорт иле менән рус илен бергә ҡушыу тураһында килешеү төҙөргә тәҡдим итә. Шулай итеп, еренә, иркенә ҡурҡыныс янаған саҡта башҡорттар, сараһыҙҙың көнөнән, дошманға ныҡлы ҡаршылыҡ та күрһәтә, мәле еткәндә дипломатик һөйләшеүҙәр ҙә алып бара белә. Әммә бер илгә лә баҫып инмәй. Был - башҡорт халҡының иң төп үҙенсәлектәренең береһе.

Рус дәүләтенә ҡушылғас та халҡыбыҙ үҙ хоҡуҡтарын яҡлап, ихтилалдарға күтәрелгән, ҡурҡмаған. Шуға күп кенә хоҡуҡтарын һаҡлауға өлгәшкән.

### Тәүҙә - ишәйергә!

Хәҙерге ваҡытта беҙҙең өсөн генә түгел, Рәсәй өсөн дә һынау мәле. Шул уҡ ваҡытта, хәлебеҙ бик үк насар ҙа түгел. Сөнки үҫер, нимәнелер өйрәнер, уйҙарыңды тормошҡа ашырыр өсөн шарттар күп. Шул шарттарҙы күрә белеп, файҙаланырға ғына кәрәк.

Әлбиттә, проблемалар ҙа бар. Әммә улар бөтөнләй хәл итеп булмаҫлыҡ түгелдер, тип уйлайым. Мәҫәлән, минә ауылға ҡайтып, туғандар, ауылдаштар менән аралашҡан саҡта, хужалыҡ эшендә тырышҡан кешеләрҙең яҡшы ғына йәшәүен йыш күрергә тура килә. Эшләгәндең аҡсаһы ла, ашарына ризыҡы ла, кейеме лә бар. Эш менән тәрбиәләнгән балалар ҙа эшлеклерәк, тырышыраҡ була, минә ҡалһа.

Балалар темаһын юҡҡа ғына ҡуҙғатманыҡ. Беҙ йыш ҡына теге йәки был ҙур масштаблы мәсьәләне нисек йырып сығырға белмәй аптырап ҡалабыҙ. Аптырарға кәрәкмәйҙер, тип уйлайым. Ниндәйҙер мәсьәлә күтәрер алдынан беҙ иң тәүҙә ишәйергә тейешбеҙҙер, моғайын. Һаныбыҙ күберәк булһа, үҙебеҙҙең мәнфәғәттәрҙе ҡәнәғәтләндереүе лә еңелерәк буласаҡ. Әлеге ваҡытта ишәйер өсөн мөмкинлектәр етерлек. Мәҫәлән, Ҡытайҙа бер ғаиләгә бер баланан артыҡ бала табырға ҡушмайҙар. Ҡайһы бер илдәрҙә икеүҙән артыҡ бала табыу закон тарафынан рөхсәт ителмәй. Ә беҙгә, киреһенсә, "табығыҙ", тип, торалар, хөкүмәт стимул бирә. Икенсе яҡтан, һәр бала үҙенең ризығы менән тыуа...

### Уҡыу-уҡытыуҙың файҙаһы

Бөгөнгө көндә күп кенә ата-әсәләр балаларына урта махсус, юғары белем бирергә ынтылып, дәрәҫ эшләй, миненсә. Баланың киләсәген ҡайғыртаһың икән, уға мотлаҡ рәүештә белем бирергә булышлыҡ итергә кәрәк. Белем тигәнем һөнәри белемгә генә ҡайтып ҡалмай. Халҡыбыҙҙың риүәйәт-легендаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен, йырҙарын, шәхестәрен, тарихын һәм, әлбиттә, туған телен белергә тейеш бала. Ошоларҙы һәм ошолар менән бер рәттә торған ҡиммәттәребеҙҙе белһә, кеше ауыр ваҡытта юғалып ҡалмай. Юғиһә, ҡайһы бер милләт вәкилдәре, бәлки, ошоларҙы белмәүе арҡаһындалыр, икенсе милләт вәкилдәренән көлөргә, уларҙы төрлө юлдар менән кәмһетергә тырыша. Был - кәмһенеү тойғоһонан да килә торғандыр, тип уйларға урын бар. Һәр хәлдә, минә шулай тойола.

Аллаһы Тәғәләгә яҡынайыр өсөн дингә килергә тейешбеҙҙер, моғайын. Тик яңы барлыҡҡа килгән төрлө ағымдар ярҙамында түгел, ә халҡыбыҙға хас булған ислам диненә ҡайтырға кәрәк беҙгә. Тағы ла бер мәлде күҙҙә тоторға кәрәк. Дингә килер алдынан иң тәүҙә "Урал батыр" эпосын, башҡа эпостарыбыҙҙы өйрәнергә, күңелдәребеҙгә һеңдерергә тейешбеҙ. Сөнки уларҙа беҙҙең халҡыбыҙ характерына, уның аңына тап килгәнсә итеп яҙылған аҡыл ята. Шул аҡылды өйрәнмәй, уны ҡабул итмәй тороп, йәш кешегә беҙҙең ерлектә барлыҡҡа килмәгән исламға килеүе ҡурҡыныс. Эпостарыбыҙҙы уҡыу зарурлығы балаларға ғына түгел, фән докторҙарына тиклем ҡағыла. Рухты һәр ваҡыт уяу тотор өсөн гел генә халыҡ ижады өлгөләрен ҡараштырып, хәтергә төшөрөп торорға кәрәк.

### Ҡан таҙалығы

Рухты уяу тотор өсөн тағы бер нәмә - ҡанды ла таҙа тоторға кәрәк. Сәләмәт тормош тураһында әйтеп тә тормайым, сөнки униһы - былай ҙа аңлашылып торған талап. Иғтибарҙы үҙебеҙ ашаған аҙыҡ-түлектең таҙалығына йүнәлтке килә. Беҙгә, айырыуса ҡала ерендә йәшәүселәргә, йыш ҡына океан аръяғында, йә Азияла үҫтерелгән емеш-еләк, ит-һөт продукттары менән туҡланырға тура килә. Шуға, ҡаныбыҙҙы таҙа тоторға, милли аҙыҡ-түлеккә ҡайтырға кәрәк. Сөнки аҙыҡ-түлектең төрләһе була - ҡайһылары кешелә агрессия тыуҙыра. Осһоҙло колбаса урынына ит һатып алһаң яҡшыраҡтыр, тип уйлайым. Шул уҡ спиртлы эсемлектәр урынына ҡымыҙ, буҙа эсһәк, ҡаныбыҙҙы таҙартыуҙың бынамын тигән асылы булыр был. Хатта ҡайһы бер ауырыуҙарыбыҙҙы ла милли аҙыҡтар менән дауалап булалыр, тип уйлайым. Ҡорот менән, мәҫәлән.

Беҙ үҙебеҙ ауыл менән даими бәйләнештә торабыҙ. Икмәкте лә өйҙә бешерәбеҙ. Милли эсемлектәрҙе лә үҙебеҙ әҙерләйбеҙ. Йыл буйына үләндәр эсәбеҙ. Йәй буйына емеш-еләк йыйып, уларҙы туңдырып ҡуябыҙ ҙа, ҡыш буйы ашайбыҙ. Шулай итеп, рухты тәрбиә яғынан да, ҡан кимәлендә лә нығытыуға булышлыҡ итәбеҙ, тип уйлайым.

Бөгөн булып үткән ваҡиғалар иртәгә тарихта ҡаласаҡ. Кисәге ваҡиғалар бөгөнгө өсөн - үткәндәр. "Үткәндәр" тигән төшөнсәне беҙ дөрөҫ аңлайбыҙмы икән? Уға дөрөҫ баһа бирәбеҙме? Кәрәк саҡта унан фәһем алабыҙмы? Ошондай һорауҙар өҫтөндә лә уйланырға, баш ватырға саҡырам гәзит уҡыусыларҙы.

**Иҙел РӘХИМОВ яҙып алды.**

УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# МИЛЛӘТЕБЕҘҘЕ...

## битараф булмаҫҡа өйрәтә

**"Киске Өфө" гәзитен бөгөнгө көндә иң популяр баҫма, тип әйтер инем. Ауылға ялға ҡайтҡанда ла, уҡыу йортонда йәки ятаҡ бүлмәләрендә лә был гәзитте йыш осратам, үҙем дә уны аҙна һайын уҡып барам.**

Бөгөнгө быуын йәштәре араһында гәзит-журналдар уҡыу ғәҙәте юҡҡа сыға бара. Мәғлүмәтте башҡа сығанаҡтан да алып була бит, тигәндәр ҡулға тотоп уҡыуҙың тәмен бер ҡасан да тойоп ҡарамағандыр ул, сөнки китап йәки гәзит-журнал уҡыуҙың кинәнесен бер тойһаң, унан башҡаса айырылып та булмай.

Һайлаған һөнәребеҙ буйынса башҡорт теле һәм әҙәбиәте нескәлектәренә төшөнгәндә лә, Тыуған илебеҙҙең тарихын өйрәнгәндә лә, дәрестәргә әҙерләнгәндә лә ҡулланабыҙ "Киске Өфө"нө. Әҙәбиәт буйынса белгес булараҡ, ҡыҙыҡлы хикәйәләр, башҡа проза әҫәрҙәре баҫылыуы оҡшай, яңы авторҙар менән дә башлыса гәзит аша танышабыҙ, үҙебеҙ өсөн яңы исемдәр асабыҙ. Файҙалы, фәһемле кәңәштәр ҙә студент өсөн ярап ҡала. Сәйәсәт, күренекле шәхестәр тураһында ҡыҙыҡһынып уҡыйым. Көньяҡ Уралдағы районлар тормошон ҡарап барырға тырышам. Шунан дуҫтарым менән барыһы тураһында ла фекерҙәребеҙҙе уртаҡлашабыҙ, бәхәсләшеп тә китәбеҙ, шул рәүешле фекерләргә, үҙ телебеҙгә, республикабыҙ йәшәйешенә битараф булмаҫҡа өйрәнәбеҙ. Башҡортостандың төрлө райондарына арнап сығарылған кроссворд, сканвордтарҙы сисеп, белемебеҙҙе лә һынап алабыҙ.

Ололарға "Киске Өфө"ләге бар мәҡәләләр ҙә оҡшаһа, йәштәштәрем иһә унда билдәле спортсылар, артистар, спорт саралары һәм, әлбиттә, студенттар тураһында күберәк яҙылһа ине, тиген теләктә.

**Илмир ҒӘБИТОВ. СиБГУ студенты.**

**✓ *Бала, ата-әсәһе бер милләттән булһа ла, ҡатнаш милләттеке булһа ла, тик уларҙың береһенең генә ҡанын алып, артабан йәшәүен дауам итә. Әйткәндәй, интеллект балаға тик Әсәнән (!) генә күсә, тип иҫбатлай генетиктар.***



Тамара ҒӘНИЕВА

# КЕШЕ

**(Дилетант яҙмалары)**

*Кешеләргә ҡарап ҡайғым арта,*
*Наҡыҫайҙы әҙәп, самалар.*
*Олимп тауына көтөү ебәргәндәр.*
*Зыяратта бесән сабалар.*
*Мостай Кәрим.*



## Мәңгелек һорауҙар

...Кеше яҡты донъяға ни өсөн килә? Уға тыуған сағында кемдер, ниндәйҙер маҡсат йөкмәтәме? Үҙенең ерҙәге бурысын бәндә нисек төшөнә һәм яҙмышын ни рәүешле билдәләргә кәрәклекте ҡайҙан белергә тейеш?

Был иртәме-һуңмы һәр кемдең алдына баҫа торған һорауҙар. Тыуыу менән үлем араһы - шул тиклем ҡыҫҡа. Бер ҡараһаң, Ер өҫтөн бүтән бер ҙә күрмәҫ өсөн ҡалдырып китеүгә дусар бәндә тәҡдире - ҡотолғоһоҙ фажиғә, мәғәнәһеҙлек кеүек күренергә һәм кеше күңел төшөнкөлөгөнә, сараһыҙлыҡ хәсрәтенә бирелергә тейеш кеүек. Миллиардлаған йылдар тереклек иткән кешелек цивилизацияһы тарихына күҙ һалһаң, йәшәү мәғәнәһен эҙләү бер ҡасан да да туҡтамаған. Кемдер уны төрлө-төрлө дини тәғлимәт, арбағыс тылсым, серҙәрҙең айышын вәғәҙә итеүсе ғилми асыштар, әҙәбиәт, сәнғәт әһелдәре художестволы образдар, ижади символдар, икенселәр серле изотерика, астрология, күрәҙәселек һәм сихыр-хөрәфәт кеүек юлдар аша эҙләй. Эҙләнеүҙәре асыштарға юлыҡтыра, нәҡ ана шундай ижади эҙләнеүҙәр, асылда, үлемгә табан атлап китеп барыусы әҙәм балаһының ғүмерен, ғөмүмән, кешелектең йәшәйешен ҡыҙыҡлыраҡ, мәғәнәлерәҡ итә, күрәһең.

Ә шулай ҙа... Донъялағы иң серле һәм, әйтер инем, иң аңлайышһыҙ субстанция - ул кешенең үҙе. Уй-зиһендән мәхрүм түгел, күрер күҙгә бер-береһенән әллә ни айырылмаған кешеләр солғанышында йәшәйбеҙ беҙ. Бер үк төрлө шарттарҙа формалашабыҙ. Ейгән ризығыбыҙ, кейгән кейемебеҙ оҡшаш. Бер үк мәктәптәрҙә, бер үк программаны үҙләштерәбеҙ. Замандаш булыуыбыҙ сәбәпле бер үк идеология һәм иманыстар эсендә йәшәйбеҙ. Тик... Нишләп һуң бер-беребеҙҙән бигерәк тә нык айырылабыҙ? Ни өсөн бер-беребеҙҙе аңлай алмауҙан интегәбеҙ, хатта фажиғәләр, һағыш кисереүҙәргә тиклем барып етәбеҙ? Ни өсөн беҙҙең класташтар араһында фиҙаҡәр хеҙмәте өсөн миҙал, орден таҡҡандар, фәндә асыштар яһағандар, әҙәби ижадта, сәнғәттә уңыш яулағандар, композитор, рәссамдар, иген игеүселәр, балалар уҡытыусылар, кешеләрҙе дауалаусылар, малсылар булған кеүек, ҡараҡтар, енәйәтселәр, кеше үлтереүселәр, педофилдар, гомосексуалистар (хәйер, һуңғы икәүһе башҡорттар араһында юҡ тиерлек) барлыҡҡа килә һуң? Мин бына ярайһы өлкән йәшкә еткән, ғүмер эсендә байтаҡ кешеләр менән аралашҡан, тормош тәжрибәһе туплаған, хатта ки, үҙ инаныс-кисерештәрем хаҡында китаптар яҙып, күп уҡыусыларҙың фекерҙәремде ҡабул итеүенә өлгәшкән кешемен, әммә әле булһа ҡайһы бер яҡшы беләм тип уйлаған кешеләремдең яңынан-яңы, йә ыңғай, йә кире сифаттары асылыуынан аптырашҡа ҡалам. Күп аралашҡан таныш-белеш, дуҫтар ғына түгел, туғандарыңдың холоҡ-фиғеле лә төрлө-төрлө була, ҡайһы саҡта ошондай аңлашылмаусанлыҡ килешкеһеҙ ситуациялар тыуҙыра. Күп ярҙамыңды күрһәтеп, яуабына ниндәйҙер дәғүәләр ишетеү - рәнйетә. Һин төшөнкөлөккә биреләһең. Ҡыҙым Неля шундай бер рәнйешем хаҡында уртаҡлашҡас, былай тигәйне: " Беләһеңме, әсәй, кемдәндер изгелек күргән кеше был хаҡта онотмай ул. Кешенән күргән изгелек төпкө аңда һаҡлана. Әммә изгелекте ҡабул иткән кеше изгелек күрһәтеүсе алдындағы бурысын бер ваҡытта ла ҡайтара алмауын аңлауы сәбәпле, изгелек күрһәткән кешеһенә ҡарата агрессив ҡарашлы була башлай. Был уның, асылда, үҙ бурысынан үҙенең оялыуын танырға көсө етмәүгә бәйле". Бәй, ысынға оҡшаған бит бындай һығымта. Тимәк, кеше зиһене генә түгел, төптәге аңы аша ла идара ителә һәм шул төптәге аң ваҡыты-ваҡыты менән, моғайын, кешенең үҙ иркенән тыштыр ҙа әле, үҙенең барлығын, ябай төшөнсә түгеллеген белдереп-белдереп ҡуя. Күрәһең, кешенең йәмғиәт талаптарына яраҡлашҡан тышҡы тәртибенән былай, эске аңындағы булмышы - асылы, кешенең ысын сифаты булып сығалыр. Шуға ла бит, мейеһе томаланыу сәбәпле, эскән кешенең төпкө аңды контролдә тотоу һәләте юғалғандан-юғала бара һәм ул ысынында кемлеген йәшерә алмай башлай.

Мин оҙаҡ йылдар бер ҡатын менән дуҫ булдым. Уның хаҡында мәҡәләләр яҙҙым, ғаиләһенең, балаларының проблемаларын белә, ҡулымдан килгәнсә ярҙам итә инем. Ауыр сиргә тарығас (яман сиргә түгел), ҡайһы бер дуҫтарым күтәреп тигәндәй больницанан-больницаға йөрөттө. Ярҙам итте. Теге дуҫымдың шылтыратыуын көттөм. Үҙем шылтыратһам, хәлем хаҡында һөйләргә тура килер ҙә, ул мәшәҡәтләнер, ярҙамға ташланыр, тип йәлләп, тыйыла торҙом. Бер йыл үткәс, бер аҙ кеше була төшкәс кенә шылтыратып ебәрҙем. Күрешкем килеүен, уны һағыныуымды белдерҙем. Яуабы: "Ишеттем мин һинең ауырығаныңды, шылтыратмағас, аңлағанһыңдыр, сирле кеше янына барырға теләгем булманы..." Шаңҡып киттем. Бына һиңә утыҙ йыллыҡ әшнәлектең һөҙөмтәһе. Үҙемдең дуҫлығыбыҙ хаҡына ҡылған яҡшылыҡтарым, шулай була тороп та төп башына ултыртылыуым һәм асыҡ ауыҙлығым өсөн үҙемде йәлләү тойғоһо дуҫымдың ҡылыҡтарын барлағанда уның йыш осраҡта эгоист булыуын "иҫбатларға" тотондо. Улары барланып бөткәс, үҙ-үҙемдән "дуҫыма" адвокат эҙләргә тотондом. Уны тегеләй йә былай булырға этәреүсе сәбәпте табырға һәм дуҫымдың ҡылығын аҡларға кәрәк ине миңә. Оҙаҡ табылманы. Ә мин эске аңымда ҡаҙындым да ҡаҙындым: барҙыр, тап, булмауы мөмкин түгел. Эҙләгән кешегә табыла. Табылды. Эскесе иренән айырылып, икенсе кеше менән яңы тормош башлаған икән. Өр-яңы тормош. Етешлектә. Тимәк мин, уның оҙаҡ йылдар ниндәй шарттарҙа йәшәгәнен белеүсе шаһит, уның был тормошонда ҡүҙле бүкән буласаҡмын. Быны ғәфү итергә мөмкин...

## Рухиәтме, матдилыҡмы?

Кеше. Ай-һай ҡатмарлы йән эйәһе шулай ҙа. Уның булмышына ҡан хәтере лә, тарихи хәтер ҙә, милли үҙаң да, йәшәгән замана ла йоғонто яһай. Бәрелештәр, конфликттар тиктомалдан килеп сыҡмай шул. Һәр бер аңлашылмаусанлыҡтың үҙ сәбәбе бар. Алдараҡ телгә алынған һәм унан башҡа бик күп үҙенсәлектәр кешенән кеше формалаштыра, әммә форма үҙе, билдәһеҙ сәбәптәр арҡаһында (һәр хәлдә, мин аңлай алмаған сәбәптәр) донъяны, бүтән кешеләрҙе тик үҙенсә генә ҡабул итергә мәжбүр итә. Әммә мин шундай һығымтаға килдем: кеше кемгәләр яманлыҡ ҡылайым әле тип яман юлға баҫмай. Уны эске аңы, үҙенең хаҡлы булыуына инаныуы, ышаныуы теге йәки был юлға, һығымталарға, ҡарарға, аҙаҡ килеп ҡылыҡҡа этәрә шикелле ул.

Кешенең холҡона уның милли үҙаңы нык йоғонто яһай. Кеше әсә ҡарынында уҡ йә атаһының, йә әсәһенең генә ҡанын ҡабул итә икән. Беҙ йыш ҡына ҡайһы бер кешеләрҙе ҡан буталыуҙан тыуғаны өсөн бер төрлөрәк тип яңылышабыҙ. Баҡһаң, бер кешенең ҡаны икенсенеке менән аралашмай икән. Бала, ата-әсәһе бер милләттән булһа ла, ҡатнаш милләттеке булһа ла, тик уларҙың береһенең генә ҡанын алып, артабан йәшәүен дауам итә. Әйткәндәй, баланың холҡо ата-әсәнең икеһенә лә оҡшарға мөмкин, ә интеллект балаға тик Әсәнән (!) генә күсә, тип иҫбатлай генетиктар. Инә яткылығындағы 91 көнлөк балаға ҡан аша йән инә һәм Аллаһ тарафынан индерелгән шул йән буласаҡ кешенең раса энергетикаһын, милләтенең генетик энергетикаһын да бүләк итеп ала. Был иң тәүге Аллаһ бүләге кешене ғүмере буйы ташламай. Ғөмүмән, йән төшөнсәһенә әле булһа ғалимдар аныҡ ҡына аңлатма бирә алмай. Ислам дине йәндең барлығын инҡар итмәй, уның кеше был донъяны ҡалдырғандан һуң Хаҡ Тәғәләбеҙ ҡаршында яуап бирәсәген иҫкәртә, христиан дине лә йәндең барлығын инҡар итмәй, ләкин христиандар "спасение души" тигән төшөнсәгә нык инана. Кемдән һәм нимәнән ҡотҡарырға кәрәк һуң уны? Күрәһең, беҙҙең кеүек үк, гонаһтан ҡотҡарырға теләйҙәрҙер. Будда берҙән-бер Раббы барлығын танымай. Буддистар йән менән тәндең нирвана аша камиллашыуы, берҙәмлеккә өлгәшеүе өсөн тырыша. Шундай дәрәжәгә еткән Итигелов тигән бер ламаларын ергә күмелгән еренән ҡаҙып алғайнылар, ул хәҙер, тере кеше кеүек, уның хаҡына ҡоролған ҡорамда ултыра. Врачтар ҙа аптыраша. Был ни хәл? Ниндәй рухи көскә эйә булды икән ул Итигелов? Тимәк, рухи юғарылыҡҡа өлгәшеү юлдары күп. Ислам дине ҡушҡан ҡанундар, христиан диненең ҡағиҙәләре һәм башҡа дини конфессияларҙың күрһәтмәләре миф түгел. Тимәк, кешегә инаныс, ышаныстарҙан тыш йәшәргә ярамай.

Ләкин йәшәү дауамында кешенең матдимы, рухимы ҡиммәттәргә өҫтөнлөк бирә башлауы арҡаһында, уның яҙмышы, уға юғарынан йөкмәтелгән бурыстарҙан тайпылыуы ла ихтимал. Аллаһ бәндәгә матди ҡиммәттәрҙән тотош азат булыу талабын ҡуймай, әммә кеше 90 процент рухиәткә, 10 процент ҡына ғүмерен матдилыҡҡа йүнәлтергә тейеш, шул талаптарҙың дисбалансы шәхес-ара, ғаиләләр араһында, хатта илдәр араһындағы килешмәүсәнлеккә, конфликтҡа юлыҡтыра. Ләкин ғәжәп: меңәр йылдар кешегә хеҙмәт иткән дини тәғлимәттәр, кешелек тәжрибәһе, тарихи ҡыйралыштар ҙа кешене матди нәфсенән тыя алмай. Ә бит бәндә йәненең рухи камиллаштырыу маҡсатында ергә ебәрелә. Ни өсөн көслө был матдилыҡ инстинкты? Иленә, теленә, милләтенә, диненә, ата-әсәһенә тиклем хыянат итеүгә барып еткән, йәнен иблискә һатып булһа ла байлыҡ артынан ҡыуыусылар бар. Миңә аңлашылмай... Был хәлдәргә мин, нисек кенә гуманист булмайым, үҙ-үҙемдән адвокат таба алғаным юҡ әле.

Ҡан таҙалығы, милли хәтер тигәндән...

## Ҡан һәм нан

Кеше, кешенең килеп сығышы, булмышы хаҡында һуңғы йылдарҙа хәбәрҙәр, бәхәстәр йыш ҡуйыра. Берәүҙәр кешене Раббыбыҙ барлыҡҡа килтергән, ирҙәрҙе балсыҡтан әүәләп, усаҡта ҡыҙҙырған (кирбес ҡыҙҙырған кеүек микән?), шуға ҡайһы берәүҙәр ҡарараҡ, икенселәр аҡһылыраҡ килеп сыҡҡан, тип тә ебәрә. Шул балсыҡ кешеләргә Раббы йән өргән, уларға күңелһеҙ була башлағас, йоҡлатып, ҡабырғаһын һурып алған да ҡатын-ҡыҙ ижад иткән (хәҙерге клон ысулымы?), ти. Икенселәр, юҡсы, Раббы беҙҙе "сотворил себе подобными" , тигән фекерҙә. Ә нишләп, улайһа, славян расалы, негр расалы, бүтән төрлө расалар бар һәм беҙ төҫкә бер-беребеҙгә нык-нык оҡшамағанбыҙ? Әлбиттә, Аллаһ беҙгә, төрлө төҫтәге кешеләрҙең һәммәһенә, тигеҙ ҡарай һәм тигеҙ хоҡуҡтар биргән.

Бәғзеләр ер йөҙөндә әлеге көндә йәшәгән кешеләр бишенсе раса, уларҙы Раббыбыҙ славян һәм арийҙар сүрәтендә, әҙер көйө икенсе планетанан килтереп төшөргән, улар парлы-парлы булған, үрсеп китеп халыҡ барлыҡҡа килтергән, тип иҫбатлай. Был ике раса кешеләре бер-береһе менән дә ҡатнашып киткән, шундай берҙәмлектән милләттәр яралған, ти был теория яҡлылыр. Әйткәндәй, яңыраҡ генетиктар рустарҙың, бығаса ҡабул ителгәнсә, славян түгеллеген, финуғыр сығышлы булыуын асыҡланы (Ҡанды генетик яҡтан тикшереү ысулы менән). Беҙ, башҡорттар, арий сығышлы һәм бик аҙ ғына үҙгәреш кисергән бик боронғо халыҡ икәнбеҙ.

Ҡайһы бер тикшеренеүселәр, изотериктар Блаватская, Рерих, мәҫәлән, кешелек тәүҙә бөгөнгө кеүек ҡаты матдәнән тормаған, үтә күренмәле шыйыҡсамы, шуға оҡшашмы матдә сүрәтендә булған, тәбиғи шарттар үҙгәреүгә яраҡлаша-яраҡлаша бөгөнгө хәленә килеп еткән, ти. Миңә теория һәм фараздарҙың бөтәһе лә оҡшай. Булыуы ихтимал. Минең өсөн кешенең беҙ йәшәгән ерҙә нисек барлыҡҡа килеүе түгел, ә ниндәй маҡсат менән Мәңгелеккә китеп барыуы ҡыҙығыраҡ. Бигерәк тә теге 10/90 процент рухиәтлек менән матдилыҡ талабы ауыр һәм изге ниәт бит. Тимәк, беҙҙе Бар Ҡылыусы өсөн был мөһим. Тимәк, кеше үҙе, уның йәне дөйөм Ғаләмдең именлеге, мәңгелек әйләнеше эсендәге ябай шөрөп түгел. Уға үтә ҙур бурыс йөкмәтелгән һәм өмөт бағлана. Тимәк, ара-тирә булып торған тәбиғәт һәләкәттәрендә кешелектең дә ғәйебе етерлек. Кешеләрҙең ер өҫтөндә йәшәгәндә үк ҡылған ҡылыҡтары арҡаһында барлыҡҡа килгән һәм ерҙән үткәндән һуң күккә олғашҡан йәндәренең камиллыҡҡа өлгәшә алмағандары һәм өлгәшкәндәренең дөйөм Ғаләм әйләнешенә барып тоташыуҙан яралған яҡшылыҡ менән яуызлыҡ дисбалансы этәрә түгелме бындай ҡыйралыштарға?..

Әммә һуңғы арала мин кеше тамырҙарындағы ҡандың ни саҡлым юғары субстанция булыуына ышанғандан-ышана барам. Кеше ҡанының төрлө-төрлө булыуы йөҙ йыл самаһы элек Австрия ғалимы Карл Ландштейнер тарафынан өйрәнелеп асыҡлана. Ғалим һәр кемдең ҡанында бүтән кешенеке менән ҡатнашырға теләмәгән антиген булыуын иҫбатлай.Теге йәки был төркөмгә ҡараған ҡанлы кешеләрҙең холҡо ла, йәшәү рәүеше лә үҙенсәлекле икәнен асыҡлай.

Ҡан инфекцияларға, вирустарға, микробтарға, бактерияларға ҡаршы көрәшеү һәләтенә эйә. Был һәләт меңәр йылдар буйы формалашҡан һәм йәшәп килгән шарттарға яраҡлаша ала икән.

Ғалимдар неандерталдәр менән кромоньондарҙың (Германияның Неандерталь үҙәне исеменән. 20-35 мең йыл тирәһе элек йәшәгән был цивилизация ҡалдыҡтары Европала ла, Африка һәм Азияла ла табыла. Беҙ улар тоҡомонан) ҡаны беренсе ҡан төркөмөнә ҡарай, тип бара. Уларҙың ашҡаҙан-эсәк системаһы ит ризыҡтары аҡһымын үҙләштереүгә көйләнгән булған. Һыйыр, һарыҡ ите ашағандар. Вариҫтары, бөгөнгө беренсе төркөмлө ҡанлы кешеләр, әле лә матдәләр әйләнеше яҡшы эшләһен өсөн, күберәк аҡһымлы аҙыҡ менән туҡланырға мәжбүр. Был төркөм кешеләре өсөн бөртөклөләрҙән әҙерләнгән ризыҡ килешмәй, генетик яҡтан тәбиғәттәре был төр ризыҡҡа көйләнмәгән. Бөртөклөләр составындағы лектин матдәләр ризыҡты үҙләштереүгә ҡамасаулай. Тимәк, кеше һимерә башлай. Был төр кешеләр ҡамыр аштарынан, ярма,

*✓ Беҙҙең илгә көслө инженерҙар, менеджерҙар, иҡтисадсылар күберәк кәрәк. Тик юғары уҡыу йорттарын ҡоро диплом менән тамамлаусылар түгел, ә "белем багажы" менән тамамлаусыларға ҡытлыҡ кисерәбеҙ.*



борсаҡтан баш тартырға тейеш. Ә бына ит, балыҡты күпме теләһәң, шул саҡлым ҡулланырға мөмкин. Картуф, баклажан ашау артрит ауырыуына тарыта. Ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та: минең йәштәштәрем, һуғыштан һуңғы йылдарҙа, асылда, картуф, икмәк ашап үҫкән, шул ризыҡтар арҡаһында юғары белем алыуға өлгәшкәндәр араһында көүҙәһе ҡалынаймаған, аяҡ-ҡулдары һыҙламағандар һирәк. Врачтар беҙгә кишер, кәбеҫтә ашарға ҡуша, сиребеҙҙә үҙебеҙҙе гәйепләй. Башҡорттар, боронғо милләт, күбеһенең ҡаны - беренсе группа. Беҙ кәбеҫтә менән кишер генә ашап йәшәй алмайбыҙ шул... Улай тиһәң, щи, борщтарға өҫтөнлөк биреүсе урыҫтар араһында ла 100 йәшкә етеүселәр һирәк.

Икенсе ҡан төркөмөнә ҡараған ҡанлы кешеләрҙе генетиктар беҙҙең эраға тиклемге 25-15 мең йылдарҙа формалашҡан йәшерәк халыҡ тип иҫәпләй. Уларҙың организмы үҫентеләр менән туҡланыуға көйләнгән. Улар, киреһенсә, ит ашауҙан һимерә. Улар өсөн һыйыр, һарыҡ ите түгел, тауыҡ, күркә ите ҡулайлыраҡ. Колбаса ла уларҙың аҙығы түгел. Һөт ризыҡтары - ағыу менән бер. Уның ҡарауы, йәшелсә-емеште теләһә күпме ҡуллана бирһендәр!

Тамырҙарында өсөнсө төркөмгә ҡараған ҡан ағыусылар - күскенсе азиаттар. Улар халыҡ булараҡ, беҙҙең эраға тиклемге 15-10 мең йылдар элек формалашҡан икән. Улар өсөн бойҙай - табу. Ә бына дөгө, арпа, һолоно улар еңел үҙләштерә. Һөт, йәшелсә менән туҡланыу ҙа файҙалы. Ит аҙыҡтары уларҙы көсһөҙләндерә, иммун системаһына зыян килтерә. Тауыҡ итенән дә баш тартыу зарур. Тауыҡ итен ҡулланыу инфарктҡа тиклем еткереүе ихтимал. Емеш-еләккә көс төшөрөргә тура килә. Хөрмә менән гранаттан ғына баш тартырға кәрәк.

Дүртенсе төркөмгә ҡараған кешеләр 1000 йыл элек кенә айырым халыҡ булып формалашҡан икән. Йәш әле улар. Ундай кешеләр беҙҙең арала күп түгел. Ер шарындағы кешеләрҙең 5 проценттын ғына тәшкил итә.

Генетиктар хәҙер, ҡан төркөмөнә ҡарап, шәхестең холоҡ-фиғелен дә, психик темпераментын да билдәләй ала. Әйтәйәр бит, Японияла хәҙер эшкә алғанда, ғаилә ҡорғанда кешенең ҡан төркөмөнә ныҡ иғтибар итәләр икән. Япон гәзиттәрендә "шундай-шундай ҡан төркөмөнә ҡараған кешене урта звено етәксеһе итеп эшкә саҡырабыҙ", "фәлән төркөмгә ҡараған ҡанлы кеше менән етди енси мөнәсәбәткә инер инем", тигән иғландар бар, ти.

Ҡан хәтере, тимәк, таш хәтере кеүек, ваҡытҡа бирешмәй торған үтә даими субстанция икән дә! Йәнә шуныһы, кешелектең иң мөҡәддәс хыялдарының береһе, уны мөхәббәтме, түләүле сәләмәтлекме аша аҙләгән, айышын төшөнгәнө килгән Мәңгелек тәшенсәһе, миненсә, беҙҙең һәм беҙҙән һуң киләсәк быуындарға ҡүскән, һәм ҡан тип аталған субстанцияға бәйле. Бөтә нәмә үтә, серей, ә ҡан... ул быуаттар, мең йыллыҡтар буйы, быуындан-быуынға күсеп аға ла аға... Үҙенә тарта, туғанлыҡ хистәрен, милләт үҙенсәлектәре һәм ҡиммәттәрен онотторлмай. Тулҡынландыра мине был хәл. Бигерәк тә ейәнем Искәндәргә ҡарағанда...

**(Дауамы бар).**

АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО

# ТЕЛДЕ БЕЛМӘГӘС НИ...

**Юғары уҡыу йорттарының береһендә башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытам: башланғыс төркөмдәрҙә телде белмәү, өндәрҙе-хәрефтәрҙе бутау, һөйләмдәрҙе дөрөҫ төҙөмәүгә бәйле ҡыҙыҡтар осрап ҡына тора. Ошоға бәйле ҡайһы бер мәҙәктәрҙе гәзит уҡыусылар иғтибарына тәҡдим итәм.**

## "Ҡуңыр буғам, һәү,һәү!"

Шулай итеп, математика һәм ғәмәли информатика бүлегендә башҡорт теле дәресе бара. Сессия алды. Семестр буйына йыйылып киткән "ҡойроҡ"тарҙы - өйгә эштәрҙе тапшырыу ваҡыты. Бөтәһе лә ҡабалана, бөтәһенә лә яуап биреп өлгөрөргә, зачет-имтихандарға инеү өсөн рөхсәт алырға кәрәк.

Костюм-салбарҙан, бик ыҫпай кейенгән, шартына килтереп галстугын да таҡҡан бер студентым етди ҡиәфәттә башҡорт халҡының боронғо эпик ҡомарҡтарының береһе, уларға бәйле башҡорт халыҡ йырҙары тураһында сығыш яһай. Аудитория шым ҡалып, етди төҫ менән тыңлай.

Студентым ҡабалана-ҡарһалана "Ҡуңыр буға" тураһында һөйләүгә күсте, математик теүәллек менән һәр фекерен миҫалдар менән нығыта ла бара. Ҡабаланыу касафатылыр инде, студентым:

- Ҡуңыр буғ..м, һәү,һәү...- тип көйләп ебәрмәһенме бер ваҡыт! Минең:

- Илфат, кемде, нимәне саҡыраһығыҙ шул? - тигән һорауымдан һуң ғына аңланы ул хәрефтәрҙе бутауын.

## "Матурҙың антонимы - блондинка!"

Физик тәрбиә биреү һәм спорт йүнәлешендә белем алыусылар төркөмөндәге дәрестә синоним, антонимдар тураһында һөйләшәбеҙ. Мин әйткән һүҙҙәргә төркөм антонимдар әҙләй:

- Алыҫ?
- Яҡын!
- Иртә?
- Кис!
- Матур?
- Блондинка!

Мине аптырашта ҡалдырған был яуапты аңлатыуҙарын һорайым:

- Һуң, уҡырға инеү менән ауыл ҡыҙҙарының толом-толом матур сәстәрен бөҙрәханаларҙа мөнтәтеп, ҡап-ҡара ҡаштарына бер ҙә тап килмәгән сей һары төҫкә буяуҙары матур күренешме? Юҡ! Шулай булғас, матурҙың антонимы була инде! - тип аңлатты белермәндәр.

Ә минең былдай "нигеҙле дәлил" менән килешмәйсә сарам ҡалманы.

## "Имергә мөмкинме?"

Ғәҙәттә, минең дәрестәргә берәү ҙә һуңламай. Бының сере япябай: башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнгән башланғыс төркөмдәрҙә һуңлап ингән студенттар "ҡаты һынау" тота - ҡайҙа булыуы, нимәгә һуңлауы тураһында башҡортса һүҙләкһеҙ яуап бирергә, һауа торошо тураһында, төркөмө һ.б. тураһында һөйләргә тейеш була.

Шулай бер төркөмдә бер студентым һуңланы бит. "Йола" буйынса иң тәүҙә ул инергә рөхсәт һорарға тейеш, тик бына бәлә - "пароль" онотолған! Был хәҙер илпәп кенә иптәштәренән һорай, йәнәһе, нимә тип әйтергә кәрәк әле ул? Тегеләре бар хәлдәренсә ым-ишаралар аша булһа ла "инергә мөмкинме"не аңлатып маташа. Тырыша-тырмаша торғас, ишетте шикелле аудитория ярҙамын - был минә туп-тура ҡарап, шундай тантаналы ҡыйыу тауыш менән:

- Гөлкәй Хәйҙәр ҡыҙы, имергә мөмкинме? - тип һалмаһынмы!

Ултыра төшә яҙҙым. Хәҙер килеп мин ни тип яуап бирергә белмәй аптырандым.

Әлбиттә, һүҙлек ярҙамында һөйләм тәржемә ителде, буталған хәрефтәр урынына ҡуйылды. Был төркөмдә башҡа яңылышыусы булманы.

## "Мине ҡайтарығыҙ, бөгөн мин ауырлымын"

Юриспруденция бүлеге студенттары араһында таралған был лаҡап. Ә тарихы уның былай: дәрестә үҙен насар тойған бер студент уҡытыусынан рөхсәт алып ҡайтыр өсөн телде яҡшыраҡ белгән дуҫтарынан ярҙам һорай. Тегеләре шуҡ булып сыға, "ауырыйым" һүҙе урынына "ауырлымын" һүҙен өйрәтә. Был ике һүҙҙең айырмаһын аңламаған студентым тора ла минән:

- Зинһар, мине ҡайтарығыҙ, бөгөн мин ауырлымын, - тип һорай.

## "Русса белмәһәң дә ҡыйын шул"

Башҡорт телен туған тел булараҡ өйрәнеүсе төркөмдәрҙә студенттарҙың телмәр мәҙәниәтен үҫтереүгә, үҙ фекерҙәрен матур, аныҡ итеп аңлата алыу күнекмәләрен нығытыуға күберәк иғтибар бирелә. Бының өсөн тәү сиратта уҡытыусының телмәре өлгө булырға тейеш. Шуға күрә дәрестәрҙә сит телдәрҙән һүҙҙәр ҡулланмайынса, саф башҡортса һөйләшеп, телмәрҙә һүрәтләү сараларын ҡулланып, фекерҙәрҙе мәҡәл-әйтемдәр менән нығытып барырға тырышам. Ул ваҡытта студенттарҙан да быны талап итеү нигеҙле була.

Шулай бер төркөмдә тәнәфес мәлендә студенттарым мине "йәлләп" ултыра:

-Был Хәйҙәровнаға русса белмәгәс, ҡыйындыр инде, ибет? Магазинға барһа ла беҙҙең өләсәйҙәр кеүек нәмәне төртөп күрһәтеп кенә һорайҙыр инде...

**Гөлкәй СӘМЕРХАНОВА.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ЙӘШТӘРЕБЕҘ...

## белемле булһын

**Юлай ПСӘНЧИН, филология фәндәре докторы, Өфө дәүләт иктисад һәм сервис университетының сит ил төбәктәрен өйрәнеү кафедраһы профессоры:** Бер яҡтан, был һорау ябай һымаҡ, икенсе яҡтан, ҡатмарлы. Иң тәүҙә шуның менән килешәм - заман да, ысынлап та, ҡатмарлы ғына. Ә кем ғәйепле быға? Дәүләтме, серле халыҡ-ара ойошма вәкилдәреме, яҙмышмы? Миненсә, заманыбыҙ өсөн беҙ үҙебеҙ генә яуаплы. Бәлки, ғәйеплебеҙҙер ҙә... Һуңғы 20 йыл эсендә республикабыҙҙа, Рәсәйҙә барған билдәле хәлдәрҙән һуң беҙ (башҡорт халҡы) биреште - берҙәмлегебеҙҙе, суверенитетыбыҙҙы, Рәсәйҙә тотҡан урыныбыҙҙы юғалттыҡ һымаҡ. Һәм был - әлеге көндә иң төп проблемаларыбыҙҙың береһе. Бөгөн республикабыҙға һәм халҡыбыҙға хас сәйәси, ижтимағи институттарыбыҙҙы ла һүлпәнәйтеп, ҡулыбыҙҙан ысҡындырып барабыҙ. Тарҡаулыҡтанмы был, әллә үҙ мәнфәғәттәребеҙҙе яҡларлыҡ һүҙ әйтә, эш эшләй алмауыбыҙҙанмы? Бөгөнгө көндә ҡурҡмайынса ла йәшәп була икәнлекте аңларға ваҡыт. Ә кем бер ниҙән дә ҡурҡмай? Әлбиттә, йә иҫәр, йә, киреһенсә, белемле, мәғлүмәтле, аҡыллы кеше. Билдәнеҙ ситуацияға тарыһаҡ, уйҙарыбыҙҙа төрлө алама сценарийҙар төҙөй, ҡурҡа башлайбыҙ. Был - кешенең үҙен-үҙе һаҡлау инстинктылыр, моғайын. Шулай ҙа, белемле кеше батырыраҡ та, тәүәккәлерәк тә була, баҙап ҡалмай. Тап шуға ла халҡыбыҙ өсөн билдәһеҙ, ҡатмарлы заманда балаларыбыҙға, йәштәребеҙгә белем бирергә ынтылырға кәрәк.

Һуңғы өс йылда уҡытыусыларҙың, тәрбиәселәрҙең билдәһеҙлектә, ниҙер көтөп, эшенән ҡалыуҙан ҡурҡып йәшәүе тураһында ла әйтеп китмәй булмай. Уҡытыусыларҙың нервыларын да, абруйын да һаҡларға кәрәк. Уҡытыусының абруйын күтәреү - дәүләттең дә абруйын күтәреү ул. Сөнки юғары технологиялар менән эш итеүсе белгесте лә, дәүләтте бар донъяға танытыр сәнғәт әһелен дә - бөтәһен дә уҡытыусы тәрбиәләй. Оптималләштереү, яңыртыу кеүек кампанияларҙы тормошҡа ашырған сакта беҙҙең түрәләр халыҡ менән бер ҡатарҙа торһон, халыҡ мәнфәғәтәренән сығып эш итһен ине. Был хәлдең беҙҙең илдә лә булыуы мөмкиндер бит?..

Белемле, аҡыллы йәштәр темаһына әйләнеп ҡайтҡанда, тағы ла шуны әйтке килә: беҙҙең илгә көслө инженерҙар, көрсөк мәлен иҫәпкә алып әҙерләнгән менеджерҙар, иҡтисадсылар күберәк кәрәк. Тик юғары уҡыу йорттарын ҡоро диплом менән тамамлаусылар түгел, ә "белем багажы" менән тамамлаусыларға ҡытлыҡ кисерәбеҙ. Ҡайһы тарафтарҙа уҡыу яҡшыраҡ, ҡайҙа белемде сифатлыраҡ бирәләр, тиһәгеҙ, бар ерҙә лә мөмкинлектәр бер төрлө. Тик ситтә уҡыһаң, аралашыу тәжрибәһе генә күберәк була. Юҡҡа ғына аралаша белеүҙе уңышҡа илткән бер баҫҡыс, тимәйҙәрҙер. Тимәк, йәштәрҙе Мәскәү, Санкт-Петербург кеүек эре ҡалаларҙан тыш, сит илдәргә уҡытырға ебәреү ҙә яҡшыға. Тик йәш кешене ситкә ебәргән сакта "Республикаға кире ҡайтһаң ғына", тигән ҡәтғи шартты еткерергә һәм ваҡыты еткәс, шарттың үтәлешен контролдә тоторға кәрәк.

**Илгизәр БУЛАТОВ яҙып алды.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ИКЕ ТЕЛ БЕЛЕҮ...

## хәтерҙе һаҡлай

■ Бетесда университеты (АҠШ) ғалимдары ҡаһүәне төшкә тиклем эсергә кәрәк, тип иҫәпләй. Аныҡыраҡ әйткәндә, иртәнге унынсы яртынан ун икенсе яртыға тиклем кофеин кеше организмының эске сәғәттәре өсөн яуап биреүсе кортизол менән яҡшыраҡ бәйләнешкә инә. Кортизол гормоны күләме уянғас та күтәрелә һәм яйлап кәмей башлай. Тап ошо ваҡытта уға көслө "заряд" кәрәк. Әгәр ҙә ҡаһүәне ошо мәлдән иртәрәк, организмда кортизол тупланып өлгөрмәҫ борон эсһәгеҙ, кофеин һеҙгә бер нисек тә тәьҫир итмәйәсәк, ти белгестәр. Бына шуның өсөн дә ҡайһы берәүҙәр иртән уяныр өсөн ике сынаяҡ ҡаһүә эсергә мәжбүр. Кофеинды дарыу кеүек үҙ ваҡытында ҡулланыу ғына яҡшы һөҙөмтә бирә.

■ Вейцман институты (Израиль) белгестәре белдереүенсә, ҡатын-ҡыҙҙың түлһеҙлеге организмда витаминдарҙың артыҡ булыуы менән бәйле була ала. NAC һәм BHA антиоксидантларының юғары дозаларын ҡабул иткән лаборатор ҡомаҡтарҙа үткәрелгән һынауҙар күрһәтеүенсә, витаминдарҙың артыҡ булыуы түллек бизенең эшмәкәрлеген түбәнәйтә. Антиоксиданттарға Е, С витаминдары, каротиноидтар, флавоноидтар инә.

■ Һиндостан ғалимдары ике телдә иркен һөйләшеүселәр ҡартайыу һөҙөмтәһендә хәтер насарайыуы кеүек сирҙәргә бирешеп бармай, тип белдерә. Доктор Суварна Аллади әйтеүенсә, бер нисә телде ҡулланыу баш мейеһенең иғтибар һәм башҡарыу функциялары менән бәйле өлөштәрен үҫтерә. Ғалимдар 66 йәште уткән 648 кешенең ауырыу тарихын тикшергән, уларҙың 391-е ике йәки унан да күберәк телдә аралашҡан. 240 кешелә Альцгеймер ауырыуы осрағы, 189 кешелә баш мейеһе ҡан тамырҙарының эшмәкәрлеге боҙолоу сәбәпле аҡыл еңеләйеү, 116 кешелә ҡартая төшкәс башлана торған психик ауырыу теркәлгән. Ҡалғандар баш мейеһе атрофияһы һөҙөмтәһендә енелсә сирҙәр менән яфаланған. Ғалимдар раҫлауынса, тәүге өс ауырыу ике телдә һөйләшеүселәрҙә күпкә һуңыраҡ башланған. Бында кешенең белем кимәле, енесе, эшмәкәрлеге, ҡайҙа йәшәүе мөһим түгел, улар уны ҡартлыҡ сирҙәренән ҡотҡармай икән.

■ Һауаның бысраныуы кеше сәләмәтлеге өсөн хәүефлерәк әйләнә бара. Бигерәк тә 2,5 микрондан ҙур булмаған аэрозоль өлөшсәләр ҡурҡыныс, ти ғалимдар. Был өлөшсәләрҙе һауаға башлыса ҡаҙылма яғыулыҡтар ҡулланып эшләүсе сәнәғәт, энергетика, транспорт бүлеп сығара. Кешенең бер бөртөк сәсенең ҡалынлығынан 30 тапҡырға бәләкәйерәк булған был өлөшсәләр үлем осраҡтарының күбәйеүенә килтерә. Лондондың Гигиена мәктәбе докторы Кэтрин Тонн билдәләүенсә, бөтөн Европала яңы эшкәртеү ҡоролмалары ҡулланыу һөҙөмтәһендә һауаны бысратыусы матдәләрҙең кимәле күтәрелә. Шуға ла һуңғы йылдарҙа Көнсығыш Европа халҡы араһында инфаркт һәм инсульттан үлеүселәрҙең һаны 20 процентҡа артҡан. Белгестәр фекеренсә, экологик яҡтан таҙа төбәктәрҙә йәшәүселәр йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренә дусар булмай.

ВӘҒӘЗ

**Башҡортостан мосолмандары Диниә назараты мөфтөйө Нурмөхәммәт хәҙрәт Ниғмәтуллин менән аралашҡандар уның шул ҡәҙәрем ихлас, ябай, урыны менән мәрәкәсел әңгәмәсе икәнлеген һиҙмәй ҡалмайҙыр. Хәҙрәт бер ваҡытта ла кешенең йөҙөнән алмай, тәнҡитләмәй, эттән алып, эткә һалып һүкмәй. Хатта ки ниндәйҙер гәйебе бар кеше үҙенең ҡаршыһында ултырған тәҡдирҙә лә бары тик үҙенә генә хас кинәйә һәм ишара менән тәрбиәүи эшен алып бара. Оло менән оло, кесе менән кесе була белә хәҙрәт. Былар барыһы ла уның халҡыбыҙ аҡылын үҙенә туплаған ғилем эйәһе булғанлығы хаҡында һөйләй. Һеҙҙең иғтибарға мөфтөй Нурмөхәммәт хәҙрәт Ниғмәтуллиндың вәғәздәрен тәҡдим итәбеҙ.**



# ТӘҮГЕ БЫУЫН - ДИНҺЕҘ...

## икенсеһе - телһеҙ

### Фән икегә бүленмәй

Беҙҙә фәнде ике өлөшкә бүлеп ҡарайҙар. Йәнәһе, донъяуи фәндәр һәм дини ғилем, гуманитар фәндәр һәм теүәл фәндәр. Әммә фән ике өлөшкә бүленмәй. Барлыҡ ғилем Аллаһы Тәғәләнең ҡөҙрәтенән килә. Ниндәйҙер фән өлкәһендә ғилми асыш яһаусы ғалим быға Аллаһы Тәғәләнән тыш өлгәштем, ти икән, ул төптә яңылыша. Әйтәйек, мосолмандың ни өсөн бөтә фәндәрҙе лә, шул иҫәптән иң беренсе нәүбәттә география фәнен белеүе мотлаҡ? Сөнки мосолман ҡайҙа ғына бармаһын, шундуҡ ҡибланы эҙләй башлай. Сөнки уға Ҡәғбәгә йөҙ менән баҫып, намаҙ уҡырға кәрәк.

Фән кәрәгенән артыҡ ҡатмарланырылһа, ул да насар. Хәҙерге балаларға мәктәп программаһын үҙләштереүе бик ауыр. Балаларыбыҙға дәресен әҙерләшергә ярҙам итергә теләп, уҡытыусы биргән өйгә эш күнегеүенә күҙ һалһаҡ, тәндәребеҙ семерҙәп китә. Беҙ уларға бирелгән мәсьәләне сисеү түгел, хатта ундағы теорияларҙы, теоремаларҙы аңлай ҙа алмайбыҙ. Беҙ уҡыған ваҡытта барыһы ла ябай ғына һымаҡ ине һәм ул саҡта илебеҙ кешеләренең белем кимәле донъяла иң алдынғыһы һаналды. Тап шул йылдарҙа йыһанға ла осоҡ, һуҡалы илде атом кимәленә күтәрҙек. Ә хәҙерге уҡыу программаларына килгәндә, был махсус рәүештә эшләнгәнгә оҡшаған. Балалар баштан уҡ уҡыу программаһының ауырлығын тойоп, фәндән, ғилемдән баш тарта. "Балаға аҡылы еткән миҡдарҙа ғына һүҙ һөйләгеҙ", тип әйткән Бәйғәмбәребеҙ.

Миненсә, барлыҡ бәләләрҙең башы, әйткәнебеҙсә, фәнде икегә бүлеп ҡарауҙан килә. Фән икегә бүленгәс, иң тәүҙә кешеләр ике төркөмгә ойоша һәм һәр ҡайһыһы үҙенең идеологияһын барлыҡҡа килтереп, донъяла хакимлыҡ өсөн көрәш башлай. Хәҙер балаларға уҡыу программаларының үтә ҡатмарландырып бирелеүе лә ошо бер-береһенә ҡапма-ҡаршы көстәрҙең дәғүәләшеүе һөҙөмтәһе бит. Хәҙер һәр яҡ үҙенең хаҡлы икәнлеген иҫбатларға тырышып, төрлө ялған юлдар аша үҙе төҙөгән программаны тормошҡа ашырырға ынтыла. Һөҙөмтәлә был хәлдән балаларыбыҙ зыян күрә. Ҡорһәндә барлыҡ фәндәрҙең дә нигеҙҙәре һалынған. Әгәр ҙә кешелек ошо бөйөк ғилем сығанағын өйрәнеп, аңлы рәүештә эшмәкәрлек итһә, фәндең икегә бүленеүенә юл ҡуйылмаҫ ине.

Беҙҙең милләттә аҡыллы, төрлө ғилемгә эйә булған кешеләр күп. Әммә уларҙың күбеһе белгәне менән уртаҡлашырға ашыҡмай, йәнәһе, аҡылын ситкә сығарып әрәм итмәй. Элегерәк киреһенсә ине. Хатта йорт төҙөгәндә лә барлыҡ ауыл менән өмәгә сығып, күмәкләшеп көнәшләшеп эшләрҙәр, йәштәр бүрәнә күтәрер, ҡарттар аҫтан өйрәтеп әйтеп торор ине. Һәр бер нәмә биреү менән кәмей, мәгәр ғилем генә арта. Йәғни белгән кеше ғилеме менән уртаҡлашһа, шунан ғилемле ике кеше була. Һөҙөмтәлә ғилем арта, бәрәкәтле була. Барлыҡ ғилемде лә бер кеше йыйып бөтәрә алмай. Шуға күрә белгәнендә башҡалар менән уртаҡлашҡан, бүлешкән осраҡта ғына кеше үҫешә ала. Ат алһаң, ауыл менән һөйләшеп-кәнәшләшеп ал, тип юҡҡа ғына әйтмәгәндәрҙер.

### Әсәһенән һорағыҙ...

Ҡайһы бер яҡта, бигерәк тә минең тыуып-үҫкән Баймаҡ төбәгендә, мәрхүмдең йыназаһында, өсөн, етеһен, ҡырҡын, йыллығын уҡытҡанда доғаның кемгә бағышланыуын белдергәндә, әсәһенең исемен әйтәләр. Әйтәйек, "Бибисара ҡыҙы Фатима". Дин тарихында Ғайса бәйғәмбәр хаҡында һүҙ барғанда ла һәр ваҡыт "Мәрйәм улы Ғайса" тип әйтелгән. Был һис тә юҡҡа түгел. Сөнки мәрхүмдең атаһының исемен әйткән осраҡта, әгәр ҙә уның атаһының бөтөнләй башҡа кеше булып, эруахына уҡылған доғаның да яҙа китеү ихтималлығы бар бит. Ошолай хәл булмаһын өсөн мәрхүмдең әсәһенең исемен әйтеп аят бағышлау дөрөҫтөр, мөғайын.

Беҙҙең яҡта булған бер хәл. Аталыуллы икәү ҡайҙалыр сит ауылда йөрөп ятһалар, был икәүҙең өлкәнен, егеттең атаһын таныусылар тегенән:

-Был һинең улыңмы ул? - тип һорағандар.

-Әсәһенән һорағыҙ, - тип яуап биргән атай кеше, барыһын да аптыратып.

"Эйе, ул минең улым", тип ғорурланып әйтергә был атайға нимә ҡамасаулаған һуң? Бер ваҡытта ла алдашмаған кешенең яуабы булған уның "Әсәһенән һорағыҙ" тигән һүҙҙәре. Дөрөҫөрәге, ул улы хатта үҙенеке булмаған осраҡта ла, ошолай яуап ҡайтарып, үҙенең алдашыу ихтималлығын юҡҡа сығарған һәм гонаһҡа батмай ҡалған. Бик ғәҙел һәм дин юлындағы кеше булған ул.

Шуның кеүек, кемдең атаһы кем булыуы мәсьәләһе бик ҡатмарлы. Бында хаталар ебәрелеүе ихтимал. Ә әсәйҙәрҙе билдәләүгә килгәндә, хаталарға юл ҡуйылмайҙыр. Әгәр ҙә ир вафат булһа, ҡатынының кейәүгә сыҡмайынса, ун көн көтөргә тейеш булыуында ла етди сәбәп бар. Әгәр ҙә ҡатын иренән ауырлы көйө тол ҡалһа, балаһы тыуғас ҡына кейәүгә сыға ала. Әгәр ҙә ҡатын ирҙән айырылһа, өс күрем осоро үткәргәндән һуң ғына кейәүгә сыҡҡан. Был йолаларҙың барыһында ла, теге ирҙән бала ҡалмаһын, тигән шарт үтәлгән. Тағы ла сабый ике йәшкә тиклем сит әсәнең күкрәк һөтөн имһә, ул имсәк-әсәйгә әүерелгән һәм ул әсәнең үҙ балалары менән уның һөтөн имгән бала араһында никахҡа юл ҡуйылмаған.

### Телһеҙлек ҡайҙан килә?

Бер уҡытыусы ҙур ғына урында эшләгән етәксегә улының насар уҡыуы, үҙен мәктәптә насар тотоуы тураһында әйткән. Атай кеше өйөнә ҡайтып, улын туҙҙырып әрләп ташлаған, уға аҡыл сыбығы менән ярған тиһегеҙме? Ә бит бындай осраҡта атай кешенән тик ошондай сараны ғына көтөргә була ине. Юҡ, әлеге атай ҡайтҡас та улына бер ни ҙә өндәшмәгән, тик уны таңдан уятҡан да:

-Улым, мин бөгөн эшкә бармаҫҡа булдым. Тик өйҙә генә ултырып, ҡағыҙ эштәрем менән генә булышам. Хәҙер минең эш машинам менән урынбаҫарым киләсәк. Ҡыҫҡаһы, эш машинам, водителем менән урынбаҫарым бөгөн көнө буйына тулыһынса һинең ҡарамаҡта. Барыһы ла үҙ иркеңдә: водителем һине ҡайҙа теләһәң, шунда алып барыр, ярҙамсым һораған бер йомошоңдо үтәр, ярҙам итер. Бөгөнгә мәктәбеңә бармаһаң да була, уҡытыусыңа үҙем шылтыратып, барыһын да көйләрмен. Тик кискә өйгә ҡайтырға ғына онотма. Бына һиңә һәр төрлө сығымдарыңды ҡапларға аҡса. Тик, үҙең беләһең, спиртлы эсемлектәр эсергә, тәмәке тартырға ярамай, - тип атай кеше улына аҡса ла сығарып тотторған.

Башҡа ваҡытта талапсан һәм ҡаты ҡуллы атаһының көтөлмәгән йомартлығына аптырауҙан күҙе аҡайған малай атҡа атланғандай ҡыуанып, үрле-ҡырлы һикерергә тотонған. Атаһының эш машинаһына ултырып, янындағы ярҙамсыһы менән ҡала буйлап елдереп сығып та киткән. Малай көнө буйына йәне теләгән һәр төрлө тәмләнән ауыҙ итеп, төрлө күңел асыу аттракциондарында уйнап, кинотеатрҙарҙа ҡыҙыҡлы яңы фильмдар ҡарап, иркенлеккә, муллыҡҡа, комфортҡа һыуһындары ҡанып, арып-талып, атаһы әйткән киске ваҡытҡа өйөнә ҡайтып еткән.

-Улым, үҙеңдең эш машинаң булыуы, йәнең теләгән урынына ултырып ҡына барыуы яҡшымы? - булған атаһының тәүге һорауы.

-Яҡшының да ниндәйе әле ул! - тип яуап биргән көндәҙгә сәйәхәтенән һаман да тәьҫирләнгән малай.

-Ә янында үҙеңде ярты һүҙҙән аңлаған ярҙамсыңдың һәр теләгеңде үтәргә әҙер тороуы яҡшымы? - булған атаһының икенсе һорауы.

-Һис һүҙһеҙ, яҡшы, атай. Ағай мине ҡайҙа ғына алып барманы ла, нимәләр генә күрһәтмәне, циркҡа ғына барып өлгөрмәнек, - тигән малай.

-Бына нимә, улым, әгәр ҙә эш машинаң, һәр йомошоңда мотлаҡ үтәрлек урынбаҫарың булһын тиһәң, һиңә мәк-

*✓ Әхмәтзәки Вәлиди туған үҙенең "Башҡорт халҡына хушлашыу хаты"нда шундай фекер әйткән:"... Дин һәм телебеҙҙе һаҡлауға көс сарыф итегеҙ. Иң әшәке йәберләүҙәр ошо ике нигеҙҙә, йәғни дин һәм милли тел өлкәһендә эшләнәсәк..."*

тәптә тырышып уҡырға тура киләсәк. Әгәр ҙә уҡымаһаң, уҡытыусыларыңды тыңлашмай, тәртип боҙоп йөрөһәң, үҫеп еткәс, быларҙың береһе лә һиңә булмаясаҡ, - тип һүҙен тамамлаған атай кеше.

Малай, әлбиттә, ошонан һуң ҡырҡа үҙгәргән, тырышып уҡый башлаған. Ә уҡытыусылары өсөн атаһының улын тәрбиәләү ысулы сер булып ҡалған.

Бөгөн беҙ бер хәҡиҡәткә ныҡлап инана киләбеҙ. Тәрбиәнең ниндәй генә заманса, алдынғы формаһы булмаһын, әгәр ҙә ул дини принциптарға таянмаһа, дингә нигеҙләнмәһә, әхлаҡһыҙ, иманһыҙ кешене тәрбиәләүгә ҡайтып ҡала. Баланы әхлаҡлы, иманлы итеп тәрбиәләү өсөн иманһыҙлыҡ, әхлаҡһыҙлыҡ менән көрәшеү кәрәкмәй, бына ошо атай кеүек, яҡшылыҡҡа юлды күрһәтеп биреү күпкә отошло.

Икенсенән, бөгөн динһеҙ быуындың балалары телһеҙ булып үҫә. Баланды телле итеү өсөн туған теленде уҡытыу ғына етмәй. Уны иң беренсе нәүбәттә милли рухлы итеп тәрбиәләү фарыз. Ә рухлы булыуҙың тамыры үҙ тарихыңды, шәжәрәңде һәм динеңде белеүҙә. Әгәр ҙә бала үҙ халҡының тарихын белһә, атай-олатайҙарының шәжәрәһен өйрәнһә, унда үҙ халҡы менән ғорурланыу тойғоһо барлыҡҡа килә. Ә үҙ халҡы менән ғорурланған бала өсөн туған телде өйрәнеү изге бурысҡа әүерелә. Шуға кеше тик милли асылында ғына дини, үҙ диненә тоғро булғанда ғына милли була ала. Был ике төшөнсәне бер-береһенән айырып ҡарарға ярамайҙыр. Әхмәтзәки Вәлиди туған үҙенең "Башҡорт халҡына хушлашыу хаты"нда дин менән телде бергә бәйләп, шундай фекер әйткән:"... Дин һәм телебеҙҙе һаҡлауға ғәйрәт (көс) сарыф итегеҙ. Иң әшәке йәберләүҙәр ошо ике нигеҙҙә, йәғни дин һәм милли тел өлкәһендә эшләнәсәк..."

Хәҙерге ваҡытта үҙ туған телен белмәүселәрҙең был хәләте уларҙың ата-әсәләренең динһеҙ булыуынан килә. Тәүге быуын динһеҙ булһа, икенсе быуын - телһеҙ. Был - һуғышсан атеизмдың һөҙөмтәһе. Эйе, элек, революциянан һуң, 37-се йылдарҙа күптәр үҙ диненән баш тартырға мәжбүр ителгән. Хәҙер иһә, дингә килеү тыйылмаһа ла, күптәр аңлы рәүештә унан баш тарта.

Өс шарттан торған шундай бер дини ҡағиҙә бар:

1.Әгәр ҙә һин бер етешһеҙлек күреп ҡалһаң, уны ҡулың менән төҙәт.

2.Әгәр ҙә ҡулың менән төҙәтә алмайһың икән, телең менән төҙәт.

3.Әгәр ҙә инде ҡулың менән дә, телең менән дә төҙәтә алмаһаң, күңелең менән риза булма. Был һинең иманың зәғифлегенең билдәһе булмаясаҡ.

Бөтөн донъя ҡайҙалыр китеп барған ваҡытта, бер нәмәне лә үҙгәртә, һаҡлай алмаған хәлдә лә, исмаһам, һин үҙ күңелеңдә һаҡлап ҡалырға тейешһең.

## Дәүер сығыу йолаһы

Беҙҙең Баймаҡ төбәгендә, Һаҡмар йылғаһының урта ағымында мәрхүмде һуңғы юлға оҙатырға әҙерләгәндә дәүер сығыу йолаһын атҡаралар. Дәүер сығыуҙы икенсе төрлө итеп "Шәриғәт хәйләһе" тип тә атайҙар. Элек һәр кем намаҙ уҡыған, намаҙҙарын ҡалдырмаған. Хәҙер иһә, донъялар үҙгәреүе, йәшәү ритмының боҙолоуы, техниканың үҫеше һөҙөмтәһендә, күп кенә диндарҙар үҙ ваҡытында намаҙҙарын уҡый алмай ҡала. Дәүер сығыу ир балаларға 9, ҡыҙ балаларға 12 йәштән хисаплана. Әгәр ҙә ир кеше 70 йәшендә донъя ҡуйһа, 9-ҙы алып ташлаһаң - 61, ҡыҙ бала 70 йыл йәшәһә, 58 йәш була. Мәрхүмде уртаға һалалар ҙа, бер әйберҙе йә сепрәкте төрөп, уның бер йыл дауамында уҡый алмаған намаҙҙарының фидияһы тип, уны икенсе кешегә хәйер итеп бирҙем, тип, мәйеттең икенсе яғында ултырыусы алдым, һибә ҡылдым, тип, кире ҡайтара. Шулай итеп, мәрхүм ирҙең өҫтөнән 61, ҡатын-ҡыҙҙың өҫтөнән фидияны 58 тапҡыр үткәрәләр.

Шуның менән, гүйә ки, был мәрхүмдең тота алмаған ураҙалары, уҡый алмаған намаҙҙары ошо рәүешле саҙаҡа менән ҡотолдорола. Элек был йоланы барлыҡ мәрхүмдәргә лә ҡулланғандар. Хәҙерге көндә бөтөнләй ураҙа тотмаған, намаҙ уҡымаған кешегә ҡарата был йола атҡарылырға тейеш түгел.

Икенсенән, был йола христиандарҙағы ожмахҡа рөхсәт - индульгенцияға ла оҡшап китә. Дәүер сығыу барыбер ҙә индульгенция, йәғни гонаһтарҙы өлөшләтә йә тулыһынса ярлыҡауҙы һорау түгел. Шуға был йоланы бик күптәр өнәп етмәй. Йәғни дәүер сығыу йолаһына ышанып, кеше намаҙҙарын уҡымай ҡалдырмаһын, тиҙәр инде улар. Шулай ҙа, быңдай йола барлыҡҡа килгән икән, уның етди сәбәптәре булғандыр, тип тә уйланыла. Әйтәйек, башҡорттарҙың ғәскәри тормош менән йәшәүе, ихтилалдарҙа, башҡа оҙайлы яуҙарҙа йөрөү сәбәпле, уларҙың шәриғәт талаптарын теүәл үтәргә мөмкинлеге булмауы сәбәбе лә ошо йоланы барлыҡҡа килтереүе ихтимал. Мәрхүмдең туғандарының күңелен уйлау ихтыяжы ла быға сәбәпсе булыуы бар. Бында дәүер сығыу йолаһына тик уны инҡар итеү күҙлегенән генә ҡарау урынһыҙҙыр, тим. Ул - тарихи йола һәм тарихты бер нисек тә үҙгәртеп, мөхәррирләп йә инҡар итеп тә булмай.

## Ауырыу үлмәй, һау үлә...

Бөйөк шәхестәр яҡты йондоҙ булып яналар ҙа, тиҙ генә һүнәләр. Ә кемдер ғүмер буйы бысҡып йөрөй, әммә үҙенән һуң хәтерләрлек эшен ҡалдырмай. Фирҙәүес исемле ҡарындашым булды. Ул сабый сағынан үтә теремек, сая ине. Фирҙәүес башҡа балалар шикелле дүрт аяҡлап имгәкләп йөрөмәне.

Ул, әллә күҙ тейеп инде, бик иртә вафат булып ҡалды. Үтә зирәктәр, талантлылыр тиҙ яна. Әллә уларға күҙ тейә, әллә үҙҙәрен тиҙ яндыра. Кешене үҙ ғүмерендә 99 тапҡыр үлем көтә, тигән Мөхәммәт пәйғәмбәр. Кеше төрлөсә һаҡланыу саралары күреп, 99 үлем осрағын үтеп китә алған тәҡдирҙә лә, йөҙөнсөһөндә ҡотола алмай, тигән. Талантлыларҙы йә кемдер теге донъяға тиҙерәк оҙатырға теләйме, әллә улар үҙҙәрен артыҡ хәүефле хәлгә ҡуялармы, артыҡ тәүәккәлдәрме, улар 99-сы үлемгә тиклем барып етә алмай. Уның өҫтәүенә, "Ауырыу үлмәй, һау үлә" тигән мәҡәл дә бар. Минеңсә, бер туҡтауһыҙ ауырыған кешенең организмы быға өйрәнеп, үлем осраҡтарын үткәреп ебәрә алалыр. Ә һау кеше ҡапыл ауырыу килгән осраҡта, уның организмы нимә эшләргә белмәҫтән, үлемде үҙенән яҙлыҡтыра алмайҙыр. Ҡапыл көслө электр энергияһы көсөргәнеше килгәндә предохранитель яна бит, тап шуның кеүек килеп сыға.

Атайыбыҙ өйҙә юҡ саҡта әсәйебеҙгә бер әбей килде лә, шунсама йәште үтеп китһәң, шунсама йәшкә тиклем йәшәйәсәкһең, шунан тағы ла шунсама йәште үтеп китһәң, шул йәшкә тиклем йәшәйәсәкһең, тип һөйләгәйне. Тимәк, кеше йәшенең критик миҙгелдәре бар инде.

Һунарсы бер ваҡытта ла насар, ябыҡ йәнлекте атырға тырышмай бит инде. Тап шуның өсөн әжәлгә лә яҡшы кешеләр кәрәктер.

## Алдашмау яҡшы ғәҙәтме?

Бер дин әһеле урам буйлап китеп барғанда тәмәке тартып ултырыусының янына барған да, тегегә:

- Мосолманға үҙ һаулығына зарар итеүсе шөғөлдәр менән булышыуы харам, туғаным, тәмәкеңде ташлаһаңсы? - тип өндәшкән.

-Ташла, тип әйтеүе генә анһат, ташлауы анһат булһа, мин үҙем уны әллә ҡасан уҡ, һинең әйтеүҙе лә көтөп тормайынса, ташлаған булыр инем, - тип яуаплаған тәмәке тартыусы.

-Нисә йәштән алып булышаһың был насар ғәҙәт менән? - тип артабан һүҙ ялғаған дин әһеле.

-Биш йәштән алып. Тәүҙә ат тиҙәге, мүк һалып малайҙар менән тәмләп ҡараныҡ. Аҙаҡ ысын тәмәке табып, шуны атай-әсәйҙәрҙән ҡасып, йәшеренеп тартып өйрәнелде инде...

-Тәмәке һатып алыр өсөн уғрылыҡҡа барырға, кеше кеҫәһенә төшөргә лә тура килгәндер инде?

-Тәмәке тартҡы килгәндә, бөтә кәртәләр онотола. Тәүҙә атайҙың кеҫәһенән тәмәке урланыҡ, аҙаҡ әсәйҙең кеҫәһенән тәмәкелек аҡса сәлдерҙек...

-Уларҙың кеҫәһе бушап ҡалған саҡтарҙа тәмәкелек аҡсаны ҡайҙан таптығыҙ инде?

-Ҡайҙан булһын, урамда үҙебеҙҙән бәләкәй малайҙарҙы ҡурҡытып аҡсаларын тартып ала торғайныҡ...

-Әгәр ҙә улар һеҙ һорағанға ғына аҡса бирмәһәләр...

-Бысаҡ терәп ҡурҡыта инек...

-Ә улар бысаҡтан да ҡурҡмаһалар?

-Туҡмай торғайныҡ, кәрәктәрен бирә инек...

-Ә уларҙың аҡсалары булмаһа?

-Икенсе юлы туҡмалмаҫ өсөн улар кеҫәһенә аҡса һалып йөрөй торғайны...

Дин әһеле тәмәке тартыусы егет янынан китеп барған. Намаҙ уҡыған сағында ул Аллаһы Тәғәләгә шундай һүҙҙәр менән мөрәжәғәт иткән:

-Эй, Аллам, мин бөгөн шундайын һоҡланғыс егет менән осраштым. Уның иң күркәм сифаты - ул алдаша белмәй. Ул, бәлки, күп кенә тәртипһеҙлек ҡылалыр, насар ҡылыҡлы кешеләргә эйәреп закондарҙы боҙалыр, әммә уны бер кем дә алдашырға мәжбүр итә алмай. Ул - хәҡиҡәткә тоғро кеше. Ҡиәмәт көнө еткәндә алдашыуҙың ни икәнен дә белмәгән ошо кешегә ҡарата мәрхәмәтле булһаң ине, Аллам...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Хәҙрәтебеҙҙең вәғәз-нәсихәттәре бихисап. Әлегә уның һөйләгәндәре буйынса үҙ фекерҙәрен белдереүселәр булһа, рәхим итһен. "Киске Өфө" сәхифәләре ошондай вәғәз-нәсихәттәр, уй-фекерҙәр өсөн һәр ваҡыт асыҡ. Иншалла!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**яҙып алды.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## "Мега тормош". 30 көнлөк программа

### Егерменсе көн

**Беренсе бүлек: аҡыл. Үҙ стандарттарыңды күтәреү**

Бөгөн һеҙ бөтөн тормошоғоҙҙо үҙгәртеүгә һәләтле ҡарар ҡабул итергә тейешһегеҙ: һеҙ планканы күтәрәһегеҙ. Үҙегеҙҙән нимә теләйһегеҙ, тәнегеҙҙе нисек күнектерәһегеҙ, мейегеҙгә ниндәй уйҙар индерәһегеҙ - тимәк, бөтөн тормош рәүешегеҙҙең стандарттарын күтәрәһегеҙ. Урталыҡ менән килешмәгеҙ. Тормошта ысын мәғәнәһендә камиллыҡҡа өлгәшергә тигән ныҡлы ҡарарға килегеҙ. Тормош камиллығы стандарттарын булдырыуҙың биш төрлө аҫҡысы бар.

а) Көйләнешегеҙҙе үҙгәртегеҙ. Уңышлы кешеләрҙең күпселеге үҙен шундай йүнәлешкә көйләгән: был уларға беренсе урындан башҡаны күҙ алдына ла килтерергә ирек бирмәй.

б) Үҙегеҙҙе бөйөк шәхес итеп хис итегеҙ. Эшегеҙҙә, тормошоғоҙҙа көн һайын үҙегеҙҙең яңы стандарттарҙы раҫлау буйынса бәләкәй генә аҙымдарығыҙҙы яһай башлағандан һуң бер нисә ай үткәс тә артҡа сигенергә юл юҡлығына инанырһығыҙ.

в) Яңы стандарттарығыҙ хаҡында башҡаларға иғлан итегеҙ.

г) Үткән һабаҡтарығыҙҙы онотмағыҙ. Оноторға тип ҡарар ҡылған элекке стандарттар һәм зыянлы ғәҙәттәрегеҙ иҫегеҙгә төшкән һайын үҙ-үҙегеҙгә ғорурлыҡ менән"Үткәндәргә ҡайтыу юҡ!" тип ҡабатлағыҙ.

д) Башҡаларҙы яңы стандарттар ҡаҙаныштарына йәлеп итегеҙ.

**Икенсе бүлек: тән. Тыныс тән - һил күңел**

"Мега тормош" программаһында үҙеңдә юғары ҡаҙаныштарға өлгәшеүҙе тәьмин итеүсе асыҡ һәм тыныс аҡыл йүнәлеше булдырыуҙың ни тиклем мөһим булыуы бер нисә тапҡыр һыҙыҡ өҫтөнә алынды. Был практика аша килә. Иғтибар һәм аҡыл көсөн тупларға булышлыҡ итеүсе күнекмәләр комплексы хаҡында һеҙ беләһегеҙ инде. Үҙ аҡылығыҙ һағында уяу тороғоҙ һәм ныҡ булығыҙ: һеҙҙең күнектерелгән аҡылығыҙға бер ниндәй ҙә насар уй үтеп инә алмаһын. 16-сы көнөгөҙҙәге кеүек үк, мини-ял алығыҙ һәм тыныслыҡҡа өлгәшеү ысулдарын ҡулланып, күнекмәләр үткәрегеҙ, аҙаҡ уны туғыҙ көн буйына ҡабатлағыҙ.

**Өсөнсө бүлек: характер. Уңышҡа өлгәшеү өсөн "мейе һөжүме"**

Бөгөн кис 20 минут ваҡыт табығыҙ һәм үҙегеҙҙең "Уңыш журналы"н алығыҙ. Тормоштан нимә алырға теләүегеҙҙе исемлек итеп төҙөп яҙығыҙ. Ҡасандыр үҙегеҙ хыялланған бөтөн нәмәне шул исемлеккә индерегеҙ. Хәҙер, тәрән тын алыу һәм көсөргәнештән арыныуҙың берәй техникаһын файҙаланып, үҙегеҙҙе көсөргәнештән тулыһынса бушаныу хәленә еткерегеҙ. Бөтөн көсөргәнеш һәм ваҡ-төйәк уйҙар, таң яҡтыһына юл асып, офоҡтан юғалған болоттар һымаҡ, мейегеҙҙе ташлап китеүен тойоғоҙ. Тыныслыҡ хәленә өлгәшеп, уйығыҙҙа үҙегеҙҙе исемлеккә яҙылған бөтә нәмәне лә эшләп, нимә ниәт иткәндең барыһына ла өлгәшкән итеп тойоғоҙ. Нимә теләгәнегеҙҙе асыҡлағас та кисекмәҫтән ошо хыялығыҙҙы бойомға ашырыу буйынса эш башлағыҙ.

**Робин ШАРМА.**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# КҮГӘРСЕН РАЙОНЫ




**Горизонталь буйынса:** 1. Хеҙмәттәге урын, рәсми дәрәжә. 3. Бурысҡа алыуҙы иҫбатлаусы ҡиммәтле ҡағыҙ. 6. Итальян билмәне. 11. Ҡушаматы Иван Грозный булған бөйөк чех теннисcыһы. 12. "Аш ҡәҙерен белмәһәң, (...) бирер яфанды". 13. Күңелһеҙләнгәндә төшә торған ағза. 14. Бер нәмәнең бик бәләкәй өлөшө. 15. Фотоны ҡара. 18. Фотоны ҡара. 21. Фотоны ҡара. 29. Ҡөрьәндең бәләкәй генә китап рәүешендә төпләнгән етенән бер өлөшө. 28. Композитор Айрат Ҡобағошовтың тыуған ауылы. 29. Батшаның күҙе (...)ға туймай. 31. Фотоны ҡара. 33. Фотоны ҡара. 34. Алыҫ Көнсығыш диңгеҙҙәре балығы. 35. Ҡатын-ҡыҙҙарға исемен биргән баҡса сәскәһе. 36. Кәмһетелеүҙән тыуған әсенеү тойғоһо. 37. Ноябрҙә ҡар булһа, (...)ҙа көндәр ямғырлы торор. 39. Емерелеп төшкән ер. 42. Бикбулат ауылында тыуған яҙыусы, "Зәңгәр сатыр"романының авторы. 45. 46-сы пунктты белмәгән кеше өсөн оят хәл. 47. Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премия кемгә бирелә? 50. Ҡабан сусҡалары яратҡан урман. 55. Кешенең рухи хәле, кәйефе. 56. Фирүзә Аллаярованың олатаһы. 57. Ҡаһирәле дәүләт. 58. Бер төйөндән айырылған тармаҡ. 59. Кеше йөҙлө ат булған мифологик зат. 60. Фотоны ҡара. 61. Михаил Калашниковтың ҡоралы.

**Вертикаль буйынса:** 1. Картаның аҫҡы мөйөшөндәге кәсер. 2. Фотоны ҡара. 4. "Етем балаға (...) ҙа аш". 5. Рәсәйҙең "кәләштәр ҡалаһы". 7. Солоҡсоның бауы. 8. Фотоны ҡара. 9. "Киске Өфө"нөң сығасаҡ һаны тураһында радионан тапшырылған белдереү. 10. "Һәр кемдең үҙ (...) һы үҙенә яҡын". 16. Атаһы тарафынан ҡыҙға бирелгән, килен артынан килгән мал. 17. "Ағайҙыҡы алғансы, (...)неке елгәнсе". 19. Дөрөҫ булмаған хәбәр, ялған һүҙ. 20. Ҡыр һарымһағы. 22. Байкал артындағы өлкә. 23. Бит, итек майы. 24. Фотоны ҡара. 25. Салауат театры артистары араһындағы Наҙгөл. 27. Ике башлы киртекле, ҡыҙҙар шуға интекте. 28. Канау. 30. Америкала йәшәгән һирәк осрай торған торна. 32. Көтөүсе бисәһе биҙәнер саҡ. 33. Тырыштан тир кипмәҫ, ялҡауҙан (...) китмәҫ. 37. Фотоны ҡара. 38. Һыуыҡ тейеп, сөскөрткән ауырыу. 40. Ата менән инә затҡа айырыу билдәһе. 41. Еләк, емеш. 43. "Күңеленә килгән бар (...)не һөйләмә". 44. "(...)һыҙ башҡа алтын бүрек файҙа бирмәҫ". 45. Гараждағы инженер. 46. Мортаза. 48. Оса нимә ул? 49. Иң нәҙек ҡатын-ҡыҙҙар тауышы. 51. Фотоны ҡара. 52. Аптырарлыҡ, ғәжәп нәмә; мөғжизә. 53. Буй балаҫ. 54. Ауыр ҡайғылы, фәжиғәле хәл.

**Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.**

## ИҒЛАН

Баймаҡ районының 2-се Эткол ауылында изге йорт мәсеткә нигеҙ һалынды. Сит яҡтарҙа йәшәүсе яҡташтарға мәсет төҙөүҙә ярҙам итеүегеҙҙе һәм изге эшкә үҙ өлөшөгөҙҙө индереүегеҙҙе һорайбыҙ.

Беҙҙең иҫәп: **406 178 106-060003 92-301**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

***1435 һижри йыл.***

| Ноябрь - декабрь (Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш сыға | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 25 (22) дүшәмбе | 8:38 | 10:08 | 14:30 | 16:27 | 17:57 | 19:27 |
| 26 (23) шишәмбе | 8:39 | 10:09 | 14:30 | 16:26 | 17:56 | 19:26 |
| 27 (24) шаршамбы | 8:41 | 10:11 | 14:30 | 16:25 | 17:55 | 19:25 |
| 28 (25) кесе йома | 8:43 | 10:13 | 14:30 | 16:24 | 17:54 | 19:24 |
| 29 (26) йома | 8:45 | 10:15 | 14:30 | 16:23 | 17:53 | 19:23 |
| 30 (27) шәмбе | 8:46 | 10:16 | 14:30 | 16:22 | 17:52 | 19:22 |
| 1 (28) йәкшәмбе | 8:48 | 10:18 | 14:30 | 16:21 | 17:51 | 19:21 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

ҮӘТ ӘЙ!

# ЙОМОРТҠА АЛТЫНҒА ӘЙЛӘНӘ...

**Федераль монополияға ҡаршы хеҙмәт илдең бөтә төбәктәрендә лә йомортҡа баҙарында хаҡтарға анализ яһауға тотондо. Был "Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән граждандарҙан килгән күп һанлы ялыуҙарға" бәйләнгән.**

Рәсәй ҡошсолоҡ союзы мәғлүмәттәре буйынса, ауыл хужалығы етештереүселәре йомортҡаға хаҡты 2013 йылдың ғинуар-сентябрендә - туғыҙ процентҡа, ә октябрҙә уртаса ун процентҡа арттырҙы.

Башҡортостанда, статистика мәғлүмәттәренә ярашлы, октябрҙә тауыҡ йомортҡаһына хаҡ артыуы 31,2 процент тәшкил итте. Сентябрҙә бер тиҫтә йомортҡа республика буйынса уртаса 36,82 һум торҙо, ә октябрҙә - 48,84 һум. Ноябрҙә хаҡтар артыуын дауам итте. 5 ноябргә ҡарата уртаса хаҡ 50,1 һумға етте.

Рәсәй Федераль монополияға ҡаршы хеҙмәте, йомортҡаға хаҡтар продукцияның үҙкиммәте 20-25 процентҡа үҫеүе һөҙөмтәһендә артты, тип билдәләй. Үҙкиммәткә мал аҙығының ҡиммәтләнеүе (30 проценттан ашыуға), электр энергияһына һәм газға тарифтарҙың артыуы (10 процентҡа) йоғонто яһаны. Тикшереүҙәр барышында хаҡтарҙың ҡапыл күтәрелеүе монополияға ҡаршы закондарҙы боҙоуға ла бәйле түгелме икәнлеге асыҡланасаҡ.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**23 ноябрь "Маҡтымһылыу, Әбләй һәм Ҡара юрға"** (Т.Ғарипова), мюзикл

**24 ноябрь "Бәхет хаҡы"** (Х.Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама

**26 ноябрь "Ҡоҙаса"** (Б.Бикбай, З.Исмәғилев), музыкаль комедия

**27 ноябрь "Руди - never off..."** (А.Абушахманов), ғүмер миҙгелдәре

**27 ноябрь "Әлифбанан бер себеш"** (А.Кивиряхк), монодрама

**28 ноябрь "Әхмәтзәки Вәлиди Туған"** (Н.Асанбаев), тарихи драма

**29, 30 ноябрь "Маҡтымһылыу, Әбләй һәм Ҡара юрға"** (Т.Ғарипова), мюзикл

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**23, 24 ноябрь "Чиполлино"** (Д.Родари), мажара. Башлана 12.00, 24 ноябрь башлана 14.00

**27 ноябрь "Өлкән ул"** (А.Вампилов), комедия

**28 ноябрь "Автобус"** (С.Стратиев), комедия

**29 ноябрь "Йәнкиҫәккәйем"** (Т.Миңнуллин), музыкаль комедия

**30 ноябрь "Нух кәмәһе"** (У. Хуб), ғаилә өсөн тамаша. Башлана 14.00

**46-сы һандағы кроссворд яуаптары: Горизонталь буйынса:** 1. Ҡарымта. 3. Айытҡолов. 6. Синоним. 11. Пенал. 12. Толом. 13. Ҡурай. 14. Рәсүл. 15. Варшава. 15. Ярлыҡапов. 21. Сабитов. 26. Етәксе. 28. Сиркәү. 29. Ҡаш. 31. Әхирәт. 33. Гөлсөм (Бикбулатова). 34. Оторо. 35. Сәлмән (Ярмуллин). 36. Ауырыу. 37. Таш. 39. Оратор. 42. Робағи. 45. Парашют. 48. Буканова. 50. Квартал. 55. Дауыл. 56. Урман. 57. Быраү. 58. Окапи. 59. Әжекәй. 60. Нәҙерғолов. 61. Ҡарауыл.

**Вертикаль буйынса:** 1. Ҡылысов. 2. Тапаҡов. 4. Йылайыр. 5. Онтарио. 7. Ишмулла (Дилмөхәмәтов). 8. Моратов. 9. Инари. 10. Аласа. 16. Рәшә. 17. Ағас. 19. Ырғаҡ. 20. Артыш. 22. Бали. 23. Трек. 24. Мелкоедов. 25. Күскилдин. 27. Ейәнсәр. 28. Самауыр. 30. Айова. 32. Тон. 33. Гоа. 37. Төйәк. 38. Шатун. 40. Амур. 41. Отош. 43. Олҡа. 44. Азат (Ярмуллин). 45. Пәрәнжә. 46. Юлдыбай. 48. Балауыҙ. 49. Внуково. 51. Винница. 52. Либерал. 53. Гудрон. 54. Умиак.

СӘНҒӘТ ДОНЪЯҺЫ

# ИР-ЕГЕТ ЙӘШЕ МЕНӘН ТҮГЕЛ...

## эше менән билдәле



**Ғәҙәттә, йырҙары халыҡ араһында нисек кенә билдәле булмаһын, уның көйөн яҙыусы тамашасының иғтибарынан ситтә ҡалыусан була. Әммә бөгөнгө ҡунағыбыҙ - Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, билдәле композитор Наил Шаймәрҙәнов һис тә ундайҙар рәтенән түгел, барыһы ла уны патриотик йырҙары аша яҡшы танып белә. Ошо арала 55 йәшлек күркәм юбилейына арнап, баш ҡала тамашасыһы өсөн концерттар әҙерләү менән мәшғүл композиторға өс һорау менән мөрәжәғәт иттек.**

**Тамашасы Һеҙҙе ниндәй йырығыҙ аша таный?**

- Башҡортостан тамашасыһы мине "Башҡортостан - гөлөбөҙ" йыры аша яҡшы белә, тип әйтһәм, һис яңылыш булмаç. Ул минең визит карточкам. Шунан һуң, Фәдис Ғәниев башҡарыуында "Эй, дуҫтарым, уф тимәгеҙ", Айҙар Ғәлимов башҡарыуында "Эх, алмаһы" йырҙары ла популяр. "Бәхеттә, шатлыҡта" тигән йырҙы иһә йырламаған кеше ҡалманы шикелле. Күреп йөрөүемсә, Радмир Туйсин башҡарыуындағы "Ташламағыҙ тыуған йортто", Венера Рәхмәтуллина башҡарыуындағы "Ир-егеттең йәшен һанамайҙар" исемле йырҙарым да халыҡҡа бик оҡшай.

**Шоу-бизнес заманында милли сәнғәт тә ҙур үҙгәрештәр кисерергә мәжбүр, башҡорт йыр сәнғәтенең, эстрадаһының бөгөнгө торошона ниндәйерәк баһа бирер инегеҙ?**

-Бөгөн талантлы йәштәр күп ул, әммә уларҙың ижады күберәк заманса техника менән бәйле, жанрҙар йәһәтенән дә Европаға күҙ төбәүҙе отошлораҡ тип табалар. Уларҙың моңға үҙ ҡарашы, үҙҙәренең юлдары бар. Бер нәмәне генә ҡабул итеп еткермәйем - мондо аңлаусылар һирәк араларында. Ә мин икенсерәк ваҡытта, һуғыштан һуңғы йылдарҙа тыуған быуын вәкиле. Хәҙер бит теләгән йырыңды теләгән урыңда телефондан ғына тыңлап, видеоһын ҡарап була. Беҙ спорт менән шөғөлләнеп, гитара, тальян, гармун, баян моңона ҡушылып йырлап үҫтек - шуға ла монды аңлауыбыҙ ҙа башҡараҡ, ул беҙҙең өсөн илаһи, ул һинең күңелең сағылышы. Ошо моңобоҙҙо юғалтмаһаҡ, милли сәнғәт тә үҫеш кисерәсәк. Ситтәр беҙҙе тап моңобоҙ өсөн ихтирам итә, хатта Башҡортостан йырсылары моңлораҡ, тигән ҡараш та йәшәй.

**Кемдендер ижадында лирик йырҙар өҫтөнлөк итә, ә Һеҙҙең йырҙарығыҙҙың башлыса тыуған яҡҡа һөйөү тураһындағы булыуының сәбәбе нимәлә?**

-Сөнки мин үҙ еремде, үҙ республикамды яратам, ғөмүмән, илһөйәрлек тойғоһо һәр кеше өсөн төп сифаттарҙың береһе булырға тейеш. Ҡайҙа ғына саҡырһалар ҙа, нимә генә вәғәҙә итһәләр ҙә, Башҡортостанды ташлап китеү уйы башыма инеп сыҡҡаны ла юҡ. "Башҡортостан - илебеҙ, йәшә, тыуған телебеҙ" - бынан да матурыраҡ һүҙҙәрҙең булыуы мөмкин түгел.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Наил Шаймәрҙәнов үҙенең ижадын һөйөүселәрҙе моң байрамына саҡыра. 2 декабрь Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында үтәсәк концерттарында ижадташ дуҫтары - Айҙар Ғәлимов, Хәниә Фәрхи, Хәсән Усманов, Гөлсөм Бикбулатова, Резедә Әминева, Фәрүзә Урманшин, Вәсилә Фәттәхова, Илшат Яппаров, Венера Рәхмәтуллина, Фәдис Ғәниев, Лилиә Биктимирова һәм башҡалар ҡатнашасаҡ.**

# ЙӘШТӘРҘЕ САҠЫРА



**Өфөлә йәшәүсе һәм белем алыусы башҡорт йәштәренә тәғәйенләнгән тамашаларҙың береһе 24 ноябрҙә "Өфө уттары" күңел асыу комплексында үтәсәк. Уларҙы популярлыҡ яулап өлгөргән йәш башҡарыусы Ғайсар МИҢЛЕҒОЛОВ үҙенең "Бәләкәсем" тип аталған беренсе альбомының исем туйына саҡыра.**

Ғайсарҙың әйтеүе буйынса, бөгөн башҡорт эстрадаһында поп йүнәлеше яҡшы үсешкән һәм йәштәр тап ошо стилдә яҙылған йырҙарҙы тыңларға хуп күрә. Шуға ла Өфө сәнғәт училищеһын тамамлаған йәш егет ижадын ошо йүнәлештә алып барырға ҡарар итә.

-Альбом яҙҙырыу өсөн ике йылдан артыҡ ваҡыт китте. Йырҙар бер үк булмаһын өсөн төрлө аранжировкалаусылар, мәҫәлән, бөгөнгө эстрадала исемдәре яҡшы билдәле Радик Юлъяҡшин, Раил Өмөтбаев, Ғәлинур Юламанов, Риф Арыҫлан менән эшләнем. Йәғни, үҙемдең стилемде эҙләнем һәм таптым, тип уйлайым. Шулай уҡ быға тиклем тотонорға ҡурҡып торһам да, үҙем дә йырҙар яҙыу менән шөғөлләнә башланым, бының өсөн дә эске әҙерлек һәм өлгөрөп етеү кәрәк икән, - ти йәш йырсы үҙе.

Әйткәндәй, Ғайсар Миңлеғолов башҡорт халыҡ йырҙарын да яратып башҡара һәм киләсәктә йыр яҙғанда ҡурай кеүек милли уйын ҡоралдарын да ҡулланырға иҫәбе юҡ түгел. Әлеге мәлдә уң бер юлы өс белем биреү йортонда уҡый. "Йәш саҡта, мөмкинлектәр бар ваҡытта, һөнәр үҙләштереү ир-егет өсөн бик кәрәк", - ти ул.

Шулай итеп, Ғайсар Миңлеғоловтың тәүге концерты 24 ноябрҙә, киске сәғәт 8-ҙә башлана. Концерт программаһында Раил Өмөтбаев, Иәмил Баймырҙин, Ян Лира, "Данс", "Ника" бейеү студиялары ла ҡатнашасаҡ. Һуңынан инде башҡортса дискотекала бейеп күңел асырға мөмкин буласаҡ.

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# САТЫРМАНДАЙ ЙӘБЕШМӘ

**Дәү бирене** - дыуамал, уйламай эшләй.

**Сикәнен бирә** - ситкә тибә, үҙ итмәй.

**Ыжбан баш** - ҙур, иләмһеҙ башлы (жбан - ағас биҙрә).

**Өңкәйтеү** - күп йомшап йонсотоу.

**Эт тыҡкаһы** - нығ әрһеҙләү.

**Үрәсәһе сиселгән** - яңылышҡан, юлдан яҙған.

**Үрәпсей** - юҡҡа-барға һүҙ сығара, сабырһыҙ.

**Упсым** - бөтөнләй юҡты һөйләй.

**Тәрәш** - йөн, киндер тарағы.

**Бынса** - бигерәк инде, бынса юҡты һөйләп.

**Ирәйен китеү** - нығыныу, кеше ҡорона йәки мал ҡорона инеү.

**Сатырмандай йәбешә** - нығ бәйләнә, ҡотолоп булмай.

**Ҡаҡлығып йөрөү** - үҙенә урын тапмай, ары-бире, унда-бында һуғылып йөрөү.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ИРТӘНЕ...

## кисһеҙ маҡтама

Ирле Иҙел кискәндә, ирһеҙ ултырып ҡала.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ҡатын-ҡыҙҙан ҡурҡмаған ирҙәр генә ысын-ысындан ҡурҡаҡ.

**(Честертон).**

Ҡәҙимге кешеләр ваҡытын нисек үткәрергә белмәй яфалана, ә талантлы кешеләр ваҡытын файҙалы итеп ҡулланырға ынтыла.

**(Артур Шопенгауэр).**

Мөхәббәт - иң тоғро туғанлыҡ, донъяла унан да яҡыныраҡ бер кем дә юҡ.

**(Лопе де Вега).**

Йәш кеше закондарҙы белә, ә өлкән кеше һәр законда иҫкәрмә барлығын белә.

**(Оливер Холмс).**

Изгелекле булыу бик еңел, ә бына ғәҙел булыу - иң ауыры.

**(Виктор Гюго).**

Ярлылыҡ кешене борсоулы ғына түгел, аҡыллы ла итә.

**(Бертольд Брехт).**

Кеше үҙе атай булмайынса, ул булыуҙың ни икәнен белмәй.

**(Америка индеецтары мәҡәле).**

Кеше тарафынан тыуҙырылған мөғжизәләргә ҡарағанда ла кеше үҙе мөғжизәрәк.

**(Августин).**

Һәр кем үҙ-үҙенә дошман.

**(Анакарсис).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер һинд ҡатыны тәҙөләштә эшләп йөрөй. Ул кәрзингә кирбес тултыра ла, уны башына ултыртып, тәҙөләш майҙанының икенсе осона алып барып ауҙара. Бына бер саҡ асыҡҡан, талсыҡҡан ҡатын атлап китеп барғанда ниҙәләр абына ла, кәрзинен төшөрөп ебәрә һәм кирбестәр тирә-яҡҡа сәселә. Ул кирбестәрҙе кәрзиненә йыйып алыуын ала, ләкин кәрзинде башҡалар ярҙамынан тыш башына күтәреп ҡуя алмаған, илап ебәрә һәм Хоҙайға зарҙарын түгә-түгә ялбарыуға тотона. Хоҙай ҡатындың күҙ йәштәрен күтәрә алмайынса, йәлләп, уның алдына килеп баҫа һәм шулай ти:**

**- Мин бында, һин минән нимә эшләүемде теләйһең?**

**Ҡатын үҙенә иғтибарын йүнәлткән Хоҙайҙан барыһын да - бәхет тә, байлыҡ та, изгелектәр ҙә, ошо ауыр эштән ҡотолоу сараһын да һорай алыр ине, әлбиттә, ләкин уның үтенесе шулай була:**

**- Ошо кирбес һалынған кәрзинде минең башыма ғына мендереп ултырта алмаҫһыңмы?.."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәррирриәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаçары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 22 ноябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5006
Заказ 4414

1582218911006